ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 февраль (шаҡай) 2024

№7 (1100)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йоҡо сүлмәге**



6

**Ул ҡара алтынды...**



ҡара тир түгеп таҡҡан ғалим

8-9

**Һомай образы тынғылыҡ бирмәй...**



11

**Эй, буҙаһы, буҙаһы!**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы дуҫтарыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 873 һум 12 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә 1 апрелдән, ғәҙәттәгесә, почта хаҡтарҙы тағы арттырасаҡ икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Ошо арауыҡта гәзитебеҙә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Балаңа туған телде өйрәтергә нимә ҡамасаулай?

***Ғәзим АЛТЫНБАЕВ, өс балаһы атаһы:*** Туған телде өйрәнергә бер нәмә лә ҡамасауламай. Телгә һөйөү, тәү сиратта, ғаиләлә һалына. Атай-әсәйең, өлкән туғандар туған телдә һөйләшә икән, бәләкәстәре лә башҡортса бәләсәк.

Мин үҙем балалар үҙ телен белһен, һөйләшһен яғында ныҡ торҙом. Туған телдең функцияһы аралашыу, һөйләшеү, дәрестә яҡшы билдә алыу ғына түгел бит. Уның мәғәнәһе тәрәндәрәк. Тап үҙебеҙҙең туған телдә һөйләшеп, күңелебеҙҙе сафландырабыҙ, туғанлыҡ тойғоһон нығытабыҙ. Бына шуны төшөндөрөргә тырыштым балаларға.

Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, урамда башҡортса һөйләшеп китеп барғандарын ишетһәң, күңелгә рәхәт булып китә. Ә сит ерҙә йөрөгәндә бигерәк тә ҡәҙерле ул туған теләндә һөйләшкәндәрен ишетеү. Армияла хеҙмәт иткәндә хәрби часта башҡорттар барлығын белеп, эҙләп табып, ваҡыт булған һайын осрашып, рәхәтләнеп һөйләшә торғайныҡ. Был аралашыу миңә Башҡортостаным менән яҡынлаштырҙы, туғандарым менән һөйләшеү йылыһын бирҙе, ауырыған ваҡытта тиҙерәк һауығырға булышлыҡ итте.

Шөкөр, балаларымдың барыһы ла үҙ туған телен белә. Үҙ милләте вәкилдәре менән ғаилә ҡорҙолар. Хәҙер балалары ла башҡортса һөйләшәләр. Туған телдә һөйләшер, уҡыр, белем алыр өсөн уларға бер нәмә лә ҡамасауламай. Башҡорт мәктәбендә уҡымаһалар ҙа, конкурстарҙа ла, олимпиадаларҙа ла ҡатнашалар. Хәҙер республикала туған телдәрҙе үҫтереү өсөн төрлө программалар, проекттар, гранттар булдырылған. Шуға, төрлө һылтаныуҙар табып, балаһын туған теленән мәхрүм иткән атай-әсәйҙәргә аптырарға ғына ҡала.

*Фәнил БҮЛӘКОВ*

Туған телем!

## ЙӘНЕМ МОҢО

*Йәнем моңо минең - башҡорт теле,*
*Рухым сәңгелдәге һин, телем!*
*Тик тиңләшер затлы хазинама -*
*Тыуған ерем, әсәм һәм илем.*

*Тәүге тындан һуңғы һулышҡаса*
*Иркәләр тик ғәзиз телгенәм.*
*Үҙ теленән күпһенгәндәр генә*
*Бер йәнемде меңгә телгеләй.*

*Тормошома изге ҡотто биргән,*
*Ҡотло иткән беҙҙең ғүмерҙе,*
*Туған телем әсә һөтө кеүек*
*Һәр сабыйға шундай ҡәҙерле.*

*Туған телем - әсә һөтө үҙе,*
*Милләтемдең рухы, моң, ҡото.*
*Күңелдәрҙе беҙҙең туған иткән,*
*Милләт иткән телем башҡортто.*

*Айырмайыҡ бары сабыйҙарҙы*
*Ата-бабам биргән ырыҫтан.*
*Онотмайыҡ оло хәҡиҡәтте -*
*Тыумаған бит балаң урыҫтан.*

*Башҡорт теле - нурлы Уралымда*
*Алтындарға бирмәҫ хазина.*
*Халҡым рухын сағылдырып күктә*
*Сая бөркөттәре ҡағына.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨФӨНӨҢ ҮҘЕНЕҢ ДӘ...

## атҡаҙанған уҡытыусылары буласаҡ!



**Йыл да үткәрелә торған, әммә һис кенә лә ялҡытмаған һәм ҡыҙыҡһыныуҙы баҫмаған саралар бар. Педагогтарҙың һөнәри оҫталығын һынай торған "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы" һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурстары ла шундайҙарҙан. Ярыштарҙың быйылғы еңеүселәре ошо көндәрҙә Өфөнөң Ҡала мәҙәниәт һарайындағы тантана барышында билдәләнде.**

Быйыл һөнәри конкурстарҙа Өфөнөң 62 уҡытыусыһы ҡатнашҡан, шуларҙың 27-һе - йәш педагог. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларынан 10 кеше көс һынашһа, башҡа педагогтар араһында 13 төрлө предмет буйынса белем биреүселәр ярышҡан. Үҙе менән таныштырыу, дәрес биреү, оҫталыҡ дәресе уҙғарыу, түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыу кеүек йыл да ойошторола торған һынауҙарға быйыл "Уҡыусылар менән әңгәмә" тигән яңыһы ла өҫтәлгән. Унда һәр уҡытыусыға айырым бер тема тәҡдим ителгән һәм 20 минут эсендә уҡыусылар менән ошо турала һөйләшергә, аңлатырға, фекер алышырға кәрәк булған.

Йәш башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында билдәләнгән "Педагогик өмөт" номинацияһында еңеүсе тип табылған 127-се мәктәптән Әлиә Солтанова әйтеүенсә, таныш булмаған уҡыусыларға дәрес үткәреү генә түгел, ә аралашыу педагогтың һәр баланың күңеленә юл таба белеүен асыҡларға ярҙам иткән. "Мин өсөнсө йыл ғына эшләйем. Шулай ҙа был конкурста ҡатнашырға йөрьәт иттем һәм еңеүемә бик шатмын. Минең кеүек һәр йәш уҡытыусыға ошо һынауҙы үтеп, үҙен күрһәтеп ҡарарға кәңәш итәм. Сөнки унда һине һынауҙан тыш, бик күп тәжрибә лә уртаҡлашалар, яңы таныштар, матур дәрестәр үтә", - тип шатлығы менән бүлеште Әлиә Рәшит ҡыҙы.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

*Гөлназ ҠОТОЕВА*

## МЕҢ ЙӘШӘ!

*Туған телем минең, аҫылым,*
*Балҡып ҡына китер асылым,-*
*Башҡортсалап берәү өндәшһә,*
*Бер туғаны кеүек һөйләшә.*

*Башҡорт теле - тыуған илгенәм,*
*Иркәләп тә һөйөр елгенәм.*
*Әсәм ҡулдарының наҙы ул,*
*Күңелемдең шаулы яҙы ул.*

*Башҡорт телем минең - сабырлыҡ,*
*Инәйҙәрҙән ҡалған таһыллыҡ,*
*Башҡорт теле - минең тамырым,*
*Селләләрҙә көткән ямғырым.*

*Башҡорт теле - минең улғынам,*
*Киләсәккә илтер юлғынам.*
*Башҡорт теле - минең киләсәк,*
*Килер быуындарға бирәсәк.*

*Башҡорт телем минең, аҫылым,*
*Балҡып ҡына китер асылым,-*
*Башҡортсалап берәү өндәшһә,*
*Йәнем ирей.*
*Телем, мең йәшә!*

*Хәсән НАЗАР*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

*Башҡорт теле! Уралымда*
*Затым өсөн һин рух түле.*
*Миңә һин - яҙмыш, ә кемгә -*
*Сәхнәләгесә роль теле.*

*Башҡорт теле! Тарихында*
*Бер кемгә лә юҡ ләғнәте.*
*Тик үҙенсә иретмәктә*
*Көсәнмәне кем ләғәте.*

*Башҡорт теле! Һин - аҡбуҙат,*
*Һин - һандуғас, һин - ыласын.*
*Һәр өнөң ҡурай моңолай,*
*Барыһы тәбиғи ысын.*

*Башҡорт теле! Салауат теле,*
*Һәҙиә теле, Мостай теле.*
*Уларға бит "Урал батыр "*
*Иң шөһрәтле остаз ине.*

*Башҡорт теле! Мәктәптәргә -*
*Һаман ҡыҫырыҡлау еле.*
*Донъя тармы? Былай ҙа бит*
*Вазифалы урыҫ теле.*

*Башҡорт теле! Быуаттарҙы*
*Үтеп тә һин, сарланып та,*
*Яҙҙыртаһың минән шиғыр,*
*Ғорурланып, зарланып та.*

*Башҡорт теле! Уралымда*
*Затым өсөн һин рух түле.*
*Һин бит беҙҙең хәтер иле,*
*Мәңге йәшә, башҡорт теле!*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨФӨНӨҢ ҮҘЕНЕҢ ДӘ...

## атҡаҙанған уҡытыусылары буласаҡ!



*Бәйгелә ҡатнашыусы башҡорт теле уҡытыусылары.*

**(Башы 1-се биттә).**

"Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2024" конкурсында 110-сы мәктәптең инглиз теле уҡытыусыһы Марина Лихачева еңеүсе тип табылды. Был конкурс сиктәрендә ойошторолған рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһындағы ярышта 86-сы гимназиянан Ольга Бородина, татар теле һәм әҙәбиәте буйынса 101-се мәктәп уҡытыусыһы Зөлфиә Сафина еңде. Ә бына "Педагогик дебют" номинацияһында Г. Мушников исемендәге 74-се мәктәптең сит телдәр уҡытыусыһы Владлена Павлова беренсе урынға лайыҡ булды. Республика кимәлендә баш ҡалабыҙ намыҫын яҡлаясаҡ педагог иһә, абсолют еңеүсе - 105-се гимназияның тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү уҡытыусыһы Сергей Наумов инҙәренә йөкмәтелде. Ә бына "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2024" тип В. Паращенко исемендәге 51-се белем биреү үҙәге уҡытыусыһы Азалия Хурамшина табылды. Шулай уҡ асыҡ һайлауҙар ярҙамында билдәләнгән "Танылыу" номинацияһында 68-се лицей уҡытыусыһы Елена Төхвәтуллина менән Дан орденының тулы кавалеры Зотов исемендәге 46-сы лицей уҡытыусыһы Көнһылыу Хәсәнова иң күп тауыш йыйҙы.

- Был конкурста тәүге тапҡыр ҡатнашам, ул һәр яҡтан да үҙеңде асырға мөмкинлек биреүе менән күңелемә ятты. Шәхсән минең өсөн уның бөтә һынауҙары ла еңел үтте, сөнки ярҙам итеүсе командам бик көслө булды. Быйыл индерелгән "Уҡыусылар менән һөйләшеү"ҙә миңә "Тарихи хәтер" тигән тема тәҡдим ителде. Уҡыусылар ике командаға бүленеп, квест формаһында ойошторолған 20 минутлыҡ әңгәмә барышында башҡорт халҡының бөйөк шәхестәре тураһында мәғлүмәтле була алды. Улар төрлө эштәрҙе атҡарҙы, "Шайморатов генерал" йырын йырлап ишеттерҙе. Уҡыусыларҙың әүҙем булыуы, саф башҡортса һөйләшеүе күңелемә ятты. Ә бына оҫталыҡ дәресендә лингвокультурологик планда башҡорт телен уҡытыу, концепт менән эшләү тураһында тәжрибәмде уртаҡлаштым. Ғөмүмән, конкурс минең өсөн яңы киңлектәр асты, коллегалар менән тупланып, төрлө проект эштәрендә лә ҡатнашырға һөйләшеп килештек", - тине конкурс еңеүсеһе Альбина Хурамшина **(1-се биттә һүрәттә)**. Ул шулай уҡ педагог булараҡ 7 йыл хеҙмәт стажы туплауы, белем усағында аҙнаһына бер сәғәт башҡорт дәүләт телен уҡытыуы тураһында ла һөйләне һәм әлегә был дәрестәр баш ҡалала йәшәгән төрлө милләт балаларын Башҡортостан, башҡорт халҡы тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте менән таныштырыуҙың берҙән-бер мөмкинлеге булыуын әйтте.

Тантаналы сарала еңеүселәрҙе Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев, уның урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева, БР мәғариф министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры, жюри рәйесе Әлфис Ғаязов, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Мәғариф буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Заһир Хәкимов, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ проректоры Алмаз Мостаев, Өфө күп профилле һөнәри колледж директоры Сынтимер Баязитов һәм башҡа төрлө ойошмаларҙың етәкселәре тәбрикләне. Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев уҡытыусылар алдында сығыш яһауы һәр ваҡыт тулҡынландырғыс булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Был һәр педагогҡа ҡарата оло ихтирам кисереүҙәндер. Һис шикһеҙ, эшегеҙ мөһим, бөйөк. Бөгөн яугир-интернационалистарҙы хәтергә алыу көнө. Ул саҡта мәктәп Ватаныбыҙ һағына торған быуынды тәрбиәләгән, бөгөн дә, моғайын, һеҙҙең уҡыусылар араһында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар барҙыр. Был һеҙ барыһын да дөрөҫ эшләгәнһегеҙ, илебеҙҙең берҙәмлеге, бөтөнлөгө, көслө һәм ҡаҡшамаҫ булыуы өсөн көрәшеүселәрҙе үҫтергәнһегеҙ, тигәнде аңлата. Был йәһәттән дә һеҙгә оло рәхмәттәремде еткерәм. Барығыҙҙы ла еңеүҙәрегеҙ менән ҡотлайым һәм баш ҡалабыҙҙың юбилейын билдәләү йылында уҡыусыларға күберәк уның тарихын һөйләгеҙ, яратҡан ҡалабыҙ тураһында белһендәр, тигән теләгемде еткерәм", - тине Ратмир Рәфил улы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев БР Мәғариф министрлығы менән берлектә баш ҡала педагогтарының һөнәри уңыштарын билдәләгән өр-яңы награда булдырыу мәсьәләһе ҡаралыуын телгә алды. Әлеге ваҡытта был "Өфө ҡалаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән исем булараҡ тәҡдим ителгән. Тимәк, киләсәктә баш ҡала уҡытыусыларының тағы ла дәртләнеп, ең һыҙғанып эшләргә сәбәптәре артасаҡ һәм баш ҡала мәғарифы артабан да үҫешәсәк. Кешенең тырышлығын ваҡытында күрә, эшен ваҡытында баһалай белгән ерҙә башҡаса булыуы ла мөмкин түгел.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2024 йылдың октябрендә Башҡортостандың баш ҡалаһында Волга буйы федераль округының студенттар отрядтары слеты була. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған документҡа ярашлы, Өфөләге слет Рәсәй студент отрядтары хәрәкәтенең 65 йыллығына һәм "Рәсәй студент отрядтары" ойошмаһының 20 йыллығына арнала. Республика Хөкүмәтенә Өфөлә Волга буйы федераль округының студент отрядтары слетын үткәреүгә бәйле сығымдарҙы финанслауҙы тәьмин итеү бурысы йөкмәтелде.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин "Ауыл табибы", "Ауыл фельдшеры" һәм "Ауыл уҡытыусыһы" программаларын 2030 йылға тиклем оҙайтырға ҡушты. Был хаҡта Кремль сайты хәбәр итә. "Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенә: "Ауыл табибы", "Ауыл фельдшеры" һәм "Ауыл уҡытыусыһы" программаларын ғәмәлгә ашырыу ваҡытын 2030 йылға тиклем оҙайтырға", - тиелә документта. Докладтарҙы 25 сентябргә һәм 20 декабргә тиклем тапшырырға кәрәк. Бының өсөн яуаплы итеп Премьер-министр Михаил Мишустин тәғәйенләнде.

✓Рәсәй мәктәптәрендә һуңғы ҡыңғырау байрамы һәм сығарылыш кисәләренең көнө иғлан ителде. Илдең мәғариф министры Сергей Кравцов хәбәр итеүенсә, 2024 йылда һуңғы ҡыңғырау 24 һәм 25 майҙа яңғырай, ә сығарылыш кисәләре 28 һәм 29 июндә була. Хәбәр иткәнебеҙсә, 20 февралдә республикала юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү кампанияһы буйынса брифинг уҙғарылды.

✓Башҡортостан командаһы Бөтә Рәсәй Көслөләр спартакиадаһында 17 миҙал яуланы - дүрт алтын, дүрт көмөш һәм туғыҙ бронза. Шулай итеп, республикабыҙ миҙалдар һаны буйынса - алтынсы етенсе, ә алтын наградалар һаны буйынса унынсы урынды алды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 9-18 февралдә Силәбе, Төмән, Свердловск өлкәләрендә, Красноярск һәм Краснодар крайҙарында иң көслө спортсылар араһында ҡышҡы спорт төрҙәре араһында Бөтә Рәсәй спартакиадаһы уҙҙы. Спорт программаһына 14 спорт төрө буйынса ярыштар бар ине.

✓Башҡортостанда Ҡышҡы спорт төрҙәре көнө сиктәрендә уҙғарылған спорт саралары бара. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, быйыл спорт байрамының төп майҙансыҡтары - Әлшәй, Ишембай, Өфө һәм Учалы районнарында, шулай уҡ Өфөнөң Киров районында. Был майҙансыҡтарҙа коньки шыуыу спорты, шайбалы хоккей, биатлон, саңғы ярыштары һәм башҡа спорт төрҙәре буйынса турнирҙарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашырға мөмкин.

✓ *Минеңсә, телде башлап өйрәнгәндәргә һөйләмдең эйәһен, хәбәрен табыуҙар әле иртәрәк. Башҡортса ныҡлап белгәс кенә һөйләм тикшерергә мөмкин. Иң тәүҙә балаларға ябай ғына итеп аралашырға, аңлашырға өйрәтергә кәрәк.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Балаңа тыуған телде өйрәтергә нимә ҡамасаулай?

***Венер СӘҒИҘУЛЛИН, эшҡыуар, Өфө ҡалаһы:*** Мин баш ҡаланан ғына түгел, хатта район үҙәгенән алыҫта ятҡан бәләкәй генә ауылда 1950 йылда тыуып үҫтем. Балалар баҡсаһы ғүмерҙә булманы ауылыбыҙҙа, мәктәп башланғыс кластар өсөн генә тәғәйенләнгән ине. 5 синыфҡа район үҙәгендәге интернат мәктәпкә алып барҙылар. Унда уҡытыу урыҫ телендә алып барыла икән, йыйылған балалар ҙа төрлө милләт вәкилдәре. Үәт күрмәгәнде күрелде бит әй! Беҙ - ауылдан килгән өс малай һәм биш ҡыҙ бер ауыҙ һүҙ урыҫса белмәйбеҙ. Дәрес башланһа, ауыҙҙар асыла, күҙҙәр маңлайға менә, темаһы аңламағанлыҡтан, мейе ҡайнай. Етмәһә, класташтар үсекләшә. Ә беҙ хатта ҡайтарып яуап бирергә лә эшкинмәйбеҙ. Ауылда оло бабайҙарҙан "дүррәк", "наҙайыл" һәм башҡа һүҙҙәрҙе ишетеп йөрөһәк тә, мәғәнәһен аңламағас, ауыҙ тултырып әйтә ла алмайбыҙ.

Ҡыҙҙар сосораҡ халыҡ, улар алдараҡ үҙләштерҙе беҙҙең өсөн ят булған был телде, ә беҙ, малайҙар, байтаҡ ыҙалаһыҡ. Шунда "Балаларым булһа, мотлаҡ урыҫ телен өйрәтәсәкмен", тип үҙемә һүҙ бирҙем. Кәләш менән өс баланы тәрбиәләп аяҡҡа баҫтырҙыҡ, хәҙер ейәндәр үҫеп етеләр. Һәм бөгөн мин бала саҡта осраған хәлдең тап киреһе алдыма килеп баҫты - балаларым башҡортса бик ауыр һөйләшә. Аңлайҙар, әлбиттә, ләкин улар менән ауыҙ тултырып башҡортса һөйләшеп ултырып булмай. Ейәндәрҙе әйтеп тораһы ла түгел, улар хатта аңламай ҙа. Бының шулай булыуына минән, кәләштән башҡа бер кем ғәйепле түгел. Беҙ балаларҙы тыуған телдәрендә иркен аралашыуҙан мәхрүм иткәнбеҙ. Уларҙы үҙ халҡынан айырғанбыҙ. Терһәк яҡын да бит, тешләп булмай...

***Мәйсәрә СӘЛИМОВА, ике ейән өләсәһе, Мәләүез ҡалаһы:*** Ейәндәрем, ҡатнаш ғаиләлә тыуһалар ҙа, башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнә башлағайны. Өйҙә матур ғына аралашалар ҙа ине, урыҫ телле балалар баҡсаһына йөрөһәләр ҙә, өйҙә тик әсә телендә һөйләштеләр. Аталары сит милләт кешеһе булһа ла, ҡаршы төшмәне. Киреһенсә, улдары менән бергә үҙе лә башҡортса өйрәнде, моңобоҙҙо, йырыбыҙҙы, гөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе яратты. "В чужой монастырь своим уставом не ходят", тине ул Башҡортостанға килеп йәшәй башлағас та. Ихласланып китеп беҙҙең йолаларҙы өйрәнде, шәриғәт буйынса никах уҡытыуға ла ҡаршы булманы. Әлбиттә, үҙенең дини байрамдарын да инҡар итмәне.

Шуға күрә мәктәптә туған тел һайлағанда ла ҙур проблема тыуманы. "Ҡайһы ерҙә йәшәйһең, шуның һыуын эсәһең инде. Йәки кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлайһың. Бында туғандарҙың да күпселеге башҡорт", - тиеп, балаларының да башҡорт булып үҫеүен теләне, үҙе лә телде өйрәнде.

Тик өсөнсө класҡа еткәс, игеҙәктәр башҡорт теле дәрестәренән ситләштеләр. Өйгә эштәрен дә эшләмәнеләр. Көндәлектәрен ҡараһаң, унда ла бер нәмә яҙылмаған була ине. Дәфтәрҙәрендә лә яҙыу һирәк-һаяҡ ҡына күренә. Башҡорт телен яратып ҡына өйрәнеп йөрөгән балаларҙың ҡыҙыҡһыныуы шулай һүрелде лә ҡуйҙы. Бәктиһәң, уҡытыусылары алмашынған икән. Йыл буйы тигәндәй дәрес һайын йә һүрәт төшөргәндәр, йә контроль күсереү тигән булып, ҡағыҙ битенә китаптан башҡортса текст күсереп яҙып тик ултырғандар. Йыйып алып, исмаһам, уларҙы тикшергән кеше булһа икән! Йыймай ҙа, тикшермәй ҙә, билдә лә ҡуймай икән уҡытыусылары.

Инглиз телен дә башҡорт теле кеүек 1-се кластан өйрәнә башлағайнылар. Хәҙер ейәндәрем апаруҡ үҙ-ара һөйләшә, аңлаша ла. Ә башҡорт телендә белгәндәрен дә онотоп бөттөләр. Аптырап, йыл аҙағында берике дәрестәрендә ултырып сыҡтым. Ғәжәпләнеп ҡайттым. Бәктиһәң, башланғыс класс уҡыусыны өсөн дәреслектәр бөтөнләй уйлап төҙөлмәгән. Ҙур-ҙур тексттарҙы тәржемә итеп, эйәһен, хәбәрен, тиң киҫәктәрен табырға кәрәк.

Миненсә, телде башлап өйрәнгәндәргә һөйләмдең эйәһен, хәбәрен табыуҙар әле иртәрәк. Башҡортса ныҡлап белгәс кенә һөйләм тикшерергә мөмкин. Иң тәүҙә балаларға ябай ғына итеп аралашырға, аңлашырға өйрәтергә кәрәк.

Бына шул ҡамасаулаһы минең ейәндәремә башҡорт телен уҡырға: дәреслектәрҙең дөрөҫ төҙөлмәүе сәбәпле улар урта һәм өлкән кластарҙа үҙ туған телдәрен дәүләт теле булараҡ ҡына өйрәнде.

***Ләйсән ШӘҺИЯЗДАНОВА, тәрбиәсе, Белорет ҡалаһы:*** Ғаиләбеҙҙә өс малай буй еткерәп килә. Ильяс 11-се, Әмир - 5, ә кинйәбеҙ Динир 3 синыфта. Өсәһе лә матур итеп башҡортса һөйләшә. Урыҫ телен дә бик яҡшы беләләр. Ҡаланың башҡорт гимназияһында белем алалар, төрлө түңәрәктәргә йөрөйҙәр. Ильяс менән Динир 1 синыфтан алып "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса конкурстарҙа һәм башҡа ярыштарҙа ҡатнашып, енеү яулап киләләр, оло улыбыҙ шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадаһында ла уңышлы ғына ҡатнашты.

Оҙаҡламай сығарылыш кластар Берҙәм дәүләт имтиханы тапшыраҫаҡ, башҡорт телен һайлаусылар күпме икән? Ә Ильясыбыҙ маҡсатлы рәүештә БДИ өсөн башҡорт телен һайланы. Беҙ уларға көслән өйрәтмәнек, туған телен башҡа телдәрҙән өҫтөн ҡуймаҡ, өйҙә тик башҡорт телендә генә һөйләшәбеҙ һәм был ҡағиҙәне боҙмайбыҙ.

Һеҙҙең һорауға яуабым ошолай булыр: башҡорт ғаиләләрендә балаларҙың туған телендә һөйләшмәүенә атай-әсәйҙәрҙең ялҡаулығы, вайымһыҙлығы һәм үҙенең тамырҙарына төкөрөп ҡарауы тора.

Баланың теле ғаиләлә ниндәй телдә һөйләшеүҙәренә ҡарап асыла. Унан һуң ул балалар баҡсаһындағы мөхиткә - урыҫ телле мөхиткә барып эләгә. 5 йәшкә тиклем баланың әллә нисә телде енел, тиҙ һәм яҡшы үҙләштерә алыуы күптән дәлилләнгән. Тимәк, балалар баҡсаһында ул яҡшы итеп урыҫ телен өйрәнәсәк һәм был, әлбиттә, бик яҡшы күренеш. Ләкин нәҡ ошо мәлдә өйҙәгеләр - атаәсәһе, олатай-өләсәйҙәре һәм башҡа яҡындары тарафынан баланың башҡорт телен онотоуына юл ҡуймау өсөн иң көсөргәнешле эш алып барылырға тейеш. Ысынлап та, 3-5 йәшлек баланың урыҫса һупалай башлауы тәүҙә ҡыҙыҡ тойола. Тик ни өсөндөр тора-бара ситтәге мөхит бала аша өйгә лә үтеп инә һәм өйҙә лә тик урыҫ телендә аралаша башлайҙар. Тәүҙә баланы ҡыҙыҡ күреп тыңлайҙар, унан һуң уның һәр һүҙен, һөйләмен башҡортсаға әйләндереүҙән ялҡалар, аҙаҡ бөтөнләй ҡул һелтәп ҡарайҙар. Был баланың ғына аҙмышына йөғонто яһамай, ә тотош милләттең киләсәгенә тәьсир итә икәнен онотмаҫҡа кәрәк.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ЕВРОПА ФЕРМЕРҘАРЫ УРАМҒА СЫҠТЫ




**Мәғлүм булыуынса, үткән аҙнала Рәсәй хәрби көстәре Авдеевканы нацистарҙан азат итте, тип белдерҙе донъя мәғлүмәт сығанаҡтары. РФ Оборона министрлығы мәғлүмәттәренән билдәле булыуынса, был ҡала өсөн барған һуғыштарҙа ҡаршы яҡтар бер көн эсендә генә лә 1500 хәрби хеҙмәткәрен юғалтты. Украина боевиктарының ҡалғандарына ҡорал һәм хәрби техникаларын ташлап, ашығыс рәүештә тырым-тырағай ҡаланан сығып китергә тура килде.**

Шулай итеп, Зеленскийҙың март айында Швейцарияла "Тыныслыҡ саммиты" үткәрергә ниәте килеп сыҡмаҫ, ахырыһы. Бындай ҡарарға донъя лидерҙарының әлеге саммитҡа етерлек ҡыҙыҡһыныу күрһәтмәүе лә сәбәп булғандыр. Шулай ҙа Украина сараны апрель йә май айҙарына күсереү яҡлы, ә шул арала Украинаның сит ил эштәре министры Дмитрий Кулеба Мюнхенда барған хәүефһеҙлек буйынса конференция сиктәрендә нисек тә булһа Ҡытай коллегаһы Ван И менән осрашыу эҙләй һәм уны саммитта ҡатнашырға "ҡоҙаламаҡ" була. Бынан алдараҡ иһә Швейцария сит ил эштәре министры Иньяцио Кассис, тыныслыҡ конференцияһын Рәсәйһеҙ үткәреү мөмкин түгел, тип белдергәйне, сөнки Украиналағы конфликтты Рәсәй ҡатнашлығынан башҡа көйләргә тырышыуыҙың мәғәнәһе юҡ, тине ул.

● Шаҡ ҡатырлыҡ тағы бер яңылыҡ шунан ғибәрәт булды: Еврокомиссия башлығы Урсула фон дер Ляйен... НАТО-ның генераль секретары вазифаһына кандидат итеп күрһәтелгән! Ошо унайҙан, ҡайһы яғы әйләнептер, ГФР канцлеры Олаф Шольц Рәсәйгә ҡарата артыҡ ныҡ ҡаршы ҡараштa тороуын нигеҙ итеп, Урсуланың кандидатураһын кире ҡағыуын белдерҙе. Урсулаға, әйткәндәй, үҙ вазифаһында үҙ бурыстарын тейешләсә башҡарырға кәрәк тә бит, юғиһә, ул башында торған Еврокомиссия, шулай уҡ 27 ил лидеры ҡатнашлығындағы Евроберләшмәнең Украинаға алдағы дүрт йылға 50 млрд ярҙам бүлеү буйынса саммиты барған Брюссель кварталын бындай сәйәсәткә ҡаршы протест акцияһына сыҡҡан фермерҙар баҫып алды. Улар Евроберләшмә ҡарарын дөйөм ауыл хужалығына ҡаршы сәйәсәт тип атаны. Был дөйөм боларыш Германия, Франция, Польша, Чехия, Испания, Греция һәм, ғөмүмән, Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре буйлап киң таралды. Фермерҙар субсидияларҙы кәметеүгә, шулай уҡ уларҙың мөмкинлектәрен сикләүсе закондарға ҡаршы, ауыл хужалығы мәсьәләләрен яйға һалыуҙы, был өлкәгә аҡсалата ярҙам талап итеп сығыш яһай, баррикадалар ҡора, юлдарҙы ҡаплай... Европа фермерҙарының тормошо ауырлашыуын күрмәү мөмкин түгел: электр энергияһына, ашламаларға, транспортҡа сығымдар ҙур күләмдә арта.

● Яҡын Көнсығышта ла һуғыш тынмай. Израилдең ЦАХАЛ хәрби көстәре Газа секторының төньяҡ өлөшөн артиллерия һәм авиация утына тотоуын дауам итә. 2023 йылдың 7 октябренән алып ике яҡтан да юғалтыуҙар статистикаһы бына ошондай: Израиль: 1200 кеше үлгән, 5000-е яраланған. Палестина: 28 950 кеше үлгән, 68 750-һе яраланған.

Израиль тарафынан Палестина халҡын ҡырыу үҙ эҙемтәләрен бирә: Бөйөк Британияла, мәҫәлән, антисемитизм күренеше һуңғы 40 йыл эсендә иң юғары нөктәһенә етте. Былтыр Берләшкән Короллектә йәһүдтәргә һөжүм менән бәйле 4 100 осраҡ теркәлде, был унан алдағы йылға ҡарағанда 147 процентҡа артыҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов белдереүенсә, Көҙҙән алып февраль аҙағынаса урмансылар ылыҫлы ағастар орлоғон йыйыу менән шөғөлләнә. 2023 йылда Башҡортостан урмансылары 5 тоннанан ашыу орлоҡ йыя, шул иҫәптән: 3,5 тонна ҡарағай, 1,6 тонна шыршы, 37 килограмм ҡарағас, 310 килограмм япраҡлы ағас орлоғо туплайҙар. Яҙ көнө орлоҡтар ағас питомниктарында сәселәсәк, ә ике йылдан һуң урман фонды ерҙәрендә, шулай уҡ "Хәтер баҡсаһы" халыҡ-ара акцияһы һәм "Урманды һаҡлайыҡ" Бөтә Рәсәй акцияһы сиктәрендә ултыртыласаҡ.

✓Башҡортостанда 2019 йылдан алып "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектына ярашлы 9 меңләп кеше авария хәлендәге торлаҡтан күсерелгән. Башҡортостандың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Владислав Сидоркин билдәләүенсә, йәшәү өсөн яраҡһыҙ торлаҡтың кәмеүен тәьмин итеү власть органдарының мөһим бурыстарының береһе булып ҡала. 2023 йылда Башҡортостан авария хәлендәге торлаҡтан күсереү һаны буйынса Рәсәй төбәктәре араһында алтынсы урынды биләгән.

✓Рәсәй банкы төп ставканы 16 процент кимәлендә ҡалдырҙы. Быға тиклем уны биш тапҡыр рәттән - бөтәһе 850 база пунктына күтәрҙеләр. Декабрҙә ул 15 проценттан алып 16 процентҡа тиклем арттырылды. Хәбәр ителеүенсә, 2024 йылдың 16 февралендә Рәсәй банкының директорҙар советы төп ставканы йылына 16 процент кимәлендә ҡалдырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Ағымдағы инфляция баҫымы көҙгө айҙар менән сағыштырғанда кәмеһә лә, юғары булып ҡала. Эске ихтыяж әле һаман да тауар етештереү һәм хеҙмәт күрһәтеүҙе киңәйтеү мөмкинлектәрен күпкә уҙып китә. Тап шуға инфляция темптарының аҡрынайыуы хаҡында һығымта яһарға иртәрәк, тиҙәр.

✓Башҡортостанда мендән аҙыраҡ кеше йәшәгән йәнә дүрт ауыл тиҙлекле мобиль 4G-интернет һәм телефон элемтәһе менән тәьмин ителде, тип хәбәр итә республика Хөкүмәте. Һүҙ Бишбүләк районының Сухоречка, Баймаҡ районының Ҡуянтау, Күгәрсен районының Күгәрсен, Бүздәк районының Кәпәй-Ҡобау ауылдары хаҡында бара. Бында мәғлүмәт тапшырыуҙың уртаса тиҙлеге секундына 60 мегабитҡа тиклем арткан. Бынан алдараҡ республикала Яҡтыкүлгә барған юлға 4G-элемтә барып етте.

*✓ Унда белемдәр үҫешендәге яңы тенденциялар, яҡташтар ойошмаһы традицияларын һаҡлау һәм таратыу, рухи-әхлаҡи һәм ғаилә ҡиммәттәрен, үҫеп килеүсе быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләү мәсьәләләре ҡаралды.*



ҠЫҪҠАСА

# КӘҢӘШЛӘШЕҮ КӘРӘК

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Мәскәүҙә "Губернаторҙар клубы" ултырышында ҡатнашты.** Республика Башлығын иғлан иткәндә модератор Башҡортостандың 2024 йылда "Яңы заман өсөн көслө идеялар" форумына ебәрелгән ғаризалар һаны буйынса рекордсмен булыуын әйтте (бөтәһе 3707 идея). Башҡортостанда граждандар, йәмәғәтселек әүҙемлеге, граждандар йәмғиәте институттарын булдырыу өсөн экомөхит оҙаҡ формалашты, тип билдәләне Радий Хәбиров. Республика етәксеһе граждандарҙың әүҙемлеген үҫтереү өсөн йыл да Башҡортостан Башлығының дөйөм суммаһы 300 миллион һум булған гранттарын тапшырыуҙы миҫалға килтерҙе. Медиалогия мәғлүмәттәре буйынса, форумды яҡтыртыу күләме буйынса Башҡортостан Мәскәүҙән ҡала икенсе урынды биләй.

✓**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы "Ветеринария тураһында"ғы Башҡортостан Республикаһы Законына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡараясаҡ.** "Башҡортостанда мал ерләү өсөн яңы зыяраттар булдырыу эше әүҙем бара, шуға күрә биологик яҡтан хәүеф тыуҙырған иҫке мал ҡәберлектәре артабан юҡ ителәсәк, уларҙы 2030 йылдың 1 ғинуарына саҡлы ғына файҙаланырға рөхсәт ителә, - ти парламент Рәйесе Константин Толкачев. - Был закон проекты ҡуйған маҡсаттарҙың береһе - кеше һәм хайуандар өсөн уртаҡ булған ҡурҡыныслы сирҙәрҙең таралыуына юл ҡуймау. Мал ерләнгән урындар, ғәмәлдә, инфекция сығанағы булып тора".

✓**Дәүләт Думаһы "дача амнистияһын" 2031 йылға тиклем оҙайтты. Был баҡсасылыҡ ширҡәттәренең дөйөм милек объекттарына ҡағыла.** Дәүләт Думаһы депутаттары өсөнсө уҡыуҙа ҡабул иткән законға ярашлы, "амнистия" баҡсасылыҡ ширҡәттәренең дөйөм ҡулланылыштағы биналарына һәм ҡоролмаларына ҡағыла. Һуҙ 2004 йылға тиклем төҙөлгәндәр тураһында бара. Хәҙер уларҙы кадастр иҫәбенә ҡуйырға һәм милек хоҡуғын ябайлаштырылған тәртиптә теркәргә мөмкин. Ғәмәлдәге ҡануниәт буйынса "амнистия" киләһе йылда тамамланырға тейеш ине, әммә хәҙер тағы ла өс йылға оҙайтылды. Һунынан төҙөлгән биналарҙы суд аша ғына теркәргә була. Хәбәр ителеүенсә, 1998 йылдың 14 майына тиклем төҙөлгән торлаҡ һәм баҡса йорттарына хоҡуҡты теркәүҙең ябайлаштырылған тәртибе 2031 йылдың 1 мартына тиклем ғәмәлдә ҡала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МОСТАФИН ИСЕМЕНДӘГЕ...

**Баш ҡалала Өфөнөң экс-мэры Өлфәт Мостафин исемендәге физкультура-һауыҡтырыу комплексы асылды.**

Бассейны, боҙ майҙансығы, универсаль залы булған был спорт ҡоролмаһын асыуҙа БР Башлығы Радий Хәбиров, РФ Дәүләт Думаһының халыҡ-ара эштәр буйынса комитет рәйесе, Бөтөн Рәсәй мәктәп спорты федерацияһы президенты, олимпия чемпионы Ирина Роднина, Рәсәй спорт көрәше федерацияһы президенты, олимпия чемпионы Михаил Мамиашвили, "КЭС-БАСКЕТ" Мәктәп баскетбол лигаһы идаралығы рәйесе, олимпия чемпионы Светлана Антипова, "Газпром"дың социаль инициативаларға ярҙам итеү фонды гендиректоры Владимир Приймак ҡатнашты.

Спорт объекты 2022 йылда "Газпром - балаларға" хәйриә программаһы сиктәрендә төҙөлә башлағайны. Был программа 2007 йылдан алып Рәсәйҙең 74 төбәгендә тормошҡа ашырыла һәм ошо ваҡыт эсендә 2 мең социаль объект төҙөлгән, шуларҙың 22-һе - Башҡортостанда.

Өлфәт Мостафин исемендәге физкультура-һауыҡтырыу комплексы Менделеев урамында, "Аҡ Йорт" тау саңғыһы үҙәге менән "ВДНХ-Экспо" араһында урынлашҡан. 3 ҡатлы бинала 400-ҙән ашыу бала бушлай спорт менән шөғөлләнә аласаҡ. "Был республика өсөн мөһим ваҡиға, беҙ балалар өсөн ошондай мөмкинлектәр тыуҙыра алдыҡ. Киләсәктә көслө, иң мөһиме, яҡшы кешеләр, илебеҙҙең лайыҡлы граждандары булып үҫегеҙ", - тине Радий Хәбиров балаларға мөрәжәғәт итеп. "Газпром трансгаз Өфө" ойошмаһы генераль директоры Шамил Шәрипов иһә спорт комплексы Өфөнөң бик матур ерендә урынлашыуын билдәләп, артабан да республикаға яңы спорт объекттары төҙөүҙә ярҙам итергә әҙерлектәре тураһында белдерҙе.

# ҺӨҘӨМТӘҺЕ БУЛҺЫН

**Үткән аҙнала Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Беларусь Республикаһында эш сәфәре менән булды.**

"Беларусь менән хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса эште дауам итәбеҙ, был беҙҙең өсөн төп партнер, - тине Радий Хәбиров Минск аэропортында журналистарҙың һорауҙарына яуап итеп. - Был юлы ла беҙ бизнес-миссия менән килдек. Уның составында яңы партнерҙар эҙләгән 54 компания бар. Өс ҙур килешеү төҙөргә әҙер булырбыҙ, моғайын. Машиналар эшләү өлкәһендә МАЗ заводын төҙөү - МАЗ-дың һәм Өфө трамвай-троллейбус заводының берлектәге проекты, аккумуляторҙар етештереү буйынса завод төҙөлөшө беҙҙе бик ҡыҙыҡһындыра. Әлбиттә, "Амкодор-Алға" проекты. Шулай уҡ беҙ бында башҡа, шул иҫәптән мәҙәниәт һәм туризм өлкәһендәге мәсьәләләрҙе лә тикшерәсәкбеҙ".

Сәфәр барышында Башҡортостан Башлығы Белорустың бер нисә компанияһы менән эшлекле һөйләшеүҙәр үткәрҙе, Беларусь премьер-министры Роман Головченко менән ике республиканың бизнес-форумында ҡатнашты, шулай уҡ "Амкодор" машиналар эшләү компанияһында булды. Ул Өфөлә төҙөлә башлаған "Амкодор-Алға" заводында сығарыласаҡ техниканы ҡараны. "Беҙ "Амкодор"ҙың бер предприятиеһын астыҡ, унда ашлыҡ киптергестәр етештерелә. Хәҙер артабаны, ҡатмарлыраҡ проект өҫтөндә эшләйбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

Беларусь дәүләт Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы филармонияһы һәм Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы менән мәҙәниәт өлкәһендә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыу тураһында килешеүгә өлгәшелде. Уртаҡ белем биреү проекттары Өфө сәнғәт училищеһы һәм Минск дәүләт сәнғәт колледжы араһында төҙөлгән хеҙмәттәшлек килешеүе нигеҙендә тормошҡа ашырыласаҡ. Бынан тыш, рәсми сәфәр көндәрендә "Кунаҡсыл Башҡортостан" фестивале ойошторолдо.

# "АТАЙСАЛ" ЙЫЙҘЫ...



**"Атайсал - Ватан көсө" зона форумы был юлы Стәрлебаш районында үтте һәм ул майҙанға Салауат һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары, Ғафури, Ишембай, Миәкә, Стәрлетамаҡ, Фёдоровка һәм Стәрлебаш райондары вәкилдәрен туплаңы.**

Көндөң тәүге яртыһында эш туғыҙ тематик секцияла алып барылды, унда белемдәр үҫешендәге яңы тенденциялар, яҡташтар ойошмаһы традицияларын һаҡлау һәм таратыу, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү, рухи-әхлаҡи һәм ғаилә ҡиммәттәрен, мәҙәни һәм тарихи мираҫты һаҡлау, үҫеп килеүсе быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләү мәсьәләләре ҡаралды. Ҡыҫҡаһы, "Яңыса уйла. Территорияларҙы үҫтереүҙә яңы йүнәлештәр" темаһына стратегик сессияла ҡатнашҡан Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаевтың фекере был проекттың асылын шулай тип баһаланы: "Быйыл мартта проектҡа өс йыл тула. Ваҡыт уның бер урында ғына тормауын, ә әүҙем үҫешеүен күрһәтте. "Атайсал - Яҡташтар көсө" тип аталған беренсе форумды ғына иҫкә төшөрәйек. Ул ваҡытта беҙ яҡташтарыбыҙға, тәүге сиратта тыуған ауылдарына ярҙам итһендәр ине, тигән мөрәжәғәткә нигеҙләндек. Бөгөн, күреүебеҙсә, форум "Атайсал - Ватан көсө" тип атала. Проекттың әһәмиәтен анализлағандан һуң проекттың рухи ҡеүәтен билдәләнек: яҡташтарыбыҙ, кесе ватанына ярҙам итеп, иң юғары хис-тойғолар кисерә. Тыуған ереңдең киләсәген хәстәрләү, күңелеңдә һалыу - көс-ҡеүәт тап шунан ғибәрәт..."

Форумдағы бар майҙандарҙа ла бөгөнгө көнгә ауаздаш темалар, фекер алышыуҙар ойошторолдо. "Атайсал - Ватан көсө" зона форумының "Бергә еңәсәкбеҙ" секцияһында махсус хәрби операция, унда ҡатнашыусыларҙың, яугирҙарҙың ғаилә ағзаларының проблемалары тураһында һүҙ барҙы. Ә "Тамырҙарыңды бел" секцияһында ҡатнашыусылар милли мәҙәни традицияларҙы, туған телде, ата-бабаларыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихи-мәҙәни мираҫты һаҡлау һәм популярлаштырыу, этномәҙәни һәм тарихи-крайҙы өйрәнеү йүнәлешендәге программаларҙы һәм проекттарҙы тормошҡа ашырыу, традицион мәҙәни ҡиммәттәргә һәм милли йолаларға хөрмәт тәрбиәләү тураһында һөйләште. Республика ҡалаларында һәм муниципалитеттарында башҡарылған аныҡ эштәр тураһында "Атайсал. Ватан көсө. Яҡташтар беҙҙең менән!" майҙансығында ҡатнашыусылар ни өсөн кесе ватан өсөн изге эштәр башҡарыу мөһим; был йәһәттән мәктәп, ғаилә, тирә-яҡ мөхит ниндәй роль уйнай; ауыл йәки ҡала үҫешһен өсөн нимә эшләргә кәрәклеген тикшерҙе. "Ғаилә ҡиммәттәре" тип аталған секцияла йәмәғәт ойошмалары, социаль учреждениелар вәкилдәре, ауыл белемдәре башлыҡтары ғаилә ҡиммәттәре һәм традицияларын төшөнсәләренең нимә икәнлеген, уларҙың йәмғиәттең лайыҡлы ағзаһын тәрбиәләүгә йоғонтоһон, йәмәғәт ойошмаларының роле тураһында һәм башҡа темаларҙы барланы.

Форумды тамамлаусы секцияла "Атайсал" сиктәрендә тормошҡа ашырылған проекттар тураһында һәр кемде һоҡландырған мәғлүмәт яңғыраны: Стәрлетамаҡ районында ғына - ике меңдән ашыу, Ғафури районында - 500-ҙән ашыу, Стәрлебаш районында - 300-ҙән ашыу... Һуҙ кесе ватаныбыҙ һәм тыуған төйәгебеҙ мәнфәғәтендә башҡарылған меңәрләгән изге эштәр хаҡында бара: социаль объекттар төҙөү, ауылдарҙы һәм шишмәләрҙе төҙөкләндереү һ.б. Һис шикһеҙ, "Атайсал"дың киләсәге ҙур. Проект сиктәрендә изге эштәр дауам итәсәк һәм төрлө төбәктәрҙә тағы ла меңәрләгән яҡшы эштәр башҡарыласаҡ.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республика ҡалаларында, "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектына ярашлы, 67 йәмәғәт урынын төҙөкләндереү ҡаралған. Мәҫәлән, баш ҡаланың Урмансылар паркында спорт һәм балалар майҙансыҡтарын йүнәтеү, тукланыу урындарын яңыртыу, һуҡмаҡтар эшләү, яҡыртҡыстар һәм видеокүҙәтеү ҡуйыу планлаштырылған. Башҡа ҡалаларҙа ла эш әүҙем бара.

✓Үҙған аҙнала дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре баш ҡала юлдарында 24 иҫерек водителде, шулай уҡ водитель таныҡлығы булмаған ете кешене тотҡан. Шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә Өфөлә бөтәһе 86 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, биш юл һәләкәтендә 3 кеше йәрәхәтләнгән, шуларҙың береһе - балиғ булмаған, ә береһенең ғүмере өҙөлгән. Шулай уҡ юл-патруль хеҙмәте инспекторҙары юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙың 641 осрағын теркәгән. Улар араһында иң популярҙары: элэктерелмәгән хәүефһеҙлек ҡайышы (140), балаларҙы ултыртып йөрөтөү ҡағиҙәләрен боҙоу (35), йәйәүлеләргә юл биреү талабын үтәмәү (40).

✓Өфөлә Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға бағышланған "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһенең һайлап алыу турына йомғаҡ яһалды. Эксперт советы ағзалары бәйге майҙанына сығырға дәғүә итеүсе 98 кеше араһынан 12 финалсыны һайлап алды. Шиғриәт бәйгеһенең финалы 2024 йылдың яҙында Башҡорт опера һәм балет театрында була.

✓Башҡортостан бобслейсыһы Любовь Черных Бөтә Рәсәй көслөләр спартакиадаһында монобобта бронза миҙал яуланы. Көслөләр спартакиадаһында Башҡортостандың шорт-трексылар командаһы икенсе урынды алды, шулай уҡ республиканың хоккей буйынса йыйылма командаһы сығыш яһаны. Әлеге ваҡытта Башҡортостан командаһында өс алтын, ике көмөш һәм өс бронза миҙал бар. Республикабыҙ алтынсы урында.

✓Башҡортостан саңғысыһы Максим Яншаев биатлон буйынса Рәсәй кубогы этабында һуҡырҙар спортында бер алтын һәм ике көмөш миҙал яуланы. Республиканың Спорт министрлығы хәбәр итеүенсә, турнир Ижевскиҙа үтте, наградалар өсөн илдең ун төбәгенән 100-гә яҡын спортсы ярышты. Максим Яншаев (спортсының оҙатып йөрөүсе Александр Потапов) классик стилдә (5 саҡрым), классик стилдә (спринт) һәм ирекле стилдә (10 саҡрым) сығыш яһаны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



## ҮҪЕШ ӨЛГӨҺӨ

**"Өфө" индустриаль паркы - үҫеш өлгөһө. Унда импортты алмаштырған сифатлы продукция сығарыла.**

Ошо көндәрҙә "Өфө" индустриаль паркында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең сәнәғәт һәм сауҙа министры урынбаҫары Алексей Беспрозванных менән осрашты. Рәсәйҙең сәнәғәт һәм сауҙа министры урынбаҫары Алексей Беспрозванных төбәктең сәнәғәт комплексы эшенең һөҙөмтәле күрһәткестәрен юғары баһаланы. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар төбәктә сәнәғәт кластерҙары үҫешенең перспективаларын тикшерҙе. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығына индустриаль проекттарға ярҙам өсөн рәхмәтен белдерҙе. "Республикала 12 индустриаль парк бар. "Өфө" - уңышлы парктың өлгөһө, унда юғары класлы импортты алмаштырған продукция сығарыла, - тине Радий Хәбиров. - Шулай уҡ беҙ төбәктә халыҡ-ара сәнәғәт кластерҙарын үҫтерергә лә ниәтләйбеҙ. Берлектәге эштә Беларусь партнерҙарының ҡыҙыҡһыныуын күрәбеҙ".

## ТАШҠЫН БУЛА ҠАЛҺА...

**Өфөлә яҙғы ташҡынға әҙерлек башланды. Граждандарҙы яҡлау һәм янғын һағы идаралығы хеҙмәткәрҙәре өйҙәр буйлап йөрөй һәм һыу баҫҡанда үҙенде нисек тотоу ҡағиҙәләрен хәтергә төшөрә.**

Граждандарҙы яҡлау идаралығының матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, күптәрҙең былдай хәлгә тарығаны бар, шуға күрә улар нимә эшләргә кәрәклеген белә: йорт йыһаздарын һәм ҡиммәтле әйберҙәрҙе өҫкө ҡатка алып менергә, хәүефле сумаҙанды әҙерләп ҡуйырға, кәмәләрҙең һәм ҡотҡарыу жилеттарының торошон тикшерергә. Әммә ҡайһы берәүҙәр бында яңыраҡ күсенгән, белгестәр уларға ентеклерәк аңлата. Ярҙам талап ителһә, ҡайҙа шылтыратырға кәрәклеген, ашығыс хеҙмәттәрҙең номерҙарын әйтә.

## "АҠЫЛЛЫ" СВЕТОФОРҘАР...

**Өфөлә "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә Интеллектуаль транспорт системаларын индереүҙең икенсе этабы тамамланды.**

Баш ҡалала 415 светофор объектының 140-ы яңыртыласаҡ. 2023 йылда 51 "аҡыллы" светофор объекты, транспорт ағымы хәрәкәтен күҙәткән 134 детектор һәм метеомониторинг системаһының бер мәғлүмәт таблоһы ҡуйылған. Был эштәргә 270 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. "2022 йылда ҡаланың төп транспорт артерияларында 50 яңыртылған светофор ҡуйылды. 2023 йылда Өфөнән сығыуҙы тәьмин иткән урамдарҙа тағы 51 интеллектуаль урам саты барлыҡҡа килде", - тип һөйләне Башҡортостан Республикаһының транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Клебанов.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, проект өс этапта, 2024 йылдың аҙағына тиклем ғәмәлгә ашырыла. Быйыл 39 "аҡыллы" светофор объектын ҡуйыу күҙаллана. Проектты тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә Өфөлә 415 светофор объектының 140-ы яңыртыласаҡ. Уны тормошҡа ашырыуға бер миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә.

## "ТАМҒА"ҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

**Өфөлә башҡорт милли кейеме оҫталарының "Тамға" халыҡ-ара конкурсына әҙерлек барышында башҡорт халыҡ кейеме буйынса семинар-практикум уҙҙы.**

Халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, унда Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрө, Дәүләкән, Дүртөйлө, Ейәнсура, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Ҡариҙел, Кушнаренко, Мишкә, Туймазы, Өфө, Учалы, Шишмә һәм республикабыҙҙың башҡа район-ҡалаларынан оҫталар ҡатнашты. Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Салауат Кирәев һүҙҙәренсә, семинар ойоштороусылар өсөн дә, ҡатнашыусылар өсөн дә бик мөһим. Был элекке хаталарҙың ҡабатланыуына юл ҡуймаҫҡа һәм башҡорттарҙың традицион кейеме реконструкторҙары эшенең сифатын күтәрергә, тәжрибәне арттырырға ярҙам итергә тейеш.

Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Гөлгөнә Баймырҙина һөйләүенсә, өс йыл эсендә "Тамға" конкурсында (2020-2022 йылдар) төрлө илдәрҙән һәм төбәктәрҙән, мәсәлән, Италия, Төркиә, Ҡаҙағстан, Мәскәү, Ҡурған, Силәбе, Ырымбур, Һамар өлкәләре, Пермь крайы һәм Башҡортостан Республикаһынан вәкилдәр ҡатнашҡан. Ойоштороу комитеты 4 меңдән ашыу конкурс эшен ҡабул иткән. Авторҙар үҙ эштәрен биш номинацияла күрһәткән. Этнограф, тарих фәндәре кандидаты, Р. Кузеев исемендәге Археология һәм этнография музейының өлкән ғилми хеҙмәткәре Елена Нечвалода, реконструктор, "Тамға" халыҡ-ара конкурсы еңеүсеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Юлай Ғәлиуллин, реконструктор, "Тамға" конкурсы лауреаты Гөлнара Вәхитова, Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Урал" этноүҙәге методисы Хәмдиә Дәүләтованың сығыштары ҡыҙыҡлы һәм файҙалы булды.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

## УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

### ИҪӘНБАЕВ МАЗҺАР НАСИП УЛЫ

М.Н. Иҫәнбаев - күренекле ғалим-иҡтисадсы, дәүләт эшмәкәре.

Ул 1936 йылдың 15 сентябрендә Башҡорт АССР-ының Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылында тыуа. Атаһы Иҫәнбаев Насибулла һәм ағаһы Лоҡман Бөйөк Ватан һуғышында һәләк була. Ауыл мәктәбенән һуң Темәс педагогия училищеһында уҡый, уны 1955 йылда тамамлай. 1961 йылда Башҡорт дәүләт университетын отличие менән тамамлап, Баймаҡ ҡалаһына 1-се урта мәктәп уҡытыусыһы булып эшкә китә.

1963 йылдан СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының иҡтисади тикшеренеүҙәр бүлегендә эшләй. 1971 йылдан - бүлектең өлкән ғилми хеҙмәткәре, 1973 йылдан - ижтимағи етештереүҙең һөҙөмтәлелеге секторы мөдире. 1977-1981 һәм 1987-1990 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының иҡтисади тикшеренеүҙәр бүлеге мөдире урынбаҫары була. 1990-97 йылдарҙа М. Н. Иҫәнбаев - Башҡортостан Республикаһы Юғары Советы, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың социаль-иҡтисади проблемалар бүлеге мөдире, бер үк ваҡытта 1994 йылдан Башҡортостан Республикаһы Юғары Советы Рәйесе кәңәшсеһе, 1995 йылдан Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесенең иҡтисад мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе. 1998 йылдан ул Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр институтында бүлек мөдире һәм төбәк иҡтисады проблемалары секторы мөдире булып эшләй.

1987 йылда докторлыҡ диссертацияһын яҡлай. 1989 йылдан - профессор, 1991 йылдан - Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы. Рәсәй Инженерлыҡ академияһы (1993 йылдан), Рәсәй Тәбиғәт фәндәре академияһы (1994) һәм Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы (2002).

Мазһар Иҫәнбаевтың фәнни ҡыҙыҡһыныу өлкәләре: төбәк иҡтисады теорияһы һәм методологияһы. Ул иҡтисадтың баҙар мөнәсәбәттәренә күсеү шарттарында Рәсәй Федерацияһы составындағы республикаларҙың хужалыҡ комплекстарының илдәге берҙәм халыҡ хужалығы комплексының төбәк системалары булараҡ формалашыуының методологик нигеҙҙәрен камиллаштыра.

Маҡтаулы исемдәре һәм наградалары: Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре (1986). Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре (1998), СССР Фәндәр академияһының, Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Президиумының, Рәсәй Федерацияһы "Белем" йәмғиәтенең Почёт грамоталары, Салауат Юлаев ордены кавалеры (2011).

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сейә

Сейәлә глюкоза, лимон һәм алма кислоталары күп. Аскорбин кислотаһы аҙ булһа ла, башҡа төр витаминдар бар: рибофлавин, никотин кислотаһы, рутин, каротин, фолий кислотаһы һәм матдәләр алмашыуында әүҙем ҡатнашҡан инозин матдәһе. Дауаланыу өсөн сейәнең емешен һәм емеш һабағын июль-август айҙарында, ботаҡтарын һәм япраҡтарын майҙа йыйыр. Сейә емеше эсте йомшарта, ҡаҡырыҡты сығара, шәкәр кимәлен түбәнәйтә, антисептик. Емеш һабаҡтарын бәүел ҡыуыҙыры һәм ҡанды туктатыусы, ә япраҡ һәм ботаҡтарын тынысландырыусы сара булараҡ ҡулланалар. Сейәнең һөйәге ағыулы.

❖ Артрит булғанда көн һайын 20 бөртөк сейә емеше ашарға.

❖ Йөҡөнһоҙлоҡтан 1 ҡалаҡ киптерелгән сейә емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм йоҡлар алдынан эсергә.

❖ Танау ҡанағанда сейәнең яңы япраҡтарын ваҡлап, танауға тығырға.

❖ Шешенеүҙән 2 ҡалаҡ емеш һабағына 2 стакан һыу ҡойоп, һыу парында 15 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Шулай уҡ 1 балғалаҡ емеш һабағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙы ябыҡ һауытта 30 минут төнәтеп, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә була.

❖ Плевриттан сейә һуты һәм йомшағын көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң сирек стакан эсергә.

❖ Ашҡаҙан һәм бөйән сей яраһынан 2 балғалаҡ сейә тамырына 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнатырға һәм тағы 5 минут тоторға, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 20-30 минут алда стакандың өстән бер йәки дүрттән бер өлөшөн эсергә.

❖ Артрит, подагра, матдәләр алмашыныуы боҙолғанда, атеросклероз осраҡтарында сейә өлгөргән осорҙа көнөнә 3-4 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө йәки дүрттән бер өлөшө яңы һығылған һутын эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Эяла**
**(Морянка)**



Ваҡ ҡош, өйрәк. Яҙын ата ҡош оҙон беҙ кеүек ҡойроҡло, башы, түше - ҡара, арҡаһы - ерән, күҙҙәре тирәһендәге түңәрәктең аҡ төҫтә булыуы менән айырылып тора. Инә ҡош сағыу түгел, һорғолт-көл төҫөндә.

Һыуҙа түбән ултыра, ҡыҫҡа муйыны һәм осло ҡойроғо ғына иғтибарҙы йәлеп итә. Тиҙ оса, был ҡоштарҙың өйөрө түбән осоуы менән билдәле. Осоп барғанда гел тауышлана, ата ҡоштар "ааулл" һымағыраҡ ҡысҡыра, ә инә ҡоштар "а", "у", "о" өндәрен сығара.

Тундрала йәшәй. Беҙҙең территорияла көҙөн йылы яҡҡа осоп китешләй генә күренеп ҡала. 1926 йылдың көҙөндә С.В. Кириков Каноникольское ауылы эргәһендәге быуала ҙур төркөм эяла ҡоштарын тап итә. Беҙгә ул 1965 йылдың майында Учалы районының Өргөн, Ҡалҡан, Әбйәлил районының Суртанды күлдәрендә осраны. Шул ваҡытта тотоп алған бер эяланың ҡараҫҡыһы Өфө фән һәм технологиялар университетының зоология музейында һаҡлана.

**Боған, буған**
**(Гоголь)**



Һуна өйрәктән вағыраҡ. Ата ҡоштоң арҡаһы ҡара, башы, муйынының алғы өлөшө йәшел, тимер кеүек ялтырап тора. Тәпәйҙәре һары, суҡышы эргәһендәрәк ике сикәһендә аҡ табы бар. Инә ҡош аҡһыл, башы һор, аҡ "көҙгө"һө бар.

Туй ваҡытында ата ҡош "һыйы-һыйы" тигән тауыш бирә. Инә ҡош "крр-крр" тип "ҡарҡылдай". Осоп барғанда боғандың көслө ҡанаттары үҙенсәлекле тауыш сығара, ошо осоуын төнөн дә айырырға була.

Башҡортостандың Ҡыҙыл китабында һаны буйынса тиҙ юғалып барған ҡоштар төркөмөнә индерелгән.

Ылыҫлы урманда оя ҡора. Ағастағы 5-15, хатта 20 м бейеклектә урынлашҡан, тумыртҡа тишеп яһаған ояларҙы үҙләштерә. Ҡайһы бер бындай ояларҙы боғандар 30-ар йыллап ҡуллана. Бәпкәләр йомортҡанан сыҡҡас та оянан ергә һикереп төшә, инә ҡош уларҙы шунда уҡ һыу яҡҡылығына алып китә. Урал алды районларында боғандар күл һәм йылғаларҙың урманлы яҙарында осрай. Ағиҙел, Дим, Тиҙ Танып һәм башҡа йылғаларҙа ла оя ҡора. Баймаҡ, Учалы, Әбйәлилдә осраған бар. Урмандарҙы ҡыплап ҡырҡыу арҡаһында боғандарҙың һаны ла кәмей, уларға оя ҡорор ҡарт ағастар юҡ кимәлендә.

Апрелдең урталарында ҡайта, көҙөн һыу яҡҡылыктары туңғансы китеп бөтә.

4 метр тәрәнлеккә тиклем сумып, үҙенә ризыҡ таба. Моллюскылар, һирәкләп балыҡ ашай. Һыу ҡуңыҙҙары, ҡандала, энәғараҡ ҡарышлауыҡтарын ашай. Шулай уҡ һыуҙа үҫкән үҫемлектәрҙең тамыры менән туҡлана.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ЙӨҠӨ СҮЛМӘГЕ



**Башҡорттар күп йөҡларға яраҡҡан кешегә шаяртып, көләмһөрәп, "йөҡө сүлмәге" тиҙәр. Бик ҡыҙыҡ һүҙбәйләнеш. Йөҡоно беҙҙең ата-бабалар ни өсөн аш-һыу әҙерләгәндә ҡулланылған сүлмәк менән бәйләнеләр икән? Күптәребеҙ был турала уйланғаны ла юҡтыр, моғайын.**

Ә ныҡлап уйлап, төпсөнөп эҙләнһәң, был һүҙбәйләнештең бик борон, беҙҙең эраға тиклемге уҡ дәүерҙәрҙә, ата-бабаларыбыҙҙың Исламға тиклемге донъяуи ҡараштары менән бәйле барлыҡҡа килгәнен күрергә була. Һәр хәлдә, Геродоттың "Тарих" тип аталған китабында быны дәлилләгән миҫалдарҙы табырға мөмкин. Беҙҙең эраға тиклем 5-се быуатта йәшәгән, ижад иткән Геродоттың әлеге шул "Тарих" китабында скифтарҙың килеп сығышы, уларҙың донъяуи ҡараштары тураһында ҡыҙыҡ ҡына мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, тарихсы: "Скифтарға Хоҙай күктән алтындан яһалған һабан, ҡамыт, айбалта һәм табаҡ төшөрә", - тип яҙа. Уның яҙыуынса, ошо әйберҙәрҙе скифтарҙың Таргитай исемле тәү кешеһенең Ҡолаксай исемле кинйә улына тапшыралар һәм ул скифтарҙың батшаһы булып китә. "Йыл аҙағында кемдәкем ошо әйберҙәрҙе ҡарауыллағанда йоҡлап китә, шул кешене үлем көтә", тигән ырым булған скифтарҙа. Боронғо мифологик ҡараштар буйынса, "йөҡө - ул ваҡытлыса үлем", тип һаналған. Ошо ырымдан сығып, алтын әйберҙәр янында йөҡоға талған был кешегә, бер көн яҡтылығында күпме ерҙе урап сыға ала, шунсама майҙандағы ерҙе биргәндәр. Был ерҙе урап сығыу, йөҡоға талыу мотивтарының мәғәнәһе - бер йыл бөтөп, яңы йыл башланыуы менән бәйле. Йәғни, бер йыл үтте һәм ул үлде лә, яңы йыл баштында була инде. Шуға ла скифтарҙың мифологияһында йыл аҙағында бая һанап кителгән алтын әйберҙәр менән йөҡоға талалар, йәғни - символик рәүештә үләләр. Баяғы әйберҙәрҙең алтындан яһалыуы, һары төҫтә булыуы уны ҡояш менән бәйләй. Ҡояштың бер йыл эсендә ерҙе урап үтеүе һәм йыл аҙағында уның көсө бөтөүе лә шул уҡ үлемгә тиң, тип аңлатылған.

Ерҙе урап сығыу, йөҡоға талыу мотивтары башҡорт фольклорында ла бик ныҡ таралған. Башҡорттарҙа киң таралған ошо ырымға нигеҙләнеп, билдәле урыҫ яҙыусыһы Лев Толстой үҙенең "Кешегә күпме ер кәрәк?" тигән фәһемле хикәйәһен яҙа. Был хикәйәлә ҡомһоҙ Пахом башҡорттарҙан мөмкин тиклем күберәк ерҙе арзанға алып ҡалайым тип, көнө буйына туҡтамай йүгерә һәм ҡояш байыуға йөрәге ярылып үлә. Һәм бөйөк яҙыусы үҙенең яҙмаһын "әҙәм балаһына ике аршин ер бирелде, ул уға тап-таман булды", тип бөтөрөп ҡуя. Быныһы юл ыңғайында ғына әйтеп кителде.

Ошо уҡ мотивты, мәҫәлән, башҡорт әкиәттәрендә Йүгерәк батырҙың Мәскәй әбей менән йүгереү ярышында ла күрәбеҙ. Берәүгә лә ал бирмәҫ Йүгерәкте ярышта отор өсөн хәйләкәр, яуыз әбей "Улым, хәлем бөттө, ял итеп алайыҡ", тип туҡтата. Йүгерәк ял итергә ятҡас, уның башына ҡаҙан ҡаплай һәм батыр йөҡоға сума. Уны ышаныслы дуҫтары ҡотҡара. Мәскәй әбейҙең, хәҙергесә әйткәндә, финишҡа яҡынлашып килгәнен күреп ҡалып, Йүгерәктең дуҫтары борсоуға ҡала. Бер дуҫы бейек һырғауыл башына менеп ҡараһа, Йүгерәктең рәхәтләнеп йоҡлап ятҡанын күреп ҡала һәм тиҙ генә батырҙың башын ҡаплаған ҡаҙанға уҡ тоҫҡап атып ебәрә. Ҡаҙан уҡ тейеүҙән ярылып китә һәм Йүгерәк уяна һалып, хәйләкәр әбейҙе ҡыуып етеп, финишҡа беренсе булып килеп инә. Бында мут Мәскәй әбейҙең Йүгерәктең башына кейҙергән ҡаҙанын "йөҡо сүлмәге" тигән һүҙбәйләнештәге сүлмәктең олораҡ варианты тип ҡарарға кәрәк. Геродот телгә алған скифтар легендаһындағы табаҡ та шул уҡ ҡаҙан, сүлмәк кеүек уҡ мәғәнәләге әйберҙәр. Борон Ислам динен ҡабул иткәнгә тиклем башҡорттар һауалағы күкте ерҙе ҡаплап торған оло бер ҡаҙан, тип уйлаған. Ана шул боронғо дәүерҙәрҙән ҡалған да инде "йөҡо сүлмәге", тигән һүҙбәйләнеш.

Күреүебеҙсә, баяғы үрҙә һанап кителгән миҫалдарға ҡарағанда, телебеҙҙәге "йөҡо сүлмәге" тигән һүҙбәйләнештең иң кәмендә ике мең йыл ярымлыҡ тарихы бар, тип әйтә алабыҙ. Был Геродот китабынан сығып һанағанда шулай. Ә скифтарҙың донъяла Геродотҡа тиклем үк булғанлығын иҫәпкә алһаҡ, әлеге "йөҡо сүлмәге" тигән һүҙбәйләнештең тарихын унан да боронғораҡ, тип әйтергә урын ҡала.

Шулай итеп, телебеҙҙәге был бәләкәй генә бер факт та башҡорттоң донъялағы иң боронғо халыҡ икәненә бер ишара һәм ғәййәр скифтарҙың башҡорттоң ата-бабалары булғанлығына тос бер дәлил булып тора. Ә былдай ваҡ-ваҡ дәлилдәрҙе бергә йыйнаһаҡ, башҡорттоң ошо Урал тауҙарында һәм уның тирә-яғындағы урманлы-далалы ерҙәрҙә бик борондан донъя көткәнлеген дә танырға кәрәк. Тимәк, беҙ, башҡорттар, иң боронғо дәүерҙәрҙән үк ошо "Урал" тип аталған гүзәл еребеҙҙең төп хужаһы булып торабыҙ, тип ауыҙ тултырып ғорурланып әйтә алабыҙ. Үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙы беләйек, уны өйрәнәйек, уның менән ғорурланайыҡ һәм киләсәк быуындарға улар ҙа ғорурланып йәшәрлек итеп тапшырайыҡ, тип бөтөрәм был бәләкәй генә яҙмамды.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

УҠЫТЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ТЕЛЕМ, ТИЕП, ЙӨРӘГЕМДЕ ТЕЛЕП...

Туған телде өйрәнеү, уҡытыу, ғөмүмән, телеү мәсьәләһе көнүҙәк темаларҙың береһе булған һәм булаcаҡ, тиеп уйлайым. Сөнки телде үҫтереү буйынса камиллашыуҙа сик юҡ. Матур итеп һөйләшергә, яҙырға өйрәнгәндән генә һин халҡыңдың ысын улы йәки ҡыҙы булып китмәйһең әле. Үҙең белһәң, үҙеңде уратып алған яҡындарыңа өйрәтеү, улар өйрәнһә, артабан бөтә донъяға таратыу - был өлкәлә эш бөтөрлөк түгел!

Әлбиттә, телде үҫтереүҙән, һаҡлауҙың төрлө алымдары бар. Мәҙәни саралар үткәреү, аралашыу, китап уҡыу һәм башҡалар. Мәктәптә уҡыусыларға тел уҡытыу - шул ысулдарҙың иң мөһимдәренең һәм шул уҡ ваҡытта яуаплыларының, еңел булмағандарының береһе. Ә ошо эштә туранан-тура ҡатнашыу иҫ киткес кинәнес тойғоһо бирә. Мин уҡытыусы! Мин тел серҙәренә төшөндөрөүсе остаз, телде һаҡлаусы, милләт киләсәген уҡыусыларың менән бергәләр төҙөүсе! Ниндәй бәхет! Бына шуға ла эшемде яратам, ғорурланам һәм, әлбиттә, алда торған ауырлыҡтарҙан да ҡурҡмайым! Сөнки биргән һабаҡтарым уҡыусыларымда һеҙә бара, ата-әсәләренең ышанысы һәм ярҙамы ла - ҙур таяныс. Әгәр ҙә ошо уҡыусыларымды тағы ла тиҫтә-ике тиҫтә йылдан осратып, улар менән йәнә дәрестәге һымаҡ кинәнеп башҡортса аралаша алабыҙ, һаман да Кинйә Арыҫланов, Динис Буләков, Булат Рафиҡов һәм башҡа күренекле яҡташтары хаҡында иҫләйҙәр икән, тимәк, дөрөҫ юлдан барам. Тимәк, һайлаған һөнәрем дөрөҫ һәм бәхетем дә ысын икән!..

Мин Мәләүез ҡалаһының Кинйә Арыҫланов исемендәге 9-сы гимназияһында 5-11-се кластарҙы башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытам. Беҙҙең гимназияла 700-ҙән ашыу бала уҡый. Иң мөһиме һәм ҡыуаныслыһы: улар барыһы ла башҡорт телен дәүләт теле түгел, ә туған тел булараҡ өйрәнә!

Беҙ башҡорт теленән өс уҡытыусы белем бирәбеҙ һәм, әйтергә кәрәк, уҡыусыларҙа башҡорт теленә һөйөү, хөрмәт уятыу дәрес биреүгә, инша яҙыуға, китап уҡыуға ғына ҡайтып ҡалмай. Гимназиябыҙҙа етәкселек, коллегалабыҙ тарафынан тыуҙырылған шарттар, тырышлыҡ - барыһы ла балаларҙа рух тәрбиәләй. Ҡурай түңәрәге эшләп килә, унда йөрөгән уҡыусылар, ҡала мөхитендә үҫкән балалар булыуға ҡарамаҫтан, һис шикһеҙ үҙ телендә ихлас аралаша. Ошо тәү ҡарашҡа күҙгә салынып та бармаған күренештәр ҙә, уйлай китһәк, телебеҙҙе, милли мөхитте үҫтереүҙә бер аҙым булып тора. Телгәм: һәр милләт тә ошолай телен ҡәҙерләнһән, дуҫлыҡ нигеҙендә үҫтерһен ине!

Ғөмүмән, ҡала, республика кимәлендә лә милли мөхит булдырыуға һалынған көскә иғтибар иткем килә, бөтә сараларҙы, шарттарҙы, гранттарҙы, конкурстарҙы күҙ уңында тотһаҡ та - ҙур эш башҡарыла. Иң мөһиме, был күренеште юғалтмай, уны артабан да бергә үҫтерергә телйешбеҙ! Эйе, нәк тейешбеҙ, шул сакта ғына телебеҙ йәшәр. Уҡытыусымы һин, журналисмы, кондуктормы, эшсеме, әсә, ҡатын, яугирмы, һәр кем үҙ урынында телем тиеп йөрөгән телеп йәшәһен ине.

**Илүзә ӘБДРӘЖӘПОВА.**

✓ *Ҡаған дәүләттең барса халҡы өҫтөнән сикләнмәгән властка эйә булған һәм бөтөн ерҙең иң юғары хужаһы тип иҫәпләнгән. Ул һуғыш һәм солох мәсьәләләрен бер үҙе хәл иткән.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



**Көнбайыш Төрки ҡағанаты**

Ҡағанатты булдырыусылар һәм уның төп халкын тәшкил итеүселәр - гундарҙың иң яҡын вариҫтары булған төрки телле ҡәбиләләр. Төркиҙәрҙең иктисады, хәрби-сәйәси уныштары нигеҙендә ныҡ үҫешкән күсмә һәм ярым күсмә малсылыҡ, тимер һәм төҫлө металдар металлургияһы ята. Әммә Төрки ҡағанаттары составына тотошлайы менән ер эшкәртеүсе халыҡтар, сәйәси-мәҙәни тормош һәм төрлө һөнәр үҙәктәре булған ҙур һәм бәләкәй ҡалалар инә.

Төрки ҡағанаттары дәүере Евразия далаларында яңы формалы предметтар уйлап табылыуы һәм уларҙың киң таралыуы менән тап килә. Был ҡаҙаныштар, башлыса, төрки ҡәбиләләренә ҡарай. Улар иҫәбенә ағас нигеҙле ҡаты эйәрҙәрҙе һәм өҙәңгеләрҙе индереп була. Өҙәңге тәү башлап Япония һәм Кореяла уйлап табылып, уларҙан уны ҡытайҙар үҙләштергән, ә һуңынан төркиҙәр тиҙ арала дала киңлектәренә тараткан, тигән фекер бар. Ҡаты нигеҙле, өҙәңгеле эйәр һыбайлы яугирҙарҙың ҡоралдарын тамырынан үҙгәртә. Аяҡтары менән өҙәңгегә терәлеп, ат өҫтөндә иркен ултыра алған яугир дошманына ҡоралы менән һеңдерә һуға йә иһә өҙә саба ала. Бындай мөмкинлек һыбайлыларҙың ҡылыс менән ҡоралланa башлауына, ҡылыстың үткер яғы бер аҙ бөгөбөрәк эшләнеүенә нигеҙ була. Шулай уҡ тимер селтәрле һайман йә иһә панцирлы кейем кейгән яугирҙарҙы яралай алыу өсөн тар ғына өсмөйөшлө йә иһә ромб формаһындағы уҡ башаҡтарын ҡулланыуҙы мәҙәниәттең яңы элементы итеп ҡарау фарыз, ҡаҙыу эштәре барышында уларҙың ҡалдыҡтары йыш табыла.

Төркиҙәр үҙҙәренән һуң руна яҙмаһы ҡалдырған. Күрәүебеҙсә, ул мең йыл элегерәк барлыҡҡа килгән, һәм VI-VIII быуаттарға тиклем яҙма ҡомартҡылар һаны күпкә артҡан. Төркиҙәр бил ҡайыштары ҡаптырмаларында, көҙгөләрҙә, балсыҡ һауыт-һабаларҙа, ҡая таштарҙа яҙған, әммә рәсми мәғлүмәттәр оҙон (3-4 метрға тиклем) һәм күп ҡырлы (киңлеге 40-60 см) таштарға яҙып ҡалдырылған. Яҙмалар ҡағандың дәүләт аппаратында эшләүсе, ташҡа сокоп яҙа белеүсе оҫталар тарафынан башҡарылған, уларҙа ҡағандарҙың һәм уларҙың ярандарының ҡаһармандыҡтары бәйән ителгән. Ташҡа соҡоп яҙыу йолаһы боронғо башҡорттарға ла билдәле булған. "Илсе Ғайса" тигән башҡорт йырында ошондай һүҙҙәрбар: "һау-сәләмәт ҡайтһам Уралыма тарих яҙыр инем ташына".

Яҙма сығанаҡтар төркиҙәр йәмғиәтенең ижтимағи-иҡтисади яҡтан башҡа иртә феодаль дәүләттәрҙән артыҡ айырылып тормауы хаҡында һөйләй. Ҡаған дәүләттең барса халҡы өҫтөнән сикләнмәгән властка эйә булған һәм бөтөн ерҙең иң юғары хужаһы тип иҫәпләнгән. Ул һуғыш һәм солох мәсьәләләрен бер үҙе хәл иткән, министрҙарын, вәзирҙәрен (кәнәшселәрен), айырым провинцияларҙың наместник-хакимдарҙарын үҙе тәғәйенләп ҡуйған, үҙенең ярандарына халҡы-ние менән бергә ҙур биләмәләр бүләк иткән. Төркиҙәр үҙ дәүләтен "ун уклы ил" тип атаған ("ун ук будун"), сөнки ул башында наместник торған ун провинцияға бүленгән. Наместниктың дәүләт аппараты ҡағандың шундай уҡ аппаратының бәләкәйерәк бер вариантын хәтерләтә. Төркиҙәрҙең үҙҙәренең яҙма сығанаҡтарында 30-ға яҡын ижтимағи төркөмдәре телгә алына. Дәүләттәге бөтөн матди байлыҡтарҙы етештереүселәр - ырыу-ҡәбиләләрҙең ябай малсылары, ер эшкәртеүселәре һәм һөнәрмәндәре, улар өҫтөнән эре феодалдар хакимлыҡ ҡылған.

Ҡаған ҡулы аҫтындағы барса халыҡ һалым түләгән, һәм уны көйләү маҡсатында дәүләттә йыш ҡына халыҡ һәм, бәлки, мал иҫәбен алыу үҙгарылған. Ярлы малсылар һәм байҙар араһындағы контрастың ни тиклем киҫкен булыуына дәлил итеп Енисей йылғаһы буйындағы бер таштағы ошондай яҙыуҙы миҫалға алырға була: "Мин 6 мең атымды ҡалдырып киттем" (йәғни, теге донъяға күстем).

Төркиҙәрҙең инаныстарын маздеист диненә ҡараған тип классификациялап була, сөнки улар зороастризм йоғонтоһонда формалаша. Уларҙың баш илаһы Тәңре мәңгелек күк һәм ҡояшҡа тиңләнгән. Төрки ҡағандары, илаһи сығыштарын раҫлау маҡсатында, үҙҙәрен Күк менән сағыштырған, йә иһә Күк улдары, тип атаған. Руник яҙмалар текстарында йыш ҡына ҡағандар хаҡында "Күккә оҡшаш", йә иһә "Күктә тыуған" кеүек сағыштырыуҙар ошоға дәлил булып тора. Боронғо төркиҙәр һәр бер тәбиғәт күренешен ҡурсалаусы илаһтар булыуына инанған, улар араһында иң ныҡ хөрмәт ителгәне - Умэй алиһәһе (боронғо иранлыларҙа Хуми), ул барса ҡоштар һәм йәнлектәр донъяһы башында тороусы, тип иҫәпләнгән. Руна яҙмалары текстарында уға махсус арналған юлдар осрай. Уларҙың береһендә ошолай тип әйтелә: "Күк, Умэй алиһә, изге Ер-Һыу - бына шулар беҙгә еңеү бүләк итте, тип уйларға кәрәк". Шулай уҡ төркиҙәр Умэйҙы (башҡортса Һомайҙы) йорт-ҡураны, бала-сағаны һәм бәғзе бер ижтимағи эштәрҙе ҡурсалаусы итеп иҫәпләй. Төркиҙәрҙә төрлө дини йолаларҙы үтәгәндә мөһим урын биләгән шамандар ҙа булған. Улар шамандарҙың ҡош һәм илаһтар телен белеп, улар менән аралаша алыуына ышанған.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Висла йылғаһында оборонала

1944 йылдың декабрендә 16-сы гвардия атлы дивизияһы ойошторолоуының 3 йыллығын билдәләй. БАССР Юғары Советы Президиумы һәм партия өлкә комитеты дивизия командованиеһына һәм яугирҙарына ҡотлау хаты ебәрә. Улар атлы ғәскәребеҙҙең Башҡортостан халҡының ышанысын аҡлағаны һәм яу ҡырҙарында күрһәткән тиңһеҙ ҡаһарманлығы өсөн рәхмәт белдерә. Ошо ҡыуанысл ваҡиғаға фронттың хәрби советы ағзаһы, генерал-лейтенант Н.Ф. Телегин 1944 йылдың июлендәге алыштарҙа ҡаҙанған уныштары өсөн данлы дивизиябыҙға II дәрәжә Суворов орденын тапшыра. СССР-ҙың иң юғары хәрби наградаларының береһе булған ошо орден ҡаһарман шайморатовсыларға алмашҡа килгән офицерҙарҙың, сержант һәм рядовой атлыларҙың Башҡортостандың хәрби данын бөтөн ил кимәлендә таныта алыуына бер дәлил булды.

Оҙаҡ ҡына оборонала тороу осоронда яҡын көндәрҙә башланасаҡ ҡеүәтле һөжүм итеү операцияһына әҙерлек тулы кимәлдә башҡарылды, барса подразделениелар өҫтәмә көстәр менән тулыландырылды, һуғыш кәрәк-яраҡтары тупланды, Үҙәк һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европа илдәрен фашист ҡоллоғонан азат итеү өсөн барған алыштарҙа яугирҙарҙың боевой рухын нығытыу маҡсатында сәйәси эш алап барыуға күп иғтибар бирелде. Совет офицерҙары һәм һалдаттары алда торған ауыһыҙ алыштарҙың Европала алып барылған азатлыҡ һуғышы икәнлеген яҡшы аңлай ине. Сит илдәр территорияһында тыныс халыҡҡа яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙың мөһимлеге, әле лә хәрби ҡеүәтен юғалтып бөтмәгән дошманды тар-мар итеү һәм еңеү яулау өсөн һәр кемдән хәрби фиҙакәрлек талап ителеүе хаҡында командирҙар һәм сәйәси хеҙмәткәрҙәр даими эш алып барҙы, яугирҙарҙың әхлаҡи-сәйәси кимәлен күтәреү кәмһетелгән, таланған халыҡтарҙы азат итеү миссияһының алыштырғыһыҙ бер өлөшө итеп ҡаралды.

Украинаның Волын өлкәһендә, Белоруссияла һәм Польшала, шулай уҡ оборона алыштарында күрһәткән батырлыҡтары өсөн 16-сы гв. атлы дивизияһының йөҙәрләгән яугирҙары дәүләт наградаларына лайыҡ булды. 1-се Белорус фронты буйынса бойороҡтарға ярашлы, апрель-август айҙарында хөкүмәт наградалары ошо офицерҙарға һәм һалдаттарға тапшырылды: 60-сы гв. атлы полкының эскадрон командиры, гв. өлкән лейтенанты Мүлки Байрамовҡа һәм шул уҡ полктың взвод командиры, гв. өлкән сержанты Закир Ҡорбановҡа - III дәрәжә Богдан Хмельницкий ордены; 60-сы гв. атлы полкы командиры урынбаҫары, гв. майоры Ғәзиев Рамазан Магомед улына - Александр Невский ордены (һуңынан ул II дәрәжәләге Ватан һуғышы орденына ла лайыҡ була); шулай уҡ фронт командованиеһы тарафынан разведка офицеры, гв. өлкән лейтенанты Иван Калашников - I дәрәжә, 60-сы гв. атлы полкының артиллерия командующийы, капитан Сафа Мөтиғуллин - II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары менән бүләкләнә.

69-сы армия командованиеһы бойороҡтарына ярашлы, май һәм сентябрь айҙарында 60-сы гв. атлы полкының штаб начальнигы, гвардия майоры Иван Овсянников, дивизия штабының элемтә начальнигы, гв. капитаны Хәсәйен Уразгилдиев Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**"Ик - осколоҡ, ул һалҡын һыу эскәндән һуң икмәк ашаған хәлдә күкрәктән сыға. Әйтәләр: "ани ик тутти" - уны осколоҡ тотто".**

Был осраҡта "ик" һүҙенең күкрәктән сыҡҡан тауышты ҡабатлауҙан хасил булыуы беленеп тора. Шуныһы ҡыҙыҡлы, был боронғо төрки һүҙе русса "икота" тип әйтелә, бында беҙ шул уҡ "ик" тамырын күрәбеҙ. Хәҙерге әҙәби башҡорт телендә ошо уҡ мәғәнәлә айырым "ик" йә иһә "иҡ" һүҙе осрамай, был осраҡта "осколоҡ" һәм "сиҡаҡ" һүҙҙәре ҡулланыла. Әммә шул уҡ "сиҡаҡ" һүҙенең тамырындағы "сиҡ" ижеге боронғо төркиҙәрҙең "ик" тигәненә тура килә. Шулай уҡ йәнле һөйләштә "иҡылдау" тип әйтелеү осраҡтары күҙәтелә.

**"Ол" - "ул" мәғәнәһендә ҡулланылған киҫәксә. "Ол андай айди - ул шулай әйтте".**

Был осраҡта Ҡашғари хәҙергеҫә зат алмашын белдергән һүҙҙе киҫәксә тип нарыҡлай, бәлки, ул заманда зат алмашы төшөнсәһе ҡулланылмағандыр. Йәнә бында "андай" һүҙе иғтибарҙы йәлеп итә, хәҙергеҫә "шулай" тигәнде белдерә. Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә "ундай" (диалектта - "андай") һүҙе "уның кеүек" тигәнде аңлата: "Мин ундай эшкә риза түгел".

**"Ол - "теге" мәғәнәһендәге киҫәксә. "Ол әр - теге ир".**

Башҡорт телендә "ул кеше" һәм "теге кеше" варианттары бер үк мәғәнәлә ҡулланыла.

**"Ол - исемдәр һәм ҡылымдар менән ҡулланыла торған раҫлау киҫәксәһе. "Ол мениг оглум ол" - ул ысынлап та минең улым. Йәнә әйтәләр: "ол эвкә бармыш ол" - ул ысынлап та өйөнә ҡайтты".**

Башҡорт телендә бер үк "ул" һүҙен зат алмашы һәм киҫәксә рәүешендә ҡулланыу киң таралған: "Ул быны белмәй ҡалған бит ул!", "Ул һин әйткәнгә һис бер иғтибар итмәйҙер ул!" һ.б. Ошо рәүешле ниҙелер раҫлау менән бергә хәбәрҙе көсәйтеп ебәреү функцияһы үтәлә.

**"Эм - дарыу. Бынан "эмчи" - "дауалаусы" хасил була".**

Телебеҙҙәге "им" һүҙенең үтә боронғо тамырлы булыуы раҫ. Имсе, имләү, имен һүҙҙәре бер мәғәнәүи ерлектә яралған. Имсе - им биреүсе, тән-йәнде таҙалаусы, имен - иҫән-һау булыу. "Им" һүҙенең "ым" һүҙе менән фонетик яҡынлығын архаик замандарҙа имселәрҙең сирлене ымхәрәкәт ярҙамында (шаманлыҡ) дауалауҙары менән бәйләп аңлатырға була.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

***✓ Шундай итәғәтле лә, ябай ҙа остаздарыбыҙ беҙгә өлгө булды, беҙҙең аңыбыҙға, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, уларға оҡшарға тырышыу, улар һымаҡ билдәле кеше булып китеү уйы һеңә барғандыр, тим.***



# УЛ ҠАРА

## ҡара тир түгеп

**Башҡортостан нефтселәре хаҡында романдар, повестар ижад ителгән, документаль әҫәрҙәр ҙә етерлек. ЮЛБАРИСОВ Эрнст Мирсаяф улы ла ғүмерен нефть сығарыу эшенә арнаған шәхестәрҙең береһе. Бер үк ваҡытта ул ғалим-геолог, дәүләт эшмәкәре, вуз уҡытыусыһы ла. Э.М. Юлбарисов - геология-минералогия фәндәре кандидаты, техник фәндәр докторы, 1992 - 1998 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының Геология һәм ер аҫтын файҙаланыу буйынса дәүләт комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған нефтсеһе, Рәсәй Федерацияһының почетлы нефтсеһе, Рәсәй Федерацияһының почетлы ер аҫтын тикшереүсеһе, СССР-ҙың уйлап табыусыһы исемдәренә лайыҡ булған. Рәсәй Федерацияһының Тау фәндәре академияһының мөхбир ағзаһы. Гәзит уҡыусыларға уның менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**Хөрмәтле Эрнст Мирсаяф улы! Һеҙ - Башҡортостанда ғына түгел, нефть сығарыу өлкәһендәге ғилми-ғәмәли хеҙмәттәрегеҙ менән Рәсәй кимәлендә танылыу тапҡан ғалим. Әңгәмәбеҙҙе бер фәлсәфәүи һорауҙан башлап ебәрһәк, урынлы булыр. Аллаһы Тәғәлә барса кешеләрҙе бер иш итеп яралтҡан, ир заты булһынмы, ҡатын-ҡыҙмы - уларҙың организмы бер биологик ҡанундарға ярашлы йәшәй һәм көйләнә. Шул уҡ ваҡытта беҙ бер төрлө түгелбеҙ, һәр беребеҙ үҙенсәлекле. Берәүҙәр үҙ тормошонда үҫешкә ынтыла, белем эстәй, яңы үрҙәр яуларға тырыша, һөнәренә ижади ҡарай, оло шәхес булып китә. Ә бәғзе берәүҙәр ҡәҙимгесә, артыҡ борсолмайынса, ҙур маҡсаттар ҡуймайынса ғына йәшәй: йәнәһе, минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе. Ни өсөн йәшәйешебеҙ ошолай ҡоролған икән?**

- Ошо уҡ һорауҙы миңә былтыр әңгәмәләшеп ултырғаныбыҙҙа мәрхүм Марат ағай Хафизов биргәйне. Ул күренекле башҡорт педагогтарының береһе, мәғариф өлкәһендә 50 йыл эшләгән, шуның 20 йылында мәктәп директоры вазифаһын башҡарған. "Педагогик эшмәкәрлегем осоронда мин эшләгән мәктәптәрҙә меңәрләгән уҡыусылар тамамлап сыҡты. Шуларҙың ҡайһы берҙәре үҙ тормошонда юғары ҡаҙаныштарға өлгәште, байтағы уртаса кимәлгә етеү менән тынысланды, ә бәғзе берәүҙәре бөтөнләйгә юғалып ҡалды. Һеҙ ҙә ябай ауыл балаһы, тормошоғоҙҙа ҙур уңыш-ҡаҙаныштарға өлгәшкәнһегеҙ. Һеҙ, эҙләнеүсе, тикшеренеүсе булараҡ, ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?" - тип һораны ул. Тап шул саҡта тормошом, ғилми эшмәкәрлегем менән бәйле "Был донъяға беҙ килгәнбеҙ икән, юҡҡа түгел, юҡҡа түгелдер", тигән китабым сыҡҡайны. Әңгәмәбеҙ барышында икәүләп ошондай һығымтаға килдек: әгәр йәшәйешеңдә, эшмәкәрлегеңдә ҡоростай ныҡ холоҡло (характерлы) булмаһаң, башҡалар һоҡланырҙай уңыштарға өлгәшә алмаясаҡһың, һәм һинән оло шәхес тә сыҡмаясаҡ. Был шәхес үҫеше өсөн төп шарт. Һин кем генә булма, ҡайҙа ғына эшләмә - ныҡышмал булырға, юғары үрҙәр яулар өсөн ҡара тир түгеп эшләргә бурыслыһың.

**Психологтар билдәләүенсә, кеше холҡоноң формалашыуына уның эске мотивацияһы, теләктәре, ҡыҙыҡһыныуҙары, ниәттәре көслө йоғонто яһай...**

- Әлбиттә, шулай. Әммә үҫеп килеүсе баланың ниндәй мөхиттә йәшәүе лә бик мөһим. Бында нәҫелдән, ғаиләнең роле ҙур. Артабан ижтимағи-дәүләти институттар - балалар баҡсалары, мәктәптәр, урта һәм юғары уҡыу йорттары, һәр йәш кешегә белем һәм тәрбиә биреп, уның шәхесен ыңғай яҡтан формалаштырыу маҡсатын ҡуя. Әйтергә кәрәк, дөйөм ижтимағи мөхитте, уның яҙылмаған ҡанундарын бер ни менән дә алыштырып булмай. Бына мин үҙемдең йәшлек йылдарын иҫләйем. Ниндәй кешелекле, эскерһеҙ бер заман ине бит ул саҡтар! Мин Мәскәүҙә уҡыған йылдарҙа беҙҙең бер профессорыбыҙ студенттар менән һин дә мин аралашып, футбол уйнай торғайны. Шундай итәғәтле лә, ябай ҙа остаздарыбыҙ беҙгә өлгө булды, беҙҙең аңыбыҙға, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, уларға оҡшарға тырышыу, улар һымаҡ билдәле кеше булып китеү уйы һеңә барғандыр, тим. Йәш кеше яҡшыны күрһә, үҙе лә яҡшыға, яҡтыға ынтыла башлай. Һине һанлаған, үҙ-иш иткәндәр һиңә лә ҡәҙерле, тап армиялағы кеүек.



**Ысынлап та, бик бәләкәй сағында баланың уңыштары ата-әсә тәрбиәһенән, үҫә килә уҡытыусы-остаздарының ҡыҙыҡһындыра, өйрәтә-уҡыта белеүенән торһа, балиғ булғас, был, башлыса, уның үҙ ғәмәлдәре, үҙен-үҙе тәрбиәләй, үҫтерә алыуы менән бермә-бер бәйле. Ошо фекер менән килешәһегеҙҙер, тим.**

- Бына, үҙ тормошом менән бәйләп, бер миҫал килтерәйем. Университетҡа индем, геолог һөнәренә өйрәттеләр. Шунан Башҡортостанға ҡайтып, нефть сығарыу өлкәһендә эшләй башланым. Әммә беҙгә, буласаҡ геологтарға, нефть сығарыу технологияһын өйрәтмәнеләр. Нефть ятҡылыҡтарын нисек эҙләргә генә өйрәттеләр. Нефть сығарыу эшен ғәмәли рәүештә 3 йыл буйына үҙемә өйрәнергә тура килде. Скважиналар торошон тикшерәбеҙ, буровойҙарҙы хеҙмәтләндерәбеҙ, яландан арманһыҙ булып, арып-талып ҡайтабыҙ. Бергә эшләгән, бер бүлмәлә йәшәгән дуҫтарым: "Беҙ рәхәтләнеп ял итәбеҙ, араҡы эсеп, күңел асабыҙ, ә һин ни эшләп улай, тамаҡ туйҙырып алыу менән, китапханаға йүгерәһең ул, алйот?" - тип ғәжәпләнә торғайны. Ә минең иң көслө теләгем - нефть сығарыу буйынса булған китаптарҙы табып, ентекләп өйрәнеү. Туймазыла эшләгән сағымда нефть сығарыу өлкәһе өсөн үтә мөһим булған нефть промыслалары геологияһын яҡшы белеү кәрәклегенә инандым. Һуңынан, "Башнефть" етештереү берекмәһендә эшләп, бер аҙ тәжрибә туплағас, аспирантураға инеү теләге тыуҙы. Барҙым, индем, ғилми эш өсөн бер кем дә тикшерергә теләмәгән теманы алырға баҙнат иттем.

**Һеҙгә тағы ла бер һорау менән өндәшәйем әле. Редакциябыҙ яңы проект башланы: "Улар башҡорт мәктәбендә уҡыны!" - тип атала ул. Һүҙ бына ни тураһында бара. Совет осоронда, дөйөм алғанда, милли сәйәсәт дөрөҫ алып барылды: ауылдарыбыҙҙа балалар үҙ туған телендә белем алды, әҙәби китаптар ҙа, ғилем өлкәһенә ҡарағандары ла башҡорт теленә тәржемә ителде. Уҡыусылар урта мәктәпте тамамлағансы башҡортса уҡыны. Тора-бара халыҡ араһында бер ниндәй нигеҙһеҙ фекер таралып китте: йәнәһе, балалар башҡортса уҡыһа, улар артабан уҡыу йорттарына инә алмай, ябай колхозсы йә иһә эшсе булып ҡалырға мәжбүр була. Ошо миф хәҙерге заманда ла йәшәп килә бит. Ошо турала ни әйтерһегеҙ?**

- Үҙемде һәм бергә башҡорт мәктәбендә уҡып сыҡҡан иптәштәремде миҫалға килтерәйем әле. Муллаҡайҙа тыуғанмын. Атайым Архангел районының Тәүәкәс, инәйем - Иглин районының Түбәнге Ләмәҙ ауылынан. Береһе - ҡумрыҡ табын, икенсеһе көҙәй башҡорттарынан. Атайым-инәйемдәр уҡымышлы заттарҙан булды, икеһе лә үҙ заманында мәктәп директоры вазифаһын башҡарҙы. Атайым 1943 йылда һуғышта һәләк булды. 1946 йылда, миңә 7 йәш тулғас, Архангел ауылындағы рус мәктәбенә уҡырға барҙым, ул саҡта инәйем ошо мәктәптә уҡытты. Уға тиклем ғаиләбеҙҙә тик башҡортса ғына һөйләшә инек. Рус телен аҡрынлап өйрәнә башланым. Әммә мин унда оҙаҡ уҡый алманым: үгәй атайым менән инәйемдең бәпестәре тыуҙы, уны ҡарашырға кәрәк, мине Оҙонлар ауылына кире алып ҡайттылар, үгәй атайымды шул ауылға эшкә ебәргәйнеләр.

Бер ваҡыт аталары һуғышта үлгәндәрҙең балалары өсөн Өфөлә 5-се һанлы балалар йорто асылғанын белеп ҡалдыҡ. Шунан инәйем оло ағайым менән мине ошо балалар йортона урынлаштырҙы, ә кесе туғаныбыҙ Рафаилды 1-се һанлы балалар йортона алдылар, атайым һуғышҡа киткәндә ул 8 айлыҡ ҡына сабый ине. Балалар йортонда тәрбиәләнеүселәрҙе Революцион урамындағы мәктәпкә уҡырға йөрөттөләр, ул хәҙерге полилингваль гимназия урынындағы 4 ҡатлы йортта урынлашҡайны. Яңынан беренсе класта уҡый башланым, беҙҙе, башҡорт балаларын башҡорт телендә уҡыттылар. Математика дәрестәрен үҙ иттем. Математика - фәндәр батшаһы. Ул логик фекерләй белеүҙе талап итә. Уҡытыусыбыҙ берәй ауыр сиселешле мәсьәләне таҡтаға яҙып ҡуя ла, рәттәр буйлап ҡарап сыға - кем иң элек сиселеш юлын таба икәнен күҙәтә инде. Әле эшебеҙҙе тамамлап та өлгөрмәй ҡалабыҙ, уҡытыусыбыҙ класс журналында Халиҡов Дамирға, Әнүәр Мортазинға, Юлбарисовҡа "5"-ле билдәһен ҡуя. Мәктәп беҙҙең өсөн үҙе алыштырғыһыҙ бер донъя булды. Ул саҡта беҙгә өлгө булырлыҡ олораҡ егеттәр ҙә уҡыны - буласаҡ шағирыбыҙ Рәми Ғарипов 9-сы һанлы мәктәпте 1950 йылда тамамланы. Беҙҙән алдараҡ Ғайса ағай Хөсәйенов тә ошо мәктәптә уҡып сыҡты, һәм беҙ ҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мәрйәм апай Ғималованан һабаҡтар алдыҡ. Мәжит Ғафури, Ғәлимов Сәләм, Рәшит Ниғмәти кеүек күренекле шағирҙарыбыҙҙың күп шиғырҙарын яттан белә инек. 50-60-сы йылдарҙа йәштәрҙең техник белемгә ынтылышы көслө булды, шулай ҙа беҙҙә гуманитар фәндәргә ҡарата ла ҡыҙыҡһыныу уята алдылар. *(2019 йылда Э.М. Юлбарисов төҙөгән "Урыҫса-башҡортса геология терминдары һүҙлеге" донъя күрҙе. - **Ред. иҫк.**).*

Шулай итеп, 10-сы класты көмөш миҙалға тамамланым. Ә ағайым шул уҡ мәктәпте 1953 йылда көмөш миҙалға тамамлап, Мәскәү дәүләт университетының геология факультетына уҡырға инде. Мәктәпте тамамлағас, әсәйемә донъя көтөргә ярҙам итәм тип, ауылға ҡайттым. Сим заводына ағас әҙерләү эшенә урынлаштым. Иртәнән кискә тиклем урмандабыҙ. Шулай бер көндө беҙ эшләгән ергә әсәйем килеп етте. Белмәйем, ҡара урман араһынан беҙҙе нисек эҙләп тапҡандыр ул - баҡтиһәң, миңә Мәскәүҙән имтихандарға саҡырыу ҡағыҙы килгән икән. Киттем баш ҡалаға. Августың 10-дарында Ҡаҙан вокзалына килеп еттем. Тәүҙә документтарымды архитектура институтына ебәргәйнем. Аҙаҡ МДУ-ның геология факультетына уҡырға инергә ҡарар иттем. Дуҫтарымдан Рим Зиянгиров мәғариф министры Фатима апай Мостафинаның йүнәлтмәһе менән Мәскәү кинематография институтына уҡырға инде, ә Рәшит Имашев Ҡаҙан ҡалаһына художество училищеһына уҡырға китте. Һуңынан Рәшит күренекле рәссам булып танылды, ТАССР-ҙың һәм БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, ТР-ҙың халыҡ рәссамы тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булды. Башҡортостандан Рәшит Сәлихов тигән беҙҙән олораҡ егет Мәскәүҙең архитектура институтында уҡыны. Артабан ул Башҡортостанда күп йылдар буйына төҙөлөш өлкәһендә яуаплы вазифалар башҡарҙы, республикабыҙҙың баш архитекторы урынбаҫары дәрәжәһенә лә өлгәште.

Бына мин һеҙгә бер нисә генә миҫал килтерҙем, әммә башҡорт мәктәбен тамамлап, юғары белем алған шәхестәр араһында, күренекле һөнәр эйәләре булып, Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәй кимәлендә танылыу тапҡандар бик күп ул.

**Һеҙ йәштән Башҡортостандың ер аҫты байлыҡтары, уларҙы нисек итеп табыу менән ҡыҙыҡһындығыҙмы?**

- Юҡ, ер аҫты байлыҡтары менән дә ҡыҙыҡһынманым, был уҡыу йорто тураһында ла уйлап ҡарағаным да булманы. География фәнен яраттым, әммә мине, башлыса, ерҙең аҫҡы өлөшөн белеү ҡыҙыҡһындырманы, ер өҫтө объекттары - тауҙар, йылға-күлдәр, ҡалалар, илдәр тураһында күберәк белгем килде. Ә шулай ҙа мин Мәскәү дәүләт университеты геология факультетының нефть разведкаһы өлкәһенә ҡараған йүнәлешен һайланым. Уҙған быуаттың 50-се йылдарында Башҡортостанды "Икенсе Баку" тип атанылар - йылына 15-әр млн тонна нефть сығарылды ул саҡта. Ошо ла йоғонто яһағандыр.

***✓ Урал тауының аҫтында, тау ҡатламдарынан бик түбәндә, геологияла кембрий тип аталған пластарҙа нефттең булыу-булмауы асыҡланмаған, сөнки ул тиклем тәрәнлеккә барып етерлек технологиялар юҡ.***

# АЛТЫНДЫ... тапҡан ғалим

Әй, уҡырға инер өсөн имтихандар биргәндә килеп сыҡҡан сетерекле хәл тураһында ла һөйләйем әле. Мин мәктәпте көмөш миҙалға тамамлағанмын, ике имтихан тапшырырға кәрәк. Беренсеһе - математиканан яҙма эш. Тапшырҙым. Икенсе көндө кемдәр уңышлы биргән, шуларҙың исемлеген сығарып элделәр. Шаҡ ҡаттым - исемлектә минең фамилиям юҡ! Тимәк, математиканан телдән бирелә торған имтиханға индермәйәсәктәр. Аптырап, университет бинаһынан сығып, оҙаҡ ҡына уның шпиленә ҡарап торҙом: "Бер булмағас, булмаҫ инде", - тип, Черемушкилағы ятаҡҡа ҡайтып яттым. Бүлмәләш иптәштәрем - Магадандан, Краснодарҙан, башҡа яҡтарҙан килгәндәр - имтихандалар. Кинәт кенә башыма бер уй килде: "Ни эшләп әле минә "икеле" ҡуйырға тейештәр ул? Билетта нисә мәсьәлә, барыһы ла иҫемдә бит. Уларҙы дөрөҫ сисә алғаныма шик юҡ. Тоттом да имтихан биргән ергә кире киттем. Татьяна Степановна исемле ҡатын ғилми секретарь ине, унан: "Минә үҙемдең математиканан яҙма эшемде ҡарап сығырға бирегеҙ әле", - тип һорайым. Ул риза булды, аудиторияға инеп ултырып, эшемде асып ҡараным. Ҡыҙыл ҡәләм менән ҙур итеп "2" билдәһе ҡуйылған. Тәүҙә "3" ҡуйған, әммә уныһын төҙәткән тикшергән кеше. Бер мәсьәләнең яуабына риза булмайынса, һыҙып ҡуйған был. "Кем тикшергән, шул уҡытыусыны саҡырығыҙ әле", - тимен. Килде был, ултырҙы, физмат аспиранты булып сыҡты. Һәр мәсьәләнең сиселеше дөрөҫ булғанлығын иҫбат итә башланым, геометриянан, тригонометриянан. Логарифм буйынса мәсьәләне тикшерәбеҙ. Ул һинең яуабың ғына тура килгән, дөрөҫ сисә алмағанһың, тип киреһен һөйләй. Мин һәр мәсьәләне төрлө юлдар менән сисеп булыуы хаҡында һөйләйем, үҙемдең һүҙемде һүҙ итергә тырышам. Теге минә әйтә: "Әйҙә, тауыш сығармайыҡ. Телдән бирә алһаң, уҡырға инерһең". Мин риза. Өсәүләп ултырып имтихан алдылар минән. Ә минең хәтер яҡшы, һәр бер бирелгән һорауға дөрөҫ яуап ҡайтарам. Тора-бара һораша башламаһындармы: ҡайҙан килгәнмен, ниндәй мәктәптә уҡығанмын, уҡытыусыларым кем булған. Бына шулай МДУ-ла уҡый башланым.

**Мәскәү дәүләт университеты... Фән һәм мәғарифтың буй етмәҫтәй тойолған мәғрур бер ҡаяһылыр ул. Карл Маркстың донъяла киң билдәле "Капитал" тигән хеҙмәтенең инеш һүҙендә мәңгегә теркәлеп ҡалған бер фекере иҫкә төшә: "Фәндә бағаналы киң юл юҡ, һәм, арыу-талыуына ҡарамайынса, уның ташлы һуҡмаҡтарынан үрмәләүсе кеше генә фәндең балҡып торған үрҙәрен яулай ала".**

- Ә мин мәктәп стенаһына беркетеп ҡуйылған ике лозунгыны әлегә тиклем онотмағанмын. Беренсеһе: "Ильичты - беҙҙең уҡытыусыбыҙҙы, беҙҙең юлбашсыбыҙҙы хәтерегеҙҙә тотоғоҙ һәм яратығыҙ! И.В. Сталин". Икенсеһе: "СССР-ҙа хеҙмәт - намыҫ, фиҙаҡәрлек һәм батырлыҡ эше". В.И. Ленин оло илдең йәш быуындарын уҡымышлы, тәрән белемле итеп тәрбиәләүҙе беренсе планға ҡуя. Тырышып уҡыу һәм илгә фиҙаҡәр хеҙмәт итеү идеялары беҙҙең аңыбыҙға бала сағыбыҙҙан уҡ һеңдерелде. Белем алыу юлында ауырлыҡтар күп, әммә тейешле шарттар ҙа булдырылды. Беҙ, МДУ студенттары, университет бинаһынан һис бер сығып йөрөмәйенсә лә уҡый ала инек. Шунда уҡыйбыҙ, шунда ризыҡланабыҙ, шунда кино-концерттар ҡарайбыҙ, шунда уҡ йәшәйбеҙ. Лекциялар тыңлайбыҙ, төрлө фәндәр буйынса лабораторияларҙа шөғөлләнәбеҙ. Геохимия кафедраһының лабораторияһында уҡыу программаһында ҡаралған эштәр бик ҡыҙыҡлы булды. Артабан, фәнгә ылыҡҡас, тап ошо юҫыҡта эшләүемде дауам иттем.

**Һәр бер фәндең үҙ тикшереү өлкәһе, үҙ объекты була. Бер яҡтан, улар бер-береһенән ныҡ айырылып торған кеүек, икенсе яҡтан, тикшерелеүсе бер үк объект төрлө фәндәр күҙлегенән ҡарала ала. Һәм төрлө фәндәр киҫешкән урында көтөлмәгән асыштар яһала. Һеҙ, Эрнст Мирсаяф улы, ошо фекер менән килешәһегеҙҙер?**

- Әлбиттә. Бына минең ғилми эштәрем өс фән - геология, биология һәм технология менән бәйле булған тикшеренеүҙәрҙе талап итте. Университетта геология фәнен төплө өйрәттеләр. Аспирантурала уҡыған сағымда университеттың биология факультетына лекциялар тыңларға йөрөнөм. Ә бына технологик процестарҙы, шул уҡ нефть сығарыу технологияларын мин ғәмәли рәүештә, "Туймазынефть", "Башнефть" нефть сығарыу промыслаларында эшләгән осорҙа, аспирантурала уҡығанымда Татарстан, Удмуртия, Себер нефть ятҡылыҡтарын өйрәнеү аша үҙләштерҙем.

**Әйткәндәй, ғәмәли эшмәкәрлектән фән өлкәһенә күскән саҡта эш барышында тупланған тәжрибәнең роле бик мөһимдер ул?**

- Әйтәләр бит, теория практиканан башҡа үле, тип. Маркстың үлемһеҙ бер фекере лә ошо хаҡта: "Практика - хәҡиҡәт критерийы". Шәхсән 31 уйлап табыу патентына эйәмен. Уларҙың һәр береһе ғәмәли тикшеренеүҙәр менән раҫланған. Нефть сығарыу күләмен арттырыу менән бәйле булғас, яландарға барып йөрөп, һәр скважинаға һалынған микробиологик шыйыҡсаларҙың нефть ҡатламына йоғонтоһо һөҙөмтәләре лабораторияларҙа тикшерелде. Шул тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләрен анализлап, ғилми һығымталар эшләй инем.

**Геология-минерология фәненең үтә ҡыҙыҡлы бер проблемаһы буйынса йөҙәрләгән хеҙмәттәр яҙған ғалимһығыҙ. Фән юлына нисек аяҡ баҫтығыҙ?**

- Аспирантурала уҡыуым хаҡында әйткәйнем инде. Минең ғилми етәксем - геология-минералогия фәндәре докторы, профессор Сенюков Василий Михайлович. Ул яңы нефть ятҡылыҡтарын асҡаны өсөн ике тапҡыр I дәрәжә Сталин премияһына лайыҡ була. В.М. Сенюков - донъя кимәлендәге ғалимдарҙың береһе ине, киң ҡарашлы шәхес, тәрән фекерле. Нефть сығарыуҙа яңы технологиялар ҡулланыу буйынса даими эш алып бара, махсус лабораториялары, ғилми хеҙмәткәрҙәре була. Ошо оло ғалим үҙенең аспиранттарына нефть сығарыу эшендә микробиология технологияларын ҡулланыу буйынса ғилми тема тәҡдим итте, әммә бер кем дә был тема буйынса тикшеренеүҙәр башларға риза булманы. Ә мин баҙнат иттем. Ябай аспирантты ошондай ҡатмарлы ғилми эшкә йәлеп итеү үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй.

**Ғилми диссертацияғыҙҙы яҡлағанда ҡаршылыҡтар булманымы?**

- Уныһы үҙе бер тарих. Диссертацияңды яҙып бөткәс, яҡлар өсөн махсус ғилми советҡа тапшырырға кәрәк. Ленинградта ла алмайҙар, Мәскәүҙә лә. Бөтөн Союз буйынса белешеп сығырға мәжбүр булдым. Ни өсөн? Һәр бер ғилми совет тик бер өлкәгә генә ҡарай. Минә әйтәләр, хеҙмәтегеҙҙә геология ла, биология ла, технология ла ҡатнаш бирелгән, ә беҙ тик бер фән өлкәһе буйынса ғына булған ғилми эштәрҙе ҡарай алабыҙ, тиҙәр. Йөрөй торғас, И.М. Губкин исемендәге Мәскәү нефть химияһы һәм газ сәнәғәте институтында кафедра мөдире булған бер ғалимә минең диссертациямды яҡлатыу өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алды. Баҡтиһәң, минең ошо юҫыҡтағы тәүге уйлап табыу патентына ебәрелгән документтарҙы министрлыҡта идаралыҡ начальнигы булған сағында ошо ханым тикшергән икән. Ул диссертациямды ла оҡшатты. Шулай итеп, 1976 йылда минә геология-минералогия фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжә бирелде. Артабан ғилми тикшеренеүҙәремде ошо йүнәлештә дауам иттем һәм 1995 йылда академик А.П. Крылов исемендәге Бөтөн Рәсәй нефть-газ ғилми-тикшеренеү институтында "Нефть биреүҙе арттырыуҙың биогеотехнологияһы" тигән темаға докторлыҡ диссертацияһын яҡлап, техник фәндәр докторы дәрәжәһенә лайыҡ булдым. Совет ағзалары был хеҙмәтемә лә бик юғары баһа бирҙе.

**Хаҡлы ялға сыҡҡас, яратҡан шөғөлөгөҙҙө дауам итә алдығыҙмы?**

- 2003 йылда рәсми рәүештә пенсионер булып киттем. Әммә был халәтемде бөтөнләйгә эштән бушаныу итеп ҡабул итмәнем. "Когалым" нефть промыслалары менән 90-сы йылдарҙан бирле хеҙмәттәшлек итә инем, мин нигеҙләгән биотехнологиялар Себерҙә киң ҡулланыла башланы. Өфөлә "КогалымНИПИнефть" ойошмаһының комплекслы ғилми бүлегенең эшен ойошторҙоҡ. 2004 йылдан башлап Дыуан районында нефть ятҡылығын эҙләү һәм тикшереү эшенә ҡушылдым. Уны бер туған ағайымдың улдары Илдар һәм Салауат Юлбарисовтар етәкләне, Илдар - МДУ-ны тамамланы, геолог, Салауат - юрист. Ысынлап та, Дыуан районында Аяз нефть ятҡылығы табылды, ул девон ҡатламынан сығарыла, сифаты ла насар түгел, ҡуйылығы буйынса, көкөрт ҡатнашмаһының аҙ булыуы менән эшкәртеү өсөн уңайлы. Ятҡылыҡ запасы - яҡынса 1 млн тонна. Тәү быраулаңған скважиналарҙан нефть сығарыла башланы. 2010 йылға тиклем Швеция компанияһы инвестор булды. Ни эшләптер, беҙҙең "Башнефть" был ятҡылыҡҡа иғтибар итмәне, бөтөн ҡорамалдар, техника ситтән килтерелде, быраулаусылар Һамарҙан, Һарытауҙан, Удмуртиянан килеп, вахта ысулы менән эшләне. 2010 йылды ошо ятҡылыҡ ни өсөндөр икенсе бер хужаға бирелде. Беҙ яңы компаниянан китергә мәжбүр булдыҡ.

**Ғаилә хәлдәрегеҙ, туған-тыумасаларығыҙ тураһында бер кәлимә һүҙ әйтеп үтһәгеҙ ине.**

- Хәләл ефетем Наилә Ғаяз ҡыҙы менән (Хәйбулла районынан) матур ғаилә ҡороп йәшәнек, ул Мәскәү геология-разведка институтында гидрогеолог һөнәренә уҡыған. Уның бер туған ағаһы Әбделмәнов Илшат Ғаяз улы тау институтын тамамланы, тау инженеры, техник фәндәр докторы, профессор булды. Ғүмере буйына Мәскәүҙә йәшәне, үҙ һөнәре буйынса юғары вазифалар биләне. Марат ағайым 4 йыл дауамында Колымала эшләне, һуңынан Башҡортостанда һуғарыу объекттарын, һыу һаҡлағыстарҙы проектлағанда һәм төҙөгәндә инженер-геолог булараҡ ҡатнашты, проект институтын етәкләне. Һаулығы ныҡ ҡаҡшап, 60 йәшендә баҡыйлыҡҡа күсте. Виль ағайым Өфөләге геология-разведка техникумында уҡып сыҡты, үҙебеҙҙә эшләне, 60-сы йылдарҙа Өфө нефть институтын тамамланы, һөнәре буйынса - геофизик. Һуңынан Көнбайыш Себерҙә 20 йыл комплекслы экспедиция начальнигы вазифаһын башҡарҙы, 87 йәшендә баҡыйлыҡҡа күсте. Оло улым Надир сәнғәт училищеһын тамамлап, музыкант булып китте. Һуңынан Мәскәү коммерция һәм хоҡуҡ институтында уҡып сыҡһа ла, музыканан айырыла алманы: уға 2022 йылдың декабрендә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы исеме бирелде. Булат улым БДУ-ның тарих факультетын ҡыҙыл дипломға тамамлағас, философия буйынса аспирантурала уҡыны. Әммә ул аҙаҡтан журналист һөнәрен үҙ итте, тәүҙә "Башинформ" агентлығында эшләһә, һуңынан 10 йылдан ашыу "Башнефть" берләшмәһе сығарған "Нефть Башкортостана" гәзитенең баш мөхәррире вазифаһын башҡара.

**Һеҙ, хөрмәтле Эрнст Мирсаяф улы, киң һәм тәрән белемле ғалим-геолог булараҡ, киләсәктә Башҡортостанда нефть сығарыу эшенең перспективаһын күрәһегеҙме?**

- Фәндә нефттең нисек барлыҡҡа килеүе хаҡында төрлө фараздар бар. Бәғзе бер ғалимдар ер аҫтында, төпкөл геологик ҡатламдарҙа нефть әлеге заманда ла барлыҡҡа килеүен дауам итә, тип тә фекер йөрөтә. Шуныһы ғәжәп, мәҫәлән, Татарстанда Ромашкино нефть ятҡылығынан күп миллиондарса тонна нефть сығарылғандан һуң ер ҡатламдарындағы нефть запастарын яңынан билдәләп ҡарарға булалар. Ә унда дөйөм нефть запасының артыҡ ныҡ кәмемәүе асыҡлана. Шулай уҡ ҡасандыр ресурстары бөтөп, консервацияланған ятҡылыҡтарҙы тикшереп ҡарағас, унда аҙмы-күпме нефть запасы тупланыуы ла асыҡлана. Нефттең шыйыҡ, еңел фракцияларынан башҡа, әлегә сығарыуы ауыр булған битум кеүек ҡуйы фракцияларының күләме лә байтаҡ беҙҙә. Унан һуң, Урал тауының аҫтында, тау ҡатламдарынан бик түбәндә, геологияла кембрий тип аталған пластарҙа нефттең булыу-булмауы асыҡланмаған, сөнки ул тиклем тәрәнлеккә барып етерлек технологиялар юҡ. Эксперименталь рәүештә Кола ярымутрауында 12 мең метрҙан ашыу тәрәнлектә скважина быраулАнды, әммә унда нефть табылманы. Шул уҡ ваҡытта Төньяҡ Боҙло океаны шельфында нефть запастары табылыуы мөмкин. Ғөмүмән, кешелек нефть сәнәғәтенә бик оҙаҡ йылдар дауамында мохтаж буласаҡ, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яңыраҡ 85 йәшен тултырып, илебеҙҙең иҡтисады, ҡаҙылма байлыҡтары, нефть сәнәғәте менән даими ҡыҙыҡһынып торған, асыҡ зиһенле, хәтер ҡеүәһе йәштәрсә һаҡланып ҡалған, дәрт-дарманы күҙҙәренән, һөйләү манераһынан беленеп торған Эрнст Мирсаяф улы халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың киләсәге өмөтлө буласағына инанып йәшәй. Уға гәзит уҡыусыларыбыҙ исеменән, башҡорт йәштәренә һоҡланғыс үрнәк булып, оҙон-оҙаҡ ныҡлы һаулыҡта йәшәргә яҙһын, тигән теләгебеҙҙе белдерәбеҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ
әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Ҡыҙҙың башында кескәйҙәргә хас булмаған уйҙар ҡайнаша. Уны, Мәҙинәне, әле тыумаҫ элек үк етемлеккә дусар итеп, бар яманлыҡтарҙың сәбәпсеһе булған ул яһил әҙәм аҡтығы тейешле яҙаһын алырға тейеш тә баһаң!*






Сарғалап илаған ейәнсәренең сәрелдәк тауышын шундуҡ танып алған Сәғиҙә әбей, орсоғон ситкә ҡуя һалды ла, өтә баҫып ҡаршы сыҡты.

- Ни булды, балаҡайым? Нимәһенә шул ҡәҙәре яр һалаһың?

- Анауы, Сибай ышпанаһы минә, етем башмаҡ тине-е! Мин етем түгел дә баһа-аң!

- Һәй шул суҡынған малай булды инде! Уның һүҙҙәренә иғтибар итеп торма һуң.

- Тәүҙә итмәгән инем, аҙаҡ тағы ҡабатланы-ы!

- Ярай, тыныслан. Һүҙ ни, әйтелә лә бөтә. Ишетмә лә ҡуй. Шулай итһәң, бер-икене ҡабатлар ҙа бөтөр.

- Етем башмаҡ булырға минең бит һинем бар, ибет, өләсәй? - Илауынан туктаған Мәҙинә, танауын мырш тартып, күҙ йәштәрен һөрттө.

- Эйе шул. Шулай тип әйтергә нисек телдәре бара тиһең... - Ҡапыл йөрәге һыҙлап киткән Сәғиҙә ейәнсәренең һыңғайына һыпырҙы. - Сабый менән сабый булмаһалар...

- Уның үҙенең дә атайы юҡ бит әле, өҫтәүенә, әсәһе эскесе, ти...

- Ҡуй, улай тимә, ҡыҙым. Аҡылы камил кеше кеше етешһеҙлегенән көлә икән - яҙыҡ ғәмәл ҡылған һаналыр. Ундайҙарҙың Алла башына һуға. - Ете йәшлек ейәнсәренең ололарса фекер йөрөтөп, һүҙ һөйләүенә ғәжәпһенә төшкән өләсәй аҡыл өйрәтә һалды. - Эй-й, хәҙерге балаларҙы...

- Ә нимә, ул минән көлгәндә... Яҙыҡ әллә уға ҡағылмаймы?

- Ҡағыла. Көлә икән, тейешле яҙаһын тәңре бирер. Һин уның ыңғайына кешегә аслан ҡушамат тағаһы булма. Йәнә, юҡҡа үпкәләп, асыу тотоп та йөрөмә. Кемгәләр ҡарата кенә һаҡлау - яман ғәҙәттәрҙең иң яманы.

- Әһә һиңә! Етем башмаҡ - юҡ һүҙ буламы? Белгең килһә, ул минең иң яратмаған һүҙем.

- Йә, йә, яратмаған һүҙҙәр ҙә бара-тора онотола ул...

- Өләсәй, минең атайым да, әсәйем дә юҡтар. Ҡайҙа һуң улар? - Бөтөнләй тынысланырға өлгөргән Мәҙинә еүеш күҙҙәрен ҡул һырты менән һыпырҙы. - Мин гелән шулай етем башмаҡ булып йөрөрмөнмө?

- И-и, иҫәркәй! Улай тип әйтеү менән һәр кем етем башмаҡ булып бармай инде. - Һүҙҙе ҡырҡа икенсе юҫыҡҡа борған ейәнсәренең көтөлмәгән һорауынан күңеле тулышып киткән Сәғиҙә уның арҡаһынан тупылдатып һөйгән булды. - Һин дә һис улай түгелһең.

- Йә, һөйлә инде: ҡайҙалар минең әсәйем менән атайым? Ҡабырғаһы менән ҡуйылған әлеге һорау Сәғиҙәне аптырауға һалды.

Аптырау ғынамы, өләсәй кеше, ҡапылғара ни уйларға ла белмәй, юғалып ҡалды: инде нисәмә йылдар әллә йәшерә килгән, әллә һөйләп бирергә баҙнаты етмәгән хәҡиҡәтте асып һалыр мәҙҙәт тә килдеме икән шулай уҡ? Бына әкәмәт, ҡайһы арала уҙып өлгәрә бит ваҡыт тигәнең. Кисә генә йүргәктә яткан сабый бөгөн инде үткәндәре менән ҡыҙыҡһына. Эй-й, ғүмер!

- Ярай, тик илама. Һөрт күҙбашыңды. - Ейәнсәре һүҙен йыға алмаған өләсәй кеше хәтирәләргә бирелде...

Өләсәйе һөйләгәндәрҙән хайран ҡалып ултырған ҡыҙҙың башында кескәйҙәргә хас булмаған уйҙар ҡайнаша. Уны, Мәҙинәне, әле тыумаҫ элек үк етемлеккә дусар итеп, бар яманлыҡтарҙың сәбәпсеһе булған ул яһил әҙәм аҡтығы тейешле яҙаһын алырға тейеш тә баһаң! Башҡаса булыуы мөмкин түгел! Тик нисек итеп? Быныһы инде икенсе һорау. Был тәңгәлдә ныҡлап уйларға кәрәк. Ә былай эшләгәндә...

Шул арала киләсәккә ҙур-ҙур маҡсаттар ҡуйырға өлгөргән ҡыҙ йораты иртәгәһенә үк мәктәптә эшләп килгән ҡул һуғышы секцияһына яҙылып ҡайтты. Ете йәштән ун йәштәгеләр төркөмөнә. Уны унда берәү ҙә әүрәтеп-өгөтләп тә, көсләкләп тә алып килмәне. Тотто ла үҙе барҙы.

- Ә мин ҡул һуғышы түңәрәгенә яҙылдым! - Һәләк күңеле булған Мәҙинә ҡайтып инеү менән үҙенең ҡыйыу аҙымы хаҡында өләсәйенә һөйөнсөләй һалды. Тегеһе, әүәл хайран китеп бот сапты, унан урындыҡҡа лыпым ултыра төштө.

- Әстәғәфирулла! Ҡыҙ-ҡырҡын эшеме ни һуғышып йөрөү! Юҡ менән булмаһаң, башҡа кәсеп бөткәнме?

- Уҡытыусы ағайыбыҙ әйтә, һәр кемдең тормошта ниндәйҙер маҡсаты булырға тейеш, ти. Маҡсатһыҙ кеше - юҡ кеше, ти. Хәҙер минеке лә бар.

- Һуғышмайынса ғына ул маҡсатҡа ирешеп булмаймы һуң? Шөғөлөң уҡыуыңа ҡамасау яһамаҫмы?

- Өләсәй, кисә минә, атайың әле бар, икенсегә өйләнгән, тигән инең... - Мәҙинә һүҙҙе йәнә икенсегә бора һалды.

- Әйт... Әйткәйнем шул... - Ейәнсәренең тел төбөн тулыһынса аңлап етмәгән өләсәй аптырап китте. - Уның бында ни ҡыҫылышы?

- Ҡайҙа йәшәй икән, әйтә алмайһыңмы?

- Юҡ. Нимәгә ул һиңә кәкүкатай? - Мәҙинәнең һүҙ йүнәлеше ҡайҙа алып барғанлығын төшөнә башлаған Сәғиҙә терт итеп ҡалды. Шулай ҙа битараф ҡиәфәттә ҡул һелтәгән булды: - Ҡуй, башыңды ҡатырма. Лутсы, ана, өйгә эштәрең менән бул.

- Былай ғына, өләсәй. Белгем килә... - Тегеһе үҙенекен ныҡышты.

- Сибайҙа, имеш, тип ишетә бирер ҡалғайным. Әллә тағы...

- Ә дөп-дөрөҫөн кемдән белергә була?

- Эй, һәпрә ҡыҙыҡай, нимәһенә шул тиклем төпсөнәһең әле? - Һөйөклө сабыйының татлы теле бәгеренә һары май булып яғылған өләсәйҙең күңеле йомшара бирҙе. - Бына ошонда әсәйең менән икеүһе төшкән кәртишкәләре ята ине...

Пар күгәрсендәрҙәй ике йәш кешенең бер-береһенә һыйынышып төшкән фотоһүрәтенә Мәҙинә оҙаҡ текләп торҙо. Гүйә, кемеһендер ныҡлап хәтерендә ҡалдырырға тырыша ине.

- Уның менән ни өсөн ҡыҙыҡһынғанды аҙаҡ белерһең. - Ул ҡырт боролдо ла, урамға сығып китте. Ейәнсәренең ҡыланышында бер ни аңламаған Сәғиҙә аптыраудан ни әйтергә лә белмәй ултырҙы ла ҡалды.

* * *

...Ҡул һуғышы түңәрәгенең иң әүҙем, иң ихлас, шул уҡ ваҡытта иң отҡор ағзаһы Мәҙинә һәр төрлө алымдарҙы тиҙ һәм енел үҙләштерҙе. Ике йыл үтеүгә ул мәктәп чемпионы булһа, һуңынан район буйынса ла алдынғы спортсылар рәтенә сыҡты. Ун биш йәше тулыуға инде тренерына ҡаршы сығып маташҡан ныҡыш ҡыҙ ҙур-ҙур бәйгеләрҙә еңеү артынан еңеү яулап, барыһын аптырауға һалды.

Туғыҙынсы синыфты урта ҡулдар араһында тамамлап, уҡыуын артабан колледжда дауам итергә теләк белдергән Мәҙинәгә тренеры:

- Мәктәпте бөткәнсе ошонда йөрөп торһаң ни була, - тип үтенес белдергән һымаҡ әйтеп ҡараған ине лә, тегеһе:

- Үҙегеҙ, ҡала ерендә мөмкинлектәр күберәк, тинегеҙ бит, - тип йәпле генә һылтауын табып, уйынлы-ысынлы итеп баш тартты. - Барып ҡарайым әле. Килеп сыҡмаһа, кире ҡайтыуы ауыр булмаҫ.

Алсаҡ тәбиғәтле, тиҙ аралашып барыусан эскерһеҙ Мәҙинә ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә физик культура колледжында ла, уҡытыусыларҙың да, төркөмдәштәренең дә күңелен яулап өлгөрҙө. Бәғзе ауыл балалары кеүек, ул сит кешеләргә, ят мөхиткә өйрәнеп китә алмай оҙаҡ аҙапланманы. Бәлки, уға ете йәшенән ынтыла килгән маҡсаты булышлыҡ иткәндер, кем белә?..

Көндәрҙең береһендә колледждың дүртенсе курсында уҡып йөрөгән Мәҙинә, уйламаған ерҙән теге мәл, әле мәктәпкә бармаған да сағында, үҙен етем башмаҡҡа тиңләп күңелен ныҡ ҡайтарған Нәҙирҙе осратты. Осратты ла шунда уҡ танып алды. Быға ҡәҙәре нисек итеп бер тапҡыр ҙа тап булышманыҡ икән, тип аптыраған йәштәр күптән дуҫлашып йөрөгән әшнәләр шикелле йылы күрештеләр. Шулай, бала саҡ дуҫы, яманмы ул, яҡшымы, һәр саҡ, һәр ерҙә, һәр кемгә ҡәҙерле.

Һөйләшеп киттеләр. Баҡһаң, Өфө университеты филиалында белем алған Нәҙир атай-әсәйе менән ошонда йәшәй икән. Мәҙинәләрҙең ауылына ул ҡунаҡҡа барып йөрөгән булған. Өләсәйе вафатынан аҙаҡ унда һуҡмағы һыуынған да ҡуйған. Әйтәгүр, шул мәлдән бирле күренгәне булманы.

Маяковский паркында йөрөнөләр, автобусҡа ултырып, Төйәләҫ быуаһына барып уралылар, кискә матур ғына кино ҡаранылар. Йәштәр инде берберенә оҡшай ҙа башланылар, буғай: киләһе ялда ла осрашырға һүҙ ҡуйышып айырылыштылар. Дөрөҫөрәге, егет ҡыҙҙы дөйөм ятағына еткәнсе оҙата барҙы. Ошонан аҙаҡ күрешеүҙәр даимиға әйләнде.

Дуҫлашып китеүҙәренә ай ярым тигәндә Нәҙир, йәйын килтереп, Мәҙинәне өйҙәренә саҡырҙы.

- Әллә ҡалай бит әле, - тип уныһы итәғәтле генә баш тартмаҡсы итте. - Уңайһыҙ һымаҡ.

- Нимәһе уның уңайһыҙ? Үҙем саҡырып торғанды...

- Күрмәгән-белмәгән урынға...

- Ана шунда күрерһең дә, белерһең дә.

Уларҙы урта йәштәрҙәге ҡаҡса ир ҡаршы алды. Алға кәкерәйә биргән кәүҙәле, кәгез ирҙең йөҙөн Мәҙинә тәү ҡарауҙа уҡ сырамытҡандай итте. Шулай ҙа, керпек сәнсеп йәшертен һынап тороуға ҡарамаҫтан, уны танып, кем икәнлеген өҙөп кенә әйтә алманы. Ҡайһы саҡ шулай була бит ул: йөҙ шул тиклем таныш та, хатта яҡын да кеүек, ә ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа күргәнеңде иҫләп тә, әйтеп тә булмай ҙа ҡуя. "Ә, бөткәнме ни бер-беренә оҡшаш сырайлы кешеләр. Кемгәләр оҡшатамдыр шунда, - тип үҙен-үҙе тынысландырырға тырышҡан Мәҙинә шулай ҙа әлеге аҫтыртын йылмайыу менән ҡараған шом тулы күҙҙәрҙе хәтеренән юйып ташлай алманы. Күңеленә инеп ояланы ла ул ҡараш, сығып китмәй ыҙалатты.

- Атайыңмы? - Сираттағы бер килеүендә фотоальбом ҡараштырып ултырған Мәҙинә әлеге кешенең һүрәтенә төртөп күрһәтте.

- Эйе, шул. - Сәй ҡуйып маташҡан егет рыя ғына яуап бирҙе.

- Элек атайың юҡ тип белә инем...

- Эй, әллә ҡайҙа йөрөй торғас, ҡайтып килде шунда.

- Ә әсәйең?

- Ул әле эштә.

Мәҙинә ҡалын альбомды ашыҡмай ғына битләүен дауам итте. Бер мәлдә... Ҡыҙҙың өҫтөнә әллә боҙло, әллә яңы ғына ҡайнап сыҡҡан һыу һиптеләрме ни! Ваҡыт шойҡаны ҡағылыуҙан иҫкереп, һарғая башлаған фотонан уға мәрхүмә әсәйе, өләсәйе һәм... Нәҙирҙең атаһы ҡарап торалар ине. Фотоның бындайы бит уларҙың үҙҙәрендә лә бар ҙа баһаң! Быны ҡайҙа күргән ул теге ытырғандырғыҫ ҡараштың. Аһ! Әллә ысынлап та улмы? Шул ҡәҙәре оҙаҡ эҙләгәнен ул ошо рәүешле уйламағанда-көтмәгәндә килеп табып алдымы? Булыуы мөмкин түгел! Ә нинә түгел? Һәммәһе буталып-симәлеп бөткән был тормошта барыһы ла булыуы мөмкин! Тимәк Нәҙир... мин... Нәҙирҙең атаһы... Ҡапыл зиһене томаланып киткән Мәҙинәнең мейеһендә тиҙ генә осона сығып булмаҫлыҡ ҡатмарлы ла, шул уҡ ваҡытта бер ҡарауҙа уҡ аңлашылып торған яп-ябай ҙа уйҙар ҡайнашты...

* * *

- Бик тә ныҡышаһың икән, ҡыҙым, тыңла. - Әллә ҡайҙарҙа йөрөп яткан атайы хаҡында төпсөнөп маҙаһын ҡороткан ейәнсәренән ҡотолорға буламы, бәлки, ысынлап та хәҡиҡәтте белеп ҡалһын типтер, Сәғиҙә әбей теге көндө Мәҙинәнең үтенесен кире ҡаҡманы. Бер нәмәһен дә арттырмай ҙа, йәшермәй ҙә, бар тик белгәндәрен генә һөйләп бирергә ҡарар итте. - Мин ғүмерем буйына бил яҙмай эшләү дәүеремдә аҙмы-күпме мөлкәт туплай алдым. Бер бөртөк балам өсөн тип йыйған ул мөлкәттең ниндәй хаҡҡа төшкәнлеген үҙем генә беләм: һаулығым ҡаҡшау өҫтөнә, үҙ иркем менән донъя ҡыуаныс-шатлығынан ваз кистем. Олатайың һуғышта ятып ҡалғас, яңғыҙ баламды- әсәйең мәрхүмәне әйтәм инде, әҙәм рәүешле тәрбиәләп, аяғына баҫтырыу өсөн мин бер нәмә лә йәлләмәнем, хатта үҙ аҙмышымды ла. Теге аҡсаны ла бары уның киләсәген уйлап, уның өсөн йыйған булдым. Иркәрәк булып үҫһә лә әсәйең бик егәрле, бөтмөр ине, ошоларына өҫтәп, бәләкәйҙән бер ҡатлыраҡ та булды. Ана шул ябай бер ҡатлылығы башына етте лә инде.

- Нисек итеп? - Әлегәсә тыныс һымаҡ күренгән Мәҙинә ҡалҡына бирҙе.

- Нисек итепме? Күңеле шар асыҡ, хәйләһеҙ кешеләрҙе боҙоҡ эсле, ямандары һәр ваҡыт һағалап ҡына тора бит ул. Ошо хаҡта киҫәтеп тороуыма ҡарамаҫтан, әсәйең бахыр менән дә шулай килеп сыҡты. Нимәгәләр район үҙәгенә барғанында ул бер егет менән осрашып танышҡан. Эсендәгеһенең тамсыһын да һаҡлай белмәгән әсәйең шунда уҡ ярылып, бөтәһен дә һөйләп бирә һалған. Йәнәһе, ғашиҡ булған берәү. Тегеһе, әлбиттә, битараф ҡала алмаған.

**(Дауамы бар).**

ИЖАДХАНА

# ҺОМАЙ ОБРАЗЫ ТЫНҒЫЛЫҠ БИРМӘЙ...



**Рәссам Гөлнара Фәләхованың һүрәттәре айырым бер йылылыҡ, яҡтылыҡ менән үҙҙәренә йәлеп итә. Халыҡ ижады мотивтарын үҙ иткән был ижад рухи ҡомартҡыларыбыҙға яҡын килергә, уларға үтеп инергә һәм тәрәнерәк аңларға мөмкинлек бирә. Гөлнара Октябрьский ҡалаһында художество мәктәбендә һүрәт, живопись, композиция, пленэрҙан уҡыта, уҡыусыларҙа тиҫтә йылдан ашыу халыҡ сәнғәтенә һөйөү тәрбиәләй. Уның уҡыусылары төрлө конкурстарҙа ҡатнаша, үҙҙәрен һынлы сәнғәт өлкәһендә һынап ҡарай. Шул уҡ ваҡытта Гөлнараны иң шәп иллюстратор тип тә беләбеҙ. Халыҡ сәнғәтен үҙ иткән рәссам бөгөн ҡайһы бер ижад серҙәре менән уртаҡлаша.**



**➔ Гөлнара, һынлы сәнғәткә килеү юлы нисек булды?**

- Бәләкәй саҡтан уҡ һүрәттәрем матур килеп сыға ине. Балалар баҡсаһында йөрөгәндә әле атай-әсәйемә: "Гөлнараны һынлы рәсем түңәрәгенә йөрөтөгөҙ, артабан сәнғәт мәктәбенә бирерһегеҙ", - ти торғайнылар. Шулай ҙа рәссамлыҡта үҙемде эҙләү юлы оҙайлы ғына булды. Мәсәлән, туғыҙынсы класты бөткәс, тегенселек училищеһында уҡыным. Шунан модельер-дизайнерлыҡҡа өйрәнергә Ҡазанға барҙым, ләкин был һөнәрҙең күңелемә яҡын түгеллеген аңланым. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетына художество-графика бүлегенә ҙур теләк менән уҡырға индем. Башта ауырыраҡ булды, сөнки һүрәтте акварель менән яҙырға кәрәк, ә мин акварель менән эш итә белмәй инем әле. Портреттар яһау - минең яратҡан шөғөлөм. Бәләкәй саҡтан кешеләрҙе төшөрөргә яратҡас, ошо өлкәне таллаһаманым, шул йүнәлештә үҫергә тырыштым. Диплом эшем дә "Йондоҙлоҡ" тип аталған дүрт портретты тәшкил итте: Земфира, Ю. Шевчук, Р. Нуреев, М. Кәрим. Етәксем Рөстәм Фәткуллинды йылылыҡ менән иҫкә алам, ул хәҙер мәрхүм инде. Уның ижадында милли тематика киңлә ине.

Уҡыуҙы тамамлағас, төрлө урындарҙа эшләп ҡараным - Питерҙа, Ҡаҙанда, Өфөлә. Ул саҡтарҙа ла әле үҙемде рәссам, тип күҙ алдына килтермәй инем. Рәссам ул берет кейгән, ҡулына ҡылҡәләм тотҡан кеше һымаҡ ҡына күҙалланды. Хатта ҡыҙыҡ та түгел ине. Ләкин мине яҙмышым тап ошо юлға алып килде. Алып килде генә түгел, хәҙер үҙем йәш быуынға һынлы сәнғәт серҙәрен өйрәтәм. Мин үҙемде төрлө жанрҙа һынап ҡарайым. Әлеге мәлдә күберәк иллюстрациялар эшләйем.

**➔ Бөгөнгө беҙҙе һоҡландырған халыҡ сәнғәте темаһына нисек килдегеҙ?**

- Шуны ғына әйтә алам - мин һәр саҡ эҙләндем. Нимә төшөрөргә, минең эштәрем нимәгә кәрәк һәм нимә өсөн? Был һорауҙарҙы үҙемә ҡабат-ҡабат бирә инем. Һынлы сәнғәттә лә үҙендең юлыңды табыу еңел түгел. Был - оҙайлы йылдар буйы эҙләнеү. Ҡайһы бер йылдарҙа мин бөтөнләй һүрәт төшөрмәнем, йәки кейеҙҙән уйынсыҡтар эшләү менән генә булыштым. Һәм үҙемә һорау бирҙем: "Нимәнән минең күҙҙәремдә ут тоҡанасаҡ?" Халыҡ сәнғәте! Ябай ғына, хатта бер ҡатлы күренгән халыҡ сәнғәте күңелемде биләй бит минең. Сөнки улар ҙан изгелек һәм йылылыҡ бөркөлөп тора. Ул үҙе әйләнеп сыҡҡыһыҙ ҙур бер донъя! Сәнғәт мәктәбендә уҡытыу ҙа милли сәнғәткә яҡын килергә этәргес булды. Башҡорт, татар халыҡ әкиәттәренә арналған төрлө конкурстар үтеп тора, ләкин әлеге тематикаға һүрәт төшөрөүселәр юҡ кимәлендә, ә бөгөнгө заманға бәйле конкурстарҙа уҡыусылар ихлас ҡатнаша ине. Шул саҡта үҙемә һорау бирҙем: ни өсөн үҙебеҙҙең мәҙәниәтте баһаламайбыҙ, яратмайбыҙ? Беҙ бит тамырҙарыбыҙ менән тәрәнгә киткән халыҡ, шундай бай мәҙәниәткә эйәбеҙ, мифтәр-әкиәттәрҙең ниндәйе генә юҡ! Үҙебеҙҙе яратмау ҡайҙан башлана һәм ни өсөн? Мәктәптә программа буйынса уҡытам һәм шул уҡ ваҡытта балаларға күрһәтер өсөн милли темаға һүрәттәр төшөрә башланым. Хәҙер шуны әйтә алам - минең уҡыусыларым халыҡ мифтары-әкиәттәре буйынса һүрәт төшөрөргә бик-бик яраталар, ныҡ ҡыҙыҡһыналар. Хәҙер "Ниндәй рухи ҡомартҡы буйынса, ниндәй яңы эш бирергә икән?" тип кенә торам. Инде башҡорт әкиәттәре генә түгел, сөнки мәктәптә төрлө милләт вәкилдәре уҡый. Уларҙа ла үҙҙәренең милли ҡомартҡыларына ҡыҙыҡһыныу уянды.

Үҙ мәҙәниәтеңә бары ҡыҙыҡһыныу булдырып, шул рәүешле һөйөү тәрбиәләргә кәрәк. Беҙҙең мәктәптәрҙә бит ошоға иғтибар бирелмәй. Минең уҡыусыларым конкурс өсөн генә түгел, ә үҙҙәренең күңеле өсөн эшләй. Ләкин ярыштар була икән, ҡатнашығыҙ, тағы ла яҡшыраҡ эшләгеҙ, үҙегеҙҙең ниндәй шәп рәссам икәнегеҙҙе башҡаларға күрһәтегеҙ, тием. Беҙҙең Октябрьский ҡалаһы үҙенсәлекле урында - Башҡортостан менән Татарстан сикләшкән ерҙә урынлашҡан. Сиктәшлектең үҙенсәлекле функцияһы бар, нисектер, ике мәҙәниәт бер-береһенә йоғонто яһай. Нимәлер күршеләрҙән алабыҙ, шул уҡ ваҡытта, "бына беҙҙә шулайыраҡ," тип, күршеләргә үҙебеҙҙең матурлыҡты күрһәтәбеҙ. Минең өләсәйем Татарстанда йәшәне, шуға ҡунаҡҡа бара торғайныҡ, гүйә, бер донъянан икенсеһенә барып эләгәнен. Унда үҙҙәренең һөйләше, үҙ йыр-моңо, әкиәттәре. Шул уҡ ваҡытта, башҡорт радиоһы эшләп тора. Ауылға барһаң, тәбиғәт үҙенә арбай: бесәнлек, мейес икмәгенең тәме бөтөнләй икенсе, ҡоймаҡ тәме икенсе... Ауыл менән ҡала тормошо айырыла. Ҡалала - технология, заман уңайлыҡтары, шулай ҙа фантазия өсөн ауыл, тәбиғәт бик кәрәк.

**➔ Һеҙ маҡсатлымы? Килеп сыҡмаһа ла, ярай, тип, ҡай саҡ ҡул һелтәп ҡуймайһығыҙмы?**

- Маҡсатлымын, бер башлаған эште тамамларға тырышам. Ижад процесына инһәң, туҡтала алмайһың. Тиҙерәк тамамларға кәрәк, тип уйлайһың. Бына шул сәләмәтлеккә ҡаҡшата ла инде. Беләүҙең дә көсө бөтмәҫ-төкәнмәҫ түгел бит. Нисек тә, сама тигән нәмәне онотмаҫҡа кәрәк. Эшең, ялың гармонияла булырға тейеш. Һәм, әлбиттә, рухланырға кәрәк. Рухландырған рәссамдарым күп. Милли йүнәлештә эшләгән рәссамдарҙы күҙ уңында тотам. Шуларҙың береһе үҙ халҡының инаныуҙарын, мифтарын ижадына нигеҙ итеп алған бүрәт рәссамы Зорикто Торджиев. Уның эштәре АҠШ, Гонконг, Тайвань, Сингапур, Япония һәм башҡа илдәрҙә күргәҙмәләрҙә ҡуйылды. Беҙҙә иллюстраторҙар күп ул. Балалар өсөн сыҡҡан һүрәтһеҙ китапты "һуҡыр китап" тип атаған Алиса Юфа, Виктория Семыкина, Игорь Олейниковтың эштәрен ҡарарға яратам. Рәсәй рәссамдарын сәнғәттә алда барыусылар тип әйтә алам. Беҙ күнеккән рәссамдар ҙур картина яһай ала, үлсәмдә лә, материал ҡулланыуҙа ла уларға еңел. Китап дизайны иһә ниндәйҙер кимәлдә сикләнгән. Ләкин ошо сикләнгәнлек яңы эксперименттар яһарға этәрә. Иллюстраторҙар эҙләнеүсән халыҡ, төрлө тәжрибә яһауҙан ҡурҡмайҙар. Был йәһәттән заман графикаһы ярҙам итә.

Китаптарҙы бигүк минә нык оҡшай. Балалар менән дә бергәләшеп китап сығарҙыҡ. Иллюстрация эшләтергә нәшриәттәр мине үҙҙәре табалар. Әкиәттәргә арналған һүрәттәрем күренгәс, мөхәррирҙәр йыш мөрәжәғәт итә башланы. Иллюстрацияны шулай ҙа бик йыш алмаҫҡа тырышам. Сөнки мәктәптә эшләү яуаплы, ул ваҡытты ала, ә китап биҙәү бик ҡатмарлы шөғөл. Кәнфит ҡағыҙҙарын биҙәүемде бик тә яраттылар. Кәнфит ҡағыҙына төшөрөлгән һүрәттәрҙең үҙенсәлекле булыуына күптәр иғтибар итте.

Бер нисә эште бер юлы алып барам. Әлеге мәлдә бүрәт эпосына һүрәттәр төшөрәм. Фәләстан халҡы өсөн дә күп эшләйем. Фәләстан этникаһы шулай уҡ бик ҡыҙыҡ. Ышанып заказ бирәләр икән, ышанысты аҡларға кәрәк.

**➔ Һеҙ эшләгән һүрәттәргә һоҡланмау мөмкин түгел. Айырыуса ҡатын-ҡыҙ образының иске һәм тышҡы матурлығын берҙәй камил асып күрһәтә беләһегеҙ. Темаларҙы табырға халыҡ ижады ярҙам итә. Шулай ҙа иске ынтылыштан тыш, образдарҙы терелтеү мөмкин түгел. Һеҙҙең төп маҡсатығыҙ нимәгә ҡайтып ҡала?**

- Һәр эште яратып башҡарырға, уны изге ниәтең, һөйөүең һәм күңел йылылығың менән тамамларға. Үҙ эштәремде ҡарарға яратмайым. Нығыраҡ, шәберәк эшләргә генә тырышам. Живопись жанрҙары күп, мин айырым бер йүнәлештә генә эшләмәйем. Һүрәттә иң аҙаҡҡы буяу булып һинең матур, яҡты хистойғоларың ҡалырға тейеш. Бына шуға ла ижадымда "үткәндең ыңғай образы, киләсәктең ыңғай образы" тигән төшөнсәләргә нығыраҡ иғтибар итәм. Мин үҙемдең эштәремдә күберәк йылылыҡ, һөйөү сағылыуын һәм шуларҙың кешеләргә күсеүен теләйем. Был бик мөһим. Сөнки негатив картиналар ҙа күп. Был ниндәйҙер бер дөйөм сәйер халәткә һәм үҙебеҙҙе шул йүнәлештә программалаштырыуға алып килеп ҡуймаһын. Картинаны ҡарағанда, кеше бит уны күңел аша үткәрә, һәм ошо тойғоно үҙенә һеңдерә, хатта кейем һымаҡ кейә. Ошо кисерешт үҙе менән алып китә, ошо кисереш артабан да уға тәьҫир итә, уның яҙмышына йоғонто яһай башлай. Матур эшләнгән булһа ла, ҡайғы-хәсрәт уятыр картинаға ҡарап, "ниндәй фактура, ниндәй оҫта рәссам" тип һоҡланып үтһәк тә, беребеҙ ҙә уны өйгә элеп ҡуйырға ашыҡмай. Матур төшөрөлгән, ләкин сюжеты ҡурҡыныс һүрәткә беҙ ҡабат-ҡабат килмәйәсәкбеҙ. Йәнһүрәттәрҙе генә ҡарағыҙ. Унда ниндәй генә образдар күрмәйһең. Бала күңеленә улар нисек тәьҫир итә, был да мөһим һорау.

Мин Өфөлә рухи үҫешкә ынтылған иң ижади, иң көслө рәссамдар йәшәй, тип һанайым. Донъяла башҡорт живописы ҡабатланмаҫ үҙенсәлеккә эйә, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән ҡояшлы, яҡты, йылы булыуы менән айырылып тора рәссамдарыбыҙҙың эштәре, уларҙан бик күп нәмәгә өйрәнергә була. Өфөгә йыш килеп булмай. Күргәҙмә эшләргә мине саҡырғандары бар. Гәҙиттә, мин баш тартам. Сөнки мәшәҡәте лә етерлек, бик күп рамдар һәм башҡа кәрәк-яраҡ һатып алырға кәрәк. Быларын да эшләргә булыр ине, ләкин һүрәттәрем үҙемдә ҡалмай, тиерлек.

Минә һуңғы ваҡытта Һомай образы тынғылыҡ бирмәй. Уның тураһында күп уҡыным. Ошо сағыу образды тыуҙырырға тырышам. Әле эҙләнеү юлындамын. Был эҙләнеү ҡағыҙға төшөрөүгә ҡарағанда, күберәк башымда бара, шунда яҙыла, асыҡлана, терелә, баҙыҡлана бара. Мин Һомайҙы күк төҫтә күрә башланым да, был хәлгә үҙем аптырап киттем. Ҡыҙыҡһынып, яуап эҙләй башлағас, элек уны күк төҫтә эшләгәндәрен белдем. Ул һаҡлаусы, бетеү һымаҡ булған. Әсә образы, уныш килтереүсе, ил-йортто һаҡлаусы. Был образға башҡа төрки халыҡтары рәссамдары ла мөрәжәғәт итмәй ҡалмай. Һәр рәссам уны үҙенсә аса, шуға минең дә асыштарым алда булыр тип уйлайым.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ ***"Һоло, арыш ондарын ҡатыштырып бутайым, һарыҡтың эс майын табала иретәм, бер ни тиклем төтәп, ҡыҙып китергә тейеш ул. Әйтергә кәрәк, буҙа эсә торғас, иремдең сире лә уҙҙы..."***

*ИНТЕРНЕТТАН*



# СИР ҠАЙҘАН ЙОҒА?

■ Хәүеф тойғоһо кисерһәгеҙ, бала саҡта яратып ҡараған фильмдарҙы ҡарап алығыҙ, тип кәңәш итә ғалимдар. Ошо рәүешле үткәнгә ҡайтып, үҙеңдең яҡты, йылы хәтирәләреңде яңыртып ебәреү кире тойғоларҙы кәметергә мөмкинлек бирә икән. Ғалимдар әйтеүенсә, киләсәк тураһында уйланыу ҙа кешелә йышыраҡ пессимизм уята. "Тормошонда ауыр мәлдәр кисергәндә - ауырығанда, эшен юғалтҡанда, нимәгәлер ҡайғырғанда, яҡын кешеһе вафат булғанда күптәр үткәндәге бәхетле мәлдәрҙе иҫкә ала", ти ғалимдар. Психологтар фекеренсә, был кешенең үҙенә баһаһын арттыра, киләсәккә өмөт уята, шулай уҡ яңғыҙлыҡ тойғоһонан арынырға булышлыҡ итә.

■ Кисен ит ашамағыҙ, тип иҫкәртә эндокринолог Татьяна Мазулевская. Организмға итте эшкәртеү өсөн ваҡыт кәрәк. "Аш һеңдергәндә кортизол, йәғни стресс гормоны күберәк бүленә һәм организм ныҡ арый. Шуға ла итте йоҡларҙан 4 сәғәт алда булһа ла ашарға кәрәк", ти табип. Шулай уҡ емеш-еләкте лә кисен ашау тыйыла, был эсәктәрҙә газ йыйылыуға килтерәсәк. Һөт ризыҡтары иһә кисен туҡланыу өсөн иң уңайлыһы. Шулай ҙа күгәргән сырға өҫтөнлөк бирмәгеҙ, унда организмға йоҡлап китергә ҡамасаулаясаҡ тирамин бар. Ҡыяр, помидор, брокколи, шпинат һәм түбән калориялы башҡа йәшелсәләр, алма, груша, еләктәр, әфлисун, грейпфрут туҡланыу өсөн иң файҙалыһы иҫәпләнә.

■ Күптәр асыҡ торған тәҙрәнән иҫкән ел һалҡын тейҙереп ауырып китеүгә сәбәп була, тигән фекерҙә. Табиптар киреһен раҫлай: бүлмәне йышыраҡ елләткән һайын, вируслы сирҙәр менән ауырыу хәүефе түбәнәйә, саф һауала аллергендар ҙа ҡоторop бармай. "Әгәр ҙә ауырып киттегеҙ икән, бындай тәҙрәнең асыҡ тороуы, һыуыҡ һыу эсеүегеҙ һ.б "ғәйепле" түгел, бары тик вирус йоҡторғанға сирләйһегеҙ. Шуға ла бүлмәне елләтеүгә ҡаршы ҡараштa булмағыҙ. Бары тик тәҙрә асыҡ саҡта уның эргәһендә тормағыҙ, аяғығыҙға кейегеҙ", - ти табип-педиатр Елена Самсонова. Бер нисә бүлмәлә бер юлы тәҙрә асҡанда иһә һауала йыйылған аллергендар ҙа юҡҡа сыға. Һауа алыштырыу өсөн көнөнә бер нисә тапҡыр тәҙрә асып алыу мөһим.

■ Күптәр ҡан баҫымын дөрөҫ үлсәмәй, шуға ла сәләмәтлеге хаҡында дөрөҫ мәғлүмәткә эйә түгел, тигән фекерҙә медицина фәндәре кандидаты, терапевт Алексей Хухрев. "Ҡан баҫымын тәүлектең бер үк ваҡытында, тыныс ҡына ултырған килеш үлсәргә кәрәк", - тип кәңәш итә ул. Шулай уҡ бер нисә тапҡыр үлсәү ҙә дөрөҫ түгел. "Ҡайһылар бер ҡулда 3 тапҡыр үлсәп, уның уртаса арифметик һанын иҫәпләп сығара, был бөтөнләй иҫәрлек", - ти табип. Ҡан баҫымын үлсәгәндә ҡулдағы артериялар ҡыҫыла. Һөҙөмтәлә, икенсе тапҡыр үлсәгәндә һандар тағы ла юғарыраҡ буласаҡ. Бер үк ҡулда ҡан баҫымын үлсәү өсөн исмаһам ярты сәғәт ваҡыт үтергә тейеш. Табип-диетолог Джулия Зумпано билдәләүенсә, ҡан баҫымын нормаға килтереү өсөн кальций, магний, калий дефициты булмаҫҡа тейеш. Шуға ла ҡанда ошо матдәләрҙең күләмен аныҡлау өсөн анализ бирергә кәрәк. Шулай уҡ дарыуханала һатылған синтетик витаминдар һәм минералдар урынына дөрөҫ туҡланыуға өҫтөнлөк бирергә кәрәк. Әммә ҡайһы бер осраҡтарҙа табип ҡушыуы буйынса дарыуҙар эсеп алыу ҙа ҡамасауламай.

*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*

# ЭЙ, БУҘАҺЫ, БУҘАҺЫ!

**"Батталдар буҙа байрамына саҡыра", тигән саҡырыуҙы алғас, ҡыҙыҡһыныу, еңелсә бер тулҡынланыу менән юлға сыҡтыҡ. Иҫтәлектәргә бирелеп, юлдаштарым - Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Сәғит ҡыҙы, мәҙәниәт бүлеге методисы Гөлшат Булат ҡыҙы һәм район мәҙәниәт йорто директоры Гөлнара Жәүәт ҡыҙы менән халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында әңгәмәләшеп, тәғәйенләнгән ергә килеп етеүебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ.**




Мәҙәниәт йорто алдында беҙҙе ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатып, тәмле былау бешереүсе Баттал уңғанбикәләре Рәмзиә Әһлиева менән Нурзилә Бирғәлина ҡаршы алды. Танһыҡ төтөн еҫенә ишаралап: "Күҙ теймәһен үҙегеҙгә, төтәҫләп керетәйек!" - тип мәрәкәләп, мәҙәниәт йортона әйҙүкләнеләр.

Шул арала "Күбәләк" ағинәйҙәр фольклор төркөмө таҡмаҡтарын яңғыратып, күтәренке кәйеф тыуҙырҙы һәм ошо күтәренкелек сараның аҙағына тиклем күңелдәрҙе арбап, тантана итте:

*Эй, буҙаһы, буҙаһы,*
*Күпме уның ыҙаһы,*
*Буҙа эсеп, күңел асһаҡ,*
*Онотола маҙаһы.*

Байрамдың ойоштороусыһы - Баттал мәҙәниәт йорто директоры Идиә Миҙхәт ҡыҙы буҙа тураһында файҙалы мәғлүмәттәр биреп, милли эсемлегебеҙҙең тарихына ҡыҫҡаса байҡау яһағандан һуң, буҙа ҡойоу оҫтабикәләре менән таныштырҙы. Буҙасылар ярышҡа ихлас әҙерләнгәйне: буҙа ҡойоу кәрәк-яраҡтары, һауыт-һаба, ҡорамалдарын алдарына теҙеп ҡуйып, һәр береһе үҙенең был эсемлекте ҡойоу тәртибен тәфсирләп һөйләне. Баһалама ағзаларына тыңлап ҡына түгел, һәр оҫтабикәнең буҙаһын тәмләп ҡарап, баһалау бурысы йөкмәтелде. Бер үк эсемлекте ҡойоу ысулдарының төрлөлөгө, һәр эсемлектең үҙенә генә хас тәме ғәжәпләндерҙе уларҙы.

Баттал оҫтабикәләре Рәмзиә Суфиянова менән Лидиә Шәғәлинаның урындығында ҡул тирмәне, киле, тимерҙән яһалған тағы ниндәйҙер ҡорамал, ағас һауыт-һаба урын алған. "Беҙ буҙаны боронғо ысул менән ҡоябыҙ. Һоло ярмаһын ҡыҙҙырып, ҡул тирмәнендә тартабыҙ. Киләлә лә төйөргә була, әммә беҙ үҙебеҙгә ҡулайыраҡ ысулды һайланыҡ. Ҡул тирмәнендә тартыу көстө ала, шуға күрә ирҙәребеҙ тимерҙән электр менән эшләүсе ҡулайлама яһап бирҙеләр. Буҙа ҡойорға беҙ ҡәйнәләребеҙҙән өйрәндек, һөҙгәндә иләк аҫтына һалына торған ошо асалы ағас та, буҙа әсетеү өсөн ағасты соҡоп эшләнгән был оло күнәк тә - ҡәйнәләрҙән ҡалған ҡомартҡы, һаҡлап ҡына тотонабыҙ. Буҙаға һыйырҙың эс майын (туң май) һалып ҡайнатабыҙ. Бер ниндәй ҙә әсетке һалмайбыҙ, үҙе ултырып әсей", - тип буҙа ҡойоу серҙәре менән уртаҡлашты оҫтабикәләр.

Ғәлиәхмәр ауылынан килгән Миңлекамал Илһамова, буҙа ҡойоу ысулын шиғыр юлдары менән тасуирлаһа, ауылдашы Мәймүнә Лоҡманова үҙенә хас ихласлығы, алсаҡлығы менән шуларҙы һөйләп ишеттерҙе: "Минең буҙа эшләргә тотоноуыма иремдең үпкә сире менән ауырып китеүе сәбәпсе булды. Ҡайҙа әле, буҙа менән дауалап ҡарайым, тип, "Юлдаш" радиоһынан ишеткән ысулды ҡулланып, ҡоя башланым. Нисек ишеттем, шулай эшләнем: һоло, арыш ондарын ҡатыштырып бутайым, һарыҡтың эс майын табала иретәм, бер ни тиклем төтәп, ҡыҙып китергә тейеш ул. Әйтергә кәрәк, буҙа эсә торғас, иремдең сире лә уҙҙы..."

Оҙонгүл ауылы оҫтабикәһе Гөлсөм Сәғитдинова иһә һоло, арыш, тары, ҡарабойҙай, арпа - биш төрлө ондо ҡыҙҙырып ҡоя икән буҙаны. Яғылып ҡына торған, тотош күперек кенә, бик тәмле булып сыҡты Гөлсөмдөң буҙаһы!

Ҡобағош ауылынан килгән буҙасылар үҙҙәренең матур сығыштары менән күңелдәрҙе күтәреп ебәрҙе. Буҙа ҡойоу ысулын да шиғри формала еткерҙе улар. Люциә Ғәйфуллина иһә бик тәмле буҙаһының серен асты: "Мин геркулесты ит турағыстан тартып, арыш оно ҡушып ҡоям буҙаны. Һыйырҙың туң майын ҡулланам. Ҡымыҙ һатырға сыҡҡанда, буҙа ла алып сығам. Быныһын аҡса эшләүҙән бигерәк, башҡорттоң был файҙалы эсемлеген дә белһендәр, тигән теләктән эшләйем. Халыҡтың төрлөһө бар, буҙаны белмәгәндәре лә осрай..."

**Шулай итеп, уңғанлыҡҡа, оҫталыҡҡа майҙан тотҡан буҙасылар ярышы тамам. Халҡыбыҙҙың милли эсемлеген онотолоп, юғалып ҡалыуҙан һаҡлап, боронғо ысулдарға тоғро ҡалып, шул уҡ ваҡытта яңы һулыш өрөп, ҡәҙерләп торған ошо уңған, бөтмөр ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ - барыһы ла еңеүсе, тип баһаланды.**

**Миңнур БАЙҒАРИНА,**
**Учалы районы**
**Наурыҙ ауылы ағинәйе.**

*АФАРИН!*

# БАЛАЛАР - АУЛАҠ ӨЙГӘ

**Өфөлә башҡорт гимназиялары уҡыусылары өсөн "Аулаҡ өй. Өләсәйҙәр менән осрашыу" проектын ойошторалар. Саралар "Бишбармаҡ" студияһында үтә. Проекттың маҡсаты- өлкән быуындың йәштәргә башҡорт халҡының мәҙәни кодын тапшырыу.**




Өфөнөң башҡорт гимназияларынан 750 уҡыусы башҡорт халҡының милли ризыҡтарын әҙерләү буйынса оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнаша, милли йолалар, костюмдар, уйындар, көнкүреш менән таныша. Проектты Башҡортостан Башлығы гранттары фонды ярҙамында БашТурСоюз ойошторa .Оҫталыҡ дәрестәрен "Селтәр" студияһында ҡатнашыусы әүҙем пенсионер ҡатын-ҡыҙҙар һәм Башҡортостандың артистар берләшмәһе вәкилдәре үткәрә. Саралар башҡорт телендә бара.

"Күп балаларҙың ауылда өләсәйҙәре юҡ, милли традицияларҙы, фольклорҙы белеүселәр, йәнле башҡорт телендә һөйләшеүселәр менән аралар өҙөлә, - ти проектты башлаусы "Бишбармаҡ" студияһына нигеҙ һалыусы Венера Биккужина. - Проект ошо бушлыҡты тултырырға тейеш. Өлкән быуын вәкилдәренең һәм уҡыусыларҙың бергәләп сәй эсеп, уйын формаһында үткән сараларҙан һуң балаларҙың милли мәҙәниәткә һәм телгә ҡыҙыҡһыныуы артыр тип көтәбеҙ".

Сара бер нисә өлөштән тора. Башта балалар ашнаҡсы менән бергә ваҡ бәлеш бешерә. Тирмә нисек ҡоролоуы һәм башҡорт кейеме элементтарының нимә аңлатҡаны тураһында һөйләшәләр. Программаның төп өлөшө - милли йолаларҙы, йәғни "Килен һөйөү" йәки яңы тыуған сабыйға исем ҡушыу йолаларын сәхнәләштереү. Һуңынан балалар алып барыусылар менән бергә "Йәшел яулыҡ", "Үгеҙ йөҙөк кемдә" уйындарын уйнай. Осрашыу эремсек, ҡорот, талҡан ашап, бергәләп сәй эсеү менән тамамлана. Унда ҡатнашҡан һәр бала иҫтәлекле бүләк ала.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҘУР ЭШТӘР...

## бәләкәйенән башлана!

*✓ Ришат Хажғәле улының: "Туған телебеҙҙе һаҡлауҙағы иң бәләкәй эштәрҙең береһе нимә тип уйлайһығыҙ?" - тигән һорауына: "Башҡортса һөйләшеү!"- тип дәррәү яуап биреүҙәре күңелгә май булып яғылды.*



**Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы Туған телдәр көнө айҡанлы матур сараға нигеҙ һалып, Башҡортостандың урта һөнәри белем биреү учреждениелары студенттары араһында "Осҡон" Асыҡ интеллектуаль уйындары үткәрҙе.**

Ҙур йылғалар инештәр менән тулыланған кеүек, туған телде һаҡлау, уны үҫтереү ҙә бәләкәй генә эштәрҙән башлана - һәр кем өсөн был сараның төп һабағы ошоно аңлауҙа булғандыр. "Һәр башҡорт үҙенең иле, халҡы өсөн нимәлер эшләргә тейеш. Беҙ ҙә ошо ябай ғына хәҡиҡәтте тормошҡа ашырыу өсөн колледжда бәләкәй генә эштәр алып барабыҙ. Башҡорт телен өйрәнәбеҙ, башҡортса сараларҙа әүҙем ҡатнашабыҙ. Мәҫәлән, "Родина" кинотеатры менән килешеү төҙөлгән, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре кинотеатрҙа башҡорт фильмдарын ҡарау, актерҙар һәм режиссерҙар менән осрашыу форматында үтә. Уларҙың тәүгеһе "Рәми дәресе" тигән проект булды. Хәҙер М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры менән дә ошо тәжрибәне дауам итәбеҙ. Бөгөн уйынға килгән балаларға ла, һәр берегеҙ башҡорт телен үҫтереү өсөн бәләкәй эштәр башҡарып йәшәгеҙ, тип әйтәбеҙ", - тип мөрәжәғәт итте студенттарға Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры Ришат Сабитов. Шулай ҙа Ришат Хажғәле улының: "Туған телебеҙҙе һаҡлауҙағы иң бәләкәй эштәрҙең береһе нимә тип уйлайһығыҙ?" - тигән һорауына: "Башҡортса һөйләшеү!"- тип дәррәү яуап биреүҙәре күңелгә май булып яғылды. Йәштәребеҙ хәҡиҡәттең ошоноһон йәшәйеш ҡануны итеп алып, киләсәктә үҙ ғаиләләрендә үҙ телендә һөйләшеп, үҙ милләтенә балалар үҫтереп, уларҙы туған телле итһен ине инде.

Уйын үтәсәк залда баш ҡалала төрлө һөнәр үҙләштереп йөрөүсе башҡорт йәштәренең бер-береһен: "Һин - Бөрйәндәнме?", "О, бында ла әбйәлилдәр!" - тигәнерәк сәләмләүен ишетеү генә лә уның әһәмиәтен билдәләгәндер, моғайын. Баһалама рәйесе, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты Эльвира Рәхимова ла уйындың уларға бер-береһе менән танышырға, туған телендә аралашырға мөмкинлек биреүен һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Күңелдәре үҫеп, байып ҡайтырҙар, тигән өмөттәмен. Ошонда килеү өсөн генә лә улар күпме әҙерләнде, китаптар аҡтарҙы, белгәнен ҡабаттан иҫкә төшөрҙө. Был ысынында ла тел байрамына әүерелде", - тине ул. Һуңғы арала популярлашып киткән квиздарҙан айырмалы рәүештә, ойоштороусылар видеоҙма, әкиәт сәхнәләштереү кеүек талаптар ҙа өҫтәгән, был да уйынға үҙенсәлек бирҙе. Һәр хәлдә, был сара колледж студенттарын берләштерер бер интеллектуаль майҙансыҡҡа әүерелә алды. "Осҡон" әлегә баш ҡаланың 6 уҡыу йортоноң студенттарын ғына йыйһа, киләсәктә республиканың бөтөн төбәктәре йәштәре лә уның усағы янына тупланыр, тигән ышаныста ҡалабыҙ.

Еңеүселәргә килгәндә иһә, 1-се урынды Өфө күп профилле һөнәр биреү колледжының "Ете ырыу", 2-се урынды Өфө сауҙа-иҡтисад колледжының "Теге етәү", 3-сө урынды Башҡорт архитектура, төҙөлөш һәм коммуналь хужалыҡ колледжының "Рухлылар" командалары яуланы. Шулай уҡ төрлө номинациялар ҙа билдәләнде.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА.**

ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨ

# АЛДАНМАҒЫҘ, ТИ...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев үҙенең исеменән эш иткән мутлашыусылар хаҡында иҫкәртте.**

Уның һүҙҙәренсә, аферистар уның йәки парламенттың структура бүлексәләре етәкселәре исеменән ялған аккаунттар асып, мессенджерҙарҙа депутаттарға хәбәрҙәр ебәрә. Мәҫәлән, закондар сығарыу йыйылышында ниндәйҙер тикшереү тураһында яҙалар. Федераль хеҙмәт хеҙмәткәре шылтыратһа, уның һорауҙарына яуап бирергә кәрәк, тиҙәр. Константин Толкачев әйтеүенсә, был уның исеменән ялған хәбәр таратыуҙың тәүге осрағы түгел, ләкин һуңғы көндәрҙә айырыуса әүҙемлек күҙәтелә. "Был осраҡта иң мөһиме - шәхси контакт. Хәбәр яҙған кеше менән шәхсән һөйләшкәнсе, бер ниндәй ҙә саралар күрергә кәрәкмәй. Ошо ябай ғына ҡағиҙә һеҙҙе етди хаталарҙан һәм аҡсағыҙҙы юғалтыуҙан һаҡлай. Уяу булығыҙ", - тине ул. Билдәле булыуынса, 2023 йылда Өфөлә йәшәүселәр мутлашыусыларға 1,4 миллиард һум аҡса биргән.

# ҠУЯНДЫ ЛА АШАТ...

**Башҡортостанда ҡырағай хайуандар ниндәйҙер ризыҡҡа өмөтләнеп, кешеләр янына яҡынлай.**

Экология министрлығының матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, һунар инспекторҙары ҡышҡыһын йәнлектәрҙе ашатыу өсөн йыш ҡына урманға сыға. Ҡабан сусҡалары ҡышты имен-аман үткәрә, тик ҡар ҡатламы 30 сантиметрҙан бейегерәк булғанда улар, айырыуса йәш хайуандар, тейешле кимәлдә туҡлана алмай.

Башҡортостанда айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә ҡырағай хайуандарҙы ҡышлатыу өсөн 170 тонна мал аҙығы әҙерләнгән. Мышы, ҡабан, ҡоралай, ҡуян һәм башҡа хайуандарҙы ашатыу уларҙың популяцияһын һаҡларға мөмкинлек бирәсәк, ти белгестәр.

# БАШҠОРТ МОҢОН ДАНЛАП

**Яҡташыбыҙ Ирек Байышев Амстердам университетында донъя музыкаһына күҙәтеү семинарында сығыш яһаған, тип хәбәр итә Мәҙәниәт-ара хеҙмәттәшлек үҙәге.**

Ирек Байышев Өфөлә тыуған, 1992 йылдан Лейпцигта йәшәй. Ул 2003 йылда Рус даны ҡорам-һәйкәле янында Рәсәй әрмеһе рәттәрендә хеҙмәт иткән башҡорт яугирҙары иҫтәлегенә мемориаль таш ҡуйыуҙы ойоштороғайны. Базальтта немец, башҡорт һәм рус телендә "1913 йылғы халыҡтар һуғышы. Уландары Рәсәй әрмеһендә хеҙмәт иткән башҡорт халҡы иҫтәлегенә" тип яҙылған. Өс йылдан һуң ошоға оҡшаш һәйкәл Дрезденда ла ҡуйылды. Ирек хәҙер быңдай мемориал Парижда ла булырға тейеш, тип хыяллана.

Был сарала Ирек Байышев йыр, бейеү, уйын ҡоралдары фольклоры һәм хәҙерге музыка хаҡында инглиз телендә лекция уҡыған.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Дао: тигеҙлек нисек барлыҡҡа килә

Уңышлы тормош баланс талап итә. Бөтә проблема шунда, күпселек тигеҙлекте консерватизм тип күҙаллай. Бындай тигеҙлек, үкенескә күрә, уңыш менән рифмалашмай.

Икенсе яҡтан, тигеҙлеккә өлгәшеү тормош күңелһеҙ булырға тейеш, тигәнде аңлатмай. Миҫал өсөн бәүелсәкте алығыҙ: ул бағанаға беркетелгән таҡтанан ғибәрәт, уның осона балалар ултыра һәм бәүелә. Был уйын тигеҙлеккә өлгәшеүҙең бихисап мөмкинлеген бирә. Мәҫәлән, һеҙ бер үк ауырлыҡтағы ике баланы үҙәктән ярты метр арауыҡта ултыртаһығыҙ һәм маҡсатҡа өлгәшәһегеҙ. Әммә бындай тигеҙлек бик күңелһеҙ буласаҡ. Балаларға таҡтаның иң осона ултырып, тигеҙлек барлыҡҡа килгәнсе, кәүҙә торошон төрлөсә үҙгәртеп, сиратлап, бер-береһенән өҫкәрәк күтәреү оҡшай. Шулай уйнау ҡыҙығыраҡ та.

Тигеҙлекте эҙләү бик файҙалы, әммә уны һуңғы сиктә генә эҙләгеҙ. Яҡшы тормош менән маҡтанған кешеләр сиккә килеп терәлгәндә лә тигеҙлек булдыра белә. Ә башҡалар, тиерһегеҙ? Беҙҙең донъяла ғәмәл ҡылыусылар, күҙәтеүселәр, һәм үҙ-үҙҙәренән, нимә булғанын һорашыусылар йәшәй!

## Өс күсәр

"Дао" һүҙе беҙгә Азиянан килгән һәм тигеҙлеккә өлгәшергә ярҙам иткән юлды аңлата. Әгәр бизнеста дао булдырырға теләһәгеҙ, тормошоғоҙҙоң барлыҡ өлкәләрендә лә шундай тигеҙлеккә өлгәшергә кәрәк. Мейегә һәм интеллектҡа ғәҙәти булмаған ошо концепцияны ҡабул итеү өсөн тәүҙә бер нисә билдәләмәне формалаштырырға кәрәк. Ғәмәлдә иһә улар бөтөнләй юҡ. Беҙ үҙебеҙгә асылды аңларға ярҙам итер өсөн йүнәлеште үҙебеҙ булдырабыҙ.

Интуицияға ундай ориентирҙар кәрәкмәй, әммә мейегә кәрәк. Әлегә мейегеҙҙең хеҙмәтенән баш тартмаҫ элек, был йүнәлештәр уңыштарығыҙҙы күҙәтергә ярҙам итер. Фәндә тәбиғәт күренештәрен классификациялау өсөн билдәләмәләр (понятиелар) системаһын ҡулланалар. Мәҫәлән, матдәнең ҡаты, шыйыҡ һәм газ хәлендәге торошо үҙ-ара бәйле. Тәбиғәт был торошторҙы билдәләү өсөн тәбиғи тирбәлеш шкалаһын булдырған. Кешеләр тәбиғәт күренештәренең механизмын аңлауҙы еңеләйтеү өсөн был торошто билдәләмә аша аңлата. Шуның кеүек, беҙ матди, интеллектуаль һәм рухи донъя араһында шартлы айырма үткәрәбеҙ, әммә ғәмәлдә улар араһында бер ниндәй айырма юҡ.

Матди донъя бер үк ваҡытта рухи булып тора, интеллектуаль - матди, рухи - матди һәм интеллектуаль. Бары тик берҙән-бер сикһеҙ аң ғына ғәмәлдә.

Хатта лабораторияларҙа бәләкәй генә өлөшсәләрҙе тикшергән физиктар-ядро белгестәре өлөшсәне күҙәтеү акты ошо өлөшсәнең барлыҡҡа килеү сәбәбе булып тора, тигән һығымтаға килгән. Беҙ уны күҙәткән ваҡытта ул серле таяҡ менән һелтәгән кеүек барлыҡҡа килә һәм күҙәтеүҙе туҡтатыу менән шунда уҡ юҡҡа сыға. Аптырарлыҡмы? Тимәк, күҙәтеүсе, күҙәтеү акты һәм күҙәтеү объекты бер үк ваҡытта әүҙемлек күрһәтә һәм башҡаларын тыуҙыра.

Күҙәтеүсе - ул һеҙҙең ысын "Мин"егеҙ, рухи асылығыҙ. Күҙәтеү һеҙҙең интеллектығыҙ ярҙамында тормошҡа ашырыла. Күҙәтеү объекттары матди донъя менән күрһәтелгән. Әгәр һеҙ үткәндәрҙәге рухи остаздар билдәләгән һәм скептик ҡарашлы физиктарҙың ҡайһы берҙәре раҫлаған ошо бәйләнеш мәғәнәһен аңлаһағыҙ, ысынбарлыҡта бөтә нәмәнең уйҙарығыҙ кимәлендә тормошҡа ашыуын күрерһегеҙ.

Уйлаусы, уйлау акты һәм уйҙар үҙҙәре - бер үк ысынбарлыҡтың өс ҡыры. Әммә һеҙҙең - уйҙарығыҙ емеше генә булмауығыҙ ҙа аңлашыла. Һеҙ хатта уйҙарығыҙ ағышын күҙәтә алаһығыҙ. Француз философы һәм ғалимы Рене Декарт бер ваҡыт: "Мин уйлайым, тимәк, мин йәшәйем", - тигән. Минеңсә, формулировка бер аҙ сәйерерәк. Уға: "Мин йәшәйем, тимәк, уйларға һәләтлемен", - тиергә кәрәк ине.

Беҙ - уйҙарыбыҙ ғына түгел икән, уйламайынса ла йәшәй алабыҙ. Йәғни йоҡлағанда уйламайбыҙ. Әгәр төштәребеҙҙе өйрәнә башлаһаҡ, үҙебеҙҙең тән генә түгеллегебеҙҙе аңларбыҙ. Йоҡобоҙҙоң иң тәрән өлөшөндә төш күрмәүебеҙ беҙгә үҙебеҙҙең уйҙан ғына тормауыбыҙҙы раҫларға ярҙам итә. Тәрән йоҡонан беҙҙә бары тик "яҡшы йоҡлағанмын" тигән тойғо ғына ҡала. Тимәк, беҙ уйламаған ваҡытта ла йәшәгәнбеҙ. Бынан тыш, уйҙар араһында һәр саҡ киңлек, бушлыҡ пауза була. Ошо бушлыҡ һеҙҙең ысын "Мин"егеҙ инде. Һеҙҙең ижади "Мин"егеҙ. Һеҙҙең илаһи "Мин"егеҙ. Шулай итеп, беҙҙең маҡсат - һеҙҙе тормошоғоҙҙоң барлыҡ өлкәләрендә тигеҙлек булдырыу һәм бизнес өлкәһендә даоны табыу өсөн уйығыҙҙы файҙалана алған нөктәгә еткереү.

**Пьер МОРАНСИ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 21 ФЕВРАЛЬ - ХАЛЫҠ-АРА ТУҒАН ТЕЛ КӨНӨ

**Был бик мөһим байрам көнө ЮНЕСКО-ның Генераль конференцияһы тарафынан 1999 йылдың 17 ноябрендә иғлан ителә һәм 2000 йылдан башлап билдәләнә. Ул тел һәм мәҙәни күп төрлөлөккә булышлыҡ итеү маҡсатында булдырыла.**

Туған тел көнөн 1952 йылдың 21 февралендә Бангладешта булған фажиғәле ваҡиғаларға арнап һайлайҙар. Ул саҡта үҙҙәренең туған бенгал телен яҡлап һәм илдең дәүләт телдәренең береһе тип таныуҙы талап иткән бер төркөм студенттар полиция пуляларынан һәләк була. Шунан алып Бангладешта туған теле өсөн һәләк булғандар көнө билдәләнә, ә бөтә донъя Туған тел көнөн үткәрә.

**Халыҡ-ара туған тел көнө тураһында ҡыҙыҡлы факттар:**

● Яҙмала иероглифтар ҡулланылғанға күрә ҡытай теле донъялағы иң ҡатмарлы телдәрҙән һанала. Шулай уҡ Дағстандағы табасаран халҡының теле лә ҡатмарлы, унда исемдең (һүҙ төркөмө) 48 килеше бар, ҡайһы бер диалекттарҙа хатта 53. Ә бына АҠШ һәм Канадала йәшәгән индеецтарҙың хайда тигән халҡында 70 префикс (һүҙ алдына ҡушылған ялғау), Төньяҡ Американың ерле халҡы булған чиппева телендә ҡылымдың 6000 формаһы, эскимос телендә хәҙерге заманды белдергән 63 форма ҡулланыла, ә ябай исемдәрҙең 252 флексияһы (һүҙ үҙгәреше) бар.

● Исландиялағы Эйяфьятлайокютль вулканы 2010 йылда атылыуы телевидение һәм радио дикторҙары өсөн ысын мәғәнәһендә һынауға әйләнгән. Ә һеҙ был һүҙҙе дөрөҫ әйтә алаһығыҙмы?

● Латин теле фән һәм Ватикандың рәсми теле һанала, әммә ул "үле" тел, сөнки көндәлек аралашыуҙа ҡулланылмай. 21-се быуат аҙағына әлеге көндә булған 6800 телдең яртыһы юғаласаҡ, тип иҫәпләйҙәр. Юғалыу янаған телдәрҙә 2500-дән дә аҙыраҡ кеше һөйләшә.

● "А" өнө булмаған тел юҡ. Иң үҙенсәлекле өндәрҙең береһе - чех телендәге "ржщ" тигән өн, уны теле асылған балалар иң аҙаҡтан өйрәнә. Шулай уҡ бушмен телдәрендәге шартлап сыҡҡан өндәрҙе, "Аллаһ" тигән һүҙҙәге "л" өнөнөң ғәрәпсә әйтелеше лә үҙенсәлекле иҫәпләнә.

● Ә бына япон телендә "л" өнө бөтөнләй юҡ, шулай уҡ улар беҙҙең өсөн ғәҙәти һаналған "в", "ж", "ф", "ч", "ц", "ш", "щ", "е", ы" өндәрен дә айырмайҙар.

● Канар утрауҙары халҡы һыҙғырып һөйләшә белә. Уларҙы быға гуанчи тигән аборигендар өйрәткән. Был урындағы тәбиғәт үҙенсәлектәренә бәйле, сөнки бер-берең менән һөйләшергә шаңдау ҡамасаулай. Һыҙғырыу "телен" хатта мәктәптәрҙә өйрәнәләр.

● Ер йөҙөндә "мамихлапинатана" тигән иң тос һүҙ бар, ул "ике яҡ та теләгән, әммә эшләгеһе килмәгән эште атҡарырға риза булыр тигән өмөттә бер-береңә ҡарау", йәки "һүҙһеҙ аңлашыу" тигәнде аңлата.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**6-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Башаҡ. Дельфин. Тараҡ. Ҡылыс. Янсыҡ. Атайсал. Кашалот. Алама. Ҡамсат. Ағуна. Кит. Баржа. Айыу. Тибр. Рикша. Алиби. Сара. Нишатыр. Нерпа. Оркестр. Төньяҡ.

**Вертикаль буйынса:** Косатка. Ҡашмау. Ми. Ламантин. Дары. Импорт. Сатҡы. Балет. Карта. Тюлень. Рәйес. Ташсы. Армыт. Ҡунаҡ. Ра. Яла. Буран. Лама. Морж. Алаша.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 февраль Премьера! "Бөйрәкәй. I өлөш"** (Т. Ғарипова). 16+

**29 февраль "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

**1 март "Килен"** (З. Мусина, З. Бураҡаева), драма. 16+

**2 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

**3 март "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 февраль "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

**Премьера! "Күктә ике йондоҙом балҡығанда"** (И. Лоҡманов), моноспектакль. 16+

**29 февраль "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 12+

**1 март "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+

**"Уйҙарымдан ғына юғалма..."** (Р.Н. Гюнтекин), музыкаль драма. 12+

**2 март "Играем Пушкина: Царевна-лебедь"** (А. Пушкин), әкиәт. 11.00 6+

**3 март "Йәшәгән ти..."** (М. Ладо), драмеди. 18.00 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 март "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин). 19.00 12+

**2 март "Кошкин дом"** (С. Маршак). 12.00, 15.00 0+

**"Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 14.00 0+

**3 март "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

**"Два кота"** (О. Штырляева). 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 февраль** Т. Сәйфуллин исемендәге дәүләт академия хор капеллаһы һәм камерный оркестр. 6+

**29 февраль Рәфис Сирусиндың** концерты. 6+

**"Барокко на все времена"** концерт. 6+

**1 март "Веснянка"** концерт. 6+

**"Вечер старинного русского романса"**. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**29 февраль, 1 март Премьера! "Метранпаж мажаралары"** (А. Вампилов), комедия. 12+

**2 март "Өс суска балаһы"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 13.00 0+

**"Алға, Баламишкин!"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедияһы менән Ишембай районы Этҡол ауылында. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Память в объятиях моих"** (З. Усманова), пластик спектакле менән **26 февраль -** М. Аҡмулла исемендәге БДПУ 10.00, **27 февраль -** Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы, Республика инженер лицей-интернаты 15.30, **28 февраль -** Өфө статистика һәм иҫәп-хисап техникаһы колледжы. 14.00. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 март "Өфө. Ваҡыт тауыштары"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

## БР Милли музейы

**1 март** Ротангтан кашпо үреү. 14.00 6+

**2 март "Ата-бабалар нисек йәшәгән"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 15.00 6+

**"Билбау үрәбеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 14.00 6+

ПРЕМЬЕРА!

# ҺУҢҒЫ УСАҠ ТА ҺҮНЕРМЕ?

**Ошо көндәрҙә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә "Аҡһаҡ" драмаһы беренсе тапҡыр күрһәтелде. Яңы спектаклде зал тулы тамашасы тын алырын да онотоп ҡараны: тиҫтә йылдар элек яҙылған булһа ла, бөгөн дә актуаль мәсьәләләр күтәрелде әҫәрҙә.**



Яңы спектакль татар драматургы Марат Ғиләжевтың үткән быуаттың 80-се йылдары аҙағында уҡ ижад иткән "Бисура" пьесаһы буйынса ҡуйылған. Милли йәштәр театрының ус төбөндәй генә урынды биләгән бәләкәй сәхнәһендә бер ғаилә миҫалында тотош халыҡ, хатта ил яҙмышы сағылыш таба. Аҡһаҡ ҡушаматлы ҡарт әбейе менән генә донъя көтә һәм күптән бер-берсенә ҡарата мөнәсәбәттәре һыуынған булһа ла, ғәҙәт буйынса көн дә мейес башына урын йәйеп, арҡа терәшеп йоҡлайҙар, һәүетемсә көндәре үтә тора. Күршеләре лә шулай йәшәй: күрше әбей көн дә ете бөпкәһе менән ҡаҙҙарын әҙләй, бабайы тәмәкеһен көйрәтеп, инеп-сығып йөрөй. Быуа ошо һиллекте Аҡһаҡ ҡарттың ваҡытываҡыты менән аңы томаланып, яңылышып китепме, кәртә-ҡураһын ниндәйҙер ҡара көстәрҙән емереүен, уларға ҡаршы өй эйәһе сығыуын күреүе генә боҙа. Ошонан һуң ул уйлана, тормошонан мәғәнә эҙләй, уны үҙгәртеү теләге лә барлыҡҡа килә хатта. Ҡапыл ҡунаҡҡа ҡайтып төшкән килендәре уның ошо дәртен тағы ла нығыраҡ ялҡынландырып ебәрә, тик эргә-тирәһендәге башҡа берәү ҙә уның был кисерештәрен уртаҡлашмай. Сөнки улар араһындағы мөнәсәбәттәр күптән инде аңлап ҡабул итә алыр, ярҙам ҡулы һуҙыр эскерһеҙ хистәргә ҡоролмаған...

"Аҡһаҡ" спектакле тамашасыларҙы ауылдағы һуңғы усаҡ һүнһә, донъябыҙ ниндәйгә әүерелер, тигән глобаль проблема ғына түгел, ә ир һәм ҡатын, атаәсә һәм бала, күрше-күлән араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында ла уйланырға мәжбүр итә. Йәш саҡта тормош эш һәм аҡса артынан ҡыуған кешеләрҙе ғүмер ахырында яңғыҙлыҡ һағалап тора. Аҡһаҡ та кинйә улынан бала көткән йәш килененә: "Улың тыуһа, беҙҙең турала һөйләрһең", - тип ныҡышҡас, уның: "Ә нимә тип һөйләйем һуң, ҡайным?" - тигән һорауынан шаҡ ҡата. Ысынлап та, ниндәй хәтирәләр ҡалдыралар улар килгән быуындарға?

- Спектаклдә күтәрелгән темалар бөтә донъя өсөн көнүҙәк һәм бер бөгөн генә лә түгел. Ауылдар тарҡала, ҡалалар ҙа үҙгәрә - спектаклдәге "яман рухтар" көслөрәк булып сыға. Ә бит яңы идеялар, ижад, асыштар, кешеләр араһындағы матур мөнәсәбәттәр - быларҙың барыһын да ҡалаға ауылдан сыҡҡан кешеләр алып килә. Шуға кешенең бала сағы ауылда үтергә тейеш, тип әйтәбеҙ бит. Сөнки унда күңел бөтөнлөгө, рухи үҫеш бар. Тик бына нисәнсе быуын инде ауылдарҙың йәйләп тарҡалыуын, уларҙы туплап торған мәктәп һәм мәҙәни усаҡтарҙың ябылыуын, атай нигеҙенең буш ҡалыуын күҙәтәбеҙ. Ауыл бөтһә, ҡала йәшәрме? Бына ошо мәсьәләгә күҙҙәрҙе аса, әсе дөрөҫлөктө ҡабул итә алмайбыҙ һәм хәл итеү юлдарын да эҙләмәйбеҙ бөгөн. Спектакль баш ҡаланың йәш тамашасыһын ошо турала уйландырыр, моғайын.

Был коллектив менән тәүге тапҡыр эшләйем. Баштараҡ хатта ҡурҡыу ҙа тойҙом, сөнки спектаклдә ҡатнашҡан актерҙар мин беренсе курста уҡығанда әле күп кешеләр сыҡҡан сәхнәләрҙә генә ҡатнашып, уларға ауыҙ асып һоҡланып ҡарап йөрөгән ағай-апайҙарым. Мине ҡабул итерҙәрме икән, тигән һорауҙар тыуҙы. Ә бына эшләй башлағас, ҡабул иттеләр, матур эшләнек. Киләсәктә лә йәмғиәтебеҙҙе борсоған актуаль темаларға спектаклдәр ҡуйылыр, тигән өмөттәмен, - тине премьеранан һуң һорауҙарға яуап биреп ҡуйыусы режиссер Фирғәт Ғарипов.

Спектаклде ике состав менән уйнайҙар. Аҡһаҡ ролендә Башҡортостандың халыҡ артисты Нәғим Нурғәлин һәм Венер Камалов, уның ҡатынын - БРҙың халыҡ артистары Альбина Кашанова һәм Зифа Дәүләтбаева, өй эйәһен - Рәмзил Сәлмәнов һәм Вадим Ҡылысов, күршеләрҙе - Мәғәфүр Усманов һәм Илсур Хәбиров, күрше ҡатынды - Сулпан Әбдрәхимова һәм Зилә Сәйетова, килендәрҙе Гөлбинә Сафуанова, Гөлсөм Бикбулатова, Гөлсәсәк Зарипова уйнай, шулай уҡ шәүләләрҙе Салауат Юлдашбаев, Әбйәлил Үтәбаев, Динислам Сафин, Байегет Мөхәрләмов көүҙәләндерә. "Башта, был ҡатмарлы пьесаны уҡығас та, ул фәҡәт беҙҙең театрға тап килер микән, беҙгә бит күберәк йәштәр йөрөй, тигән шик-шөбһәләр менән алды беҙҙе. Әммә Фирғәт Рәмил улы барыбыҙҙы ла уңышлы эшләйәсәкбеҙ, был әҫәрҙе ҡуйыу кәрәк, кеше үҙенең тормош мәғәнәһен, ҡиммәттәрен аңларға тейеш, йәштәр быны күреп белергә тейеш, тип күңдерҙе. Минең өсөн был ҙур ролде башҡарыуы еңелдән булманы, сөнки бындай ҡаты, ҡырыҫ холоҡло героиняларҙы уйнағаным юҡ, ә хис-тойғоларҙы, күҙ йәштәрен күрһәтмәҫкә кәрәк ине. Тормош тик алһыу төҫтәрҙән генә тормай, кешеләр араһынағы мөнәсәбәттәр ҙә төрлөсә була һәм спектаклдә сағылыш тапҡандарына ла урын бар. Театр булғас, ундайҙарын да күрһәтергә тейештер һәм тамашасылар нисек ҡабул итеүен тағы бер нисә тапҡыр сәхнәгә сығып уйнағас, белербеҙ. Шулай ҙа тетрәндерер, уятыр, моғайын", - ти төп ролдәрҙең береһен башҡарыусы Альбина Кашанова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуңғы кешеһе менән бергә мәңгелек йоҡоға талған ауылда Аҡһаҡ ҡарттың мейес мөрйәһенән быҫҡытып ҡына төтөн сығарып маташҡан өй эйәһенә ҡарап, ошо минутта йорттоң ишеге асылып китер ҙә, кинйә улдарының килене эсен кәпәйтеп, ире менән килеп инер кеүек тойолғайны. Һәр хәлдә, күңелдәрҙе болоҡһотоп, яман уйҙар тамам ялмап алмаһын өсөн тамашасы ошоно көсәне. Тик тормош ысынбарлығы бөтөнләй башҡа шул. Быны М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының яңы спектаклен ҡарарға барып, күберәк кешеләр төшөнһөн ине.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# ҮТЕМБЕЙ ӘҘӘМ

**Яңы йорттоң үткелеге яҡты, иркен. Хужалар үткелекте матур һүрәттәр менән биҙәгән.**

**Үткелек.** Тамыры яҡшы таныш булһа ла, унан яһалған әлеге һүҙ ҡулланылмауы бик йәл. Ә бит үткелектә һәр көн, һәр кем була. Рус телендәге "прихожая"ға тура килә ул. *Ҡунаҡты үткелектә тотоу килешмәҫ. Түр яҡҡа үткелектән үң ишегенән үттек.*

**Үткәүел.** Бер мәғәнәһе - йәйәүлеләр юл аша сыға торған урын. Мәҫәлән: *Ер аҫты үткәүеле. Машинаға үткәүелдә туҡтау тыйыла.*

Үткәүелдең икенсе мәғәнәһе - һирәк урман, үтәнән-үтә күренгән ағаслыҡ. Миҫалға: *Ҡайын үткәүелендә әләк бешкән. Йәш шыршылар үҫеп, үткәүелде ҡапланы.*

**Үтембей.** "Хәйләкәр", "йылғыр" тигән сифаттарҙы алыштырған һүҙ. Миҫал өсөн: *Үтембей әҙәм. Үтембейҙең ҡармағына эләгеп ҡуйма.*

**Үтәләк.** "Үтәләк" тиер урынға ниңәлер "шумовка" тип һөйләйбеҙ. "Үтәләк" ул - аш-һыу болғатыу, унан нимәнелер һоҫоу өсөн хеҙмәт иткән тишекле йәлпәк ҡалайлама. "Үтәләк"тең ҡайһы бер һөйләштә "сулпы" тигән синонимы ла бар. Миҫалдар: *Уңайлы үтәләк. Бауырһаҡты үтәләк менән һоҫоп ал.*

**Үрмәк.** "Үрмәк" - ҡатын-ҡыҙ яланаяҡ кейә торған йәйге аяҡ кейеме, босоножка. *Күн үрмәк. Яҙ иртә килгәс, май айында уҡ үрмәк кейҙек.*

**Шулай итеп, хәтеребеҙ үтәләгә көн дә яңғыраған һүҙҙәр донъяһынан тик туған телебеҙгә туған, яҡын һүҙҙәрҙе һөҙөп алһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӨКӨШӘ ТОРҒАН КӘЗӘГӘ...

## Хоҙай мөгөҙ бирмәгән

Ағыу яһаған ағыуҙан үлер, һөңгө яһаған һөңгөнән үлер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йыш ҡына кешеләр көлөү объектына әйләнермен тип ҡурҡып, изгелек эшләүҙән тыйыла.

**(Сара Бернар).**

Гонаһтарҙың күләгәһе оҙон.

**(Ирланд мәҡәле).**

Данға ярһып ынтылыуҙан да, ҡурҡып тайпылыуҙан да һаҡлан.

**(Аристотель).**

Үҙ өйөндә бәхетлеләр генә тормошта бәхетле.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше бик ҡаты ауырып китә һәм түшәгенән дә тора алмаҫ хәлгә килә. Ул үҙен аяуһыҙ яҙмыш алдында көсһөҙ бер йән эйәһе итеп хис итә башлай. Хәл белешергә килгән бик күп һанлы туғандары, таныштары үҙҙәренең йөрөләүе, яҙмышты әрләүе менән уның был тойғоһон тағы ла тәрәнәйтә генә. Бары тик ҡатыны ғына өндәшмәҫ һәм сабыр булып ҡала. Ул ирен йәлләмәй, ә хәленә инә, хәстәрләй, уның күңелен күтәрергә тырыша. Кистәрен усаҡ яғып, иренә аҙағы бәхетле тамамланған ваҡиғалар тураһында һөйләй. Үҙе лә ире алдында матур булырға, ирендә йәшәргә һәм яратырға көс тыуҙырырға тырыша. Тик яңғыҙы ҡалған ваҡыттарҙа ғына ул башҡалар ишетмәһен өсөн башын тәҙрәгә тығып, йәшертен генә күҙ йәштәрен түгә. Ә уның күҙ йәштәре тамған урында иҫ киткес матур ағас үҫеп сыға.**

**Бына бер ваҡыт улар йәшәгән ҡалаға үҙенең белеме менән аҡылы менән танылған бер табип килә. Унан әлеге ауырыу ирҙе ҡарауҙы үтенәләр. Табип ауырыуҙы ҡарай һәм:**

**" Һин һауығаның һәм аяҡҡа баҫаһың, тик йәлләү шишмәһенән һыу эсеүеңде туҡтат һәм өй алдында үҫкән ағастың емешен аша", - ти. Ауырыуҙың ҡатыны бөтөн туғандарын, таныштарын өйҙән ҡыуып сығара. Ул иренә тәҙрә төбөндә үҫкән ағастың емешен килтереп бирә. Емеште ашағас, ауырыу ир тәненең яҙылып киткәнен тоя һәм аяғына баҫа.**

**Китер алдынан табип ҡатынға баяғы ағастан тағы бер емеш килтереүен үтенә. Ул был емештең орлоҡтарын сокоп ала һәм уны бөтөн донъяға таратасағын әйтә. Кешеләр был емеште ашап, ысынды ялғандан, ихласлыҡты икейөҙлөлөктән, йәлләүҙе хәлгә кереүҙән айырырға өйрәнергә тейеш, ти ул".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24007

Баш мөхәррир: Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Ләйсән ВӘЛИЕВА, Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2750
Заказ - 111418